*"Баланың башын юҡ-бар һәм кәрәкмәгән нәмәләр менән тултырыр алдынан һәр әсәй һәм атай уның аңына - белем, йөрәгенә аҡыл һалырға тейеш. Сөнки Хәҡиҡәттән һәм намыҫтан алыҫ булған, аҡыл менән һуғарылмаған йөрәк теләһә ниндәй яуызлыҡ үҫкән "баҫыу" кеүек. Балаларың күңеленә ни сәсһәң, киләсәктә шуны урырһың..."*

*Фатхулла ГЮЛЕН, төрөк ғалимы һәм суфыйы.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

5 - 11 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№49 (363)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҡшылыҡ...**

яҡшылыҡ тыуҙырыуына ышанам



5

**Турист беҙгә килем килтерә -**

был эште лә ситтәр килеп, ҡулдан тартып алмаһын инде



6

**Сәхнәлә атайымды уйнайым,**

шул ынтылыш мине сәнғәткә алып килде...



8-9

**Гүзәл заттың көсө...**

көсһөҙлөгөндә һәм аҡылында



12-13

**ТВ программа**

14

### УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# "КИСКЕ ӨФӨ" - ЙӘШӘҮ ТӨҪӨ

Киң мәғлүмәт саралары, ғәҙәттә, ике төрлө була. Уларҙың бер төрлөһө власть даирәләренә хеҙмәт итә, уларҙы аҡлай, яҡлай, маҡтай, ярамһаҡлана, икенсе төрө - ул даирәләргә ҡаршы көрәшә, уларҙы тәнҡитләй һәм яманлай, оппозиция ролен үтәй. Шул уҡ ваҡытта күп булмаған ҡайһы бер баҫмалар был төрҙәрҙең береһенә лә инмәй, улар һымаҡ көндәлек тормош ваҡ-төйәктәре менән булышмай, ә фәлсәфәүи, донъяуи проблемалар күтәреп, халыҡтың аңын киңәйтергә, аҡылын тәрәнәйтергә тырыша. Совет осоронда бындай баҫмаларҙан "Новый мир", "Наука и жизнь" журналдарын, "Литературная газета"ны яратып уҡый инек.

Ошондайыраҡ йүнәлештә ижад ителгән "Киске Өфө" рухи даирәбеҙҙә универсаль мәсьәләләр күтәреү майҙаны, ирекле фекер йөрөтөү трибунаһы, халҡыбыҙ яҙмышына ҡағылған сетерекле һорауҙарға яуап эҙләүсе шәм, милләттәштәребеҙҙе битарафлыҡтан сығырға өндәүсе, уларҙын күҙен асыусы баҫма булып әүерелде. Был баҫманы уҡып, халыҡ яҙмышын ҡайғыртҡан һәр бер кеше үҙенә рухи аҙыҡ таба ала. Әлбиттә, халҡы өсөн йәнен аямаған, пассионар кешеләр бик күп булмай. Улар халыҡтың 3-4 процентын тәшкил итә. Был әҙ түгел, сөнки улар үҙ артынан бөтә халыҡты эйәртә. Әгәр шундай кешеләребеҙҙең яртыһы ғына ла "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырып алып уҡыһа, унын тиражы 10-15 тапҡырға артыр ине.

Ошо гәзитте уҡып ултырыу аша ғына һәр кем үҙ халҡының, республикаһының, иленең, бөтә кешелектең рухи донъяһына ҡушылып йәшәй башлай. Ә инде унда яҙыша, фекер алыша, ниндәйҙер мәсьәләне хәл итеүҙә ҡатнаша башлаған кеше тормошто әүҙем етәкләүселәрҙең береһенә әйләнә, унын үҙ йәшәйешенен мәғәнәһе арта. Шуға күрә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу, уны даими уҡып барыу, кәрәк саҡта унын штаттан тыш хәбәрсеһе булыу беҙҙен граждандыҡ позицияһының мөһим бер өлөшө булып тора. Шуны иҫтә тотайыҡ, туғандар!

**Хәлил БАРЛЫБАЕВ, РФ Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры.**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**"Бер саҡ атайым миңә шулай тине: "Улым, һин донъяға күҙ йәштәре менән тыуҙың, ә әйләнә-тирәңдәгеләрҙең барыһы ла быға шатланды. Донъя ҡуйғанда үҙең шатланырлыҡ, ә тирә-яғыңдағылар һинең үлемеңә ҡайғырып иларлыҡ итеп йәшә..." Ләкин бындай йәшәү нисек була - хәҙер кешеләр быны белмәй. Беҙ айға космик караптар осорабыҙ, шул уҡ ваҡытта күршеләребеҙҙе йөҙгә танып белмәйбеҙ. Бәйләнеш өсөн шундай ҡеүәтле технологияларға эйәбеҙ, ләкин кешеләр бөгөнгө кеүек тарҡау йәшәгән башҡа заман булдымы икән?! Беҙ күпте беләбеҙ кеүек. Әммә кеше өсөн ысын бөйөклөк нимә - быныһын иһә бөтөнләй белмәйбеҙ".**

*Робин ШАРМА.*

### ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

- **2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланып килә. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө: 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.**
- **Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтексәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға Дини календарь алып та шатланыр.**
- **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек.**
- **Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.**



*✓ Ул осор матбуғатһыҙ йәшәү һис мөмкин түгел ине. Йәмғиәт, идеология, фән, иҡтисад, илдәрҙең үҙ-ара бәйләнеше буйынса мәғлүмәттәрҙе күберәк һәм алдараҡ белергә ынтылыу хас булды беҙгә.*



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

**Ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу, яҙылыуҙы ойоштороу әүҙем генә бара. Бөгөн ҡыҙыҡһындырыу уятмайынса һәм өгөтләү алып бармайынса, халыҡты гәзит-журналдарға яҙҙырыу мөмкин дә түгелдер. Ошо сәбәпле, төрлө кимәлдәге осрашыуҙар, саралар үткәрелә. Улар "Матбуғат байрамы" тип тә атала. Баймаҡта үткән байрамда мин дә ҡатнашҡайным.**

# ГӘЗИТТЕҢ БӘҪЕ БУЛЫР...

## уҡыусы менән бәйләнеш булғанда




**“Гәзитегеҙ шәп!” - ти Федераль почта хеҙмәтенең БР идаралығы директоры урынбаҫары Тәлғәт Гәрәев.**

Ленин: "Гәзит - ул коллектив агитатор, коллектив пропагандист, коллектив ойоштороусы",- тип әйткән, буғай. Эйе, үҙ дәүерендә гәзит шундай роль уйнағандыр. Башҡа саралар булмағас, гәзиткә өгөт-нәсихәт, ойоштороу эше ышанып тапшырылған булған. Ышаныс аҡланған да. Лениндың һүҙен түгел, үҙен яҡшылап белмәгәндә мин, пионер, төҫлө биҙәлешенә ҡыҙығып, "Пионерская правда" ны алдырырға булдым. Кешегә утын ярып, аҡса эшләнем. Мин, бәләкәй генә ауыл малайы, гәзиттә яҙылған урыҫса һүҙҙәрҙе әллә ни аңламай ҙа инем. Әммә алдырҙым.

Һуңлап ҡына булһа ла, юғары белем алдым. Мәктәптә эшләнем. Ул осор матбуғатһыҙ йәшәү һис мөмкин түгел ине. Йәмғиәт, идеология, фән, иҡтисад, илдәрҙең үҙ-ара бәйләнеше буйынса мәғлүмәттәрҙе күберәк һәм алдараҡ белергә ынтылыу хас булды беҙгә. Әгәр ниндәйҙер өлкәлә мәғлүмәтһеҙ булһаң, һис шикһеҙ, һинең абруйҙың түбән төшөүе мөмкин ине. Фундаменталь баҫмаларҙан тыш, "Белем" ойошмаһы төрлө тармаҡҡа ҡағылған бынамын тигән брошюралар баҫтырҙы. Мәҫәлән, 70-80-се йылдарҙа йыл һайын 25-28 төр баҫма алдыра инем. Билдәле, уларҙың барыһын да уҡып сығып булмай. Кәрәкле мәғлүмәтте генә йыя барып, һуңынан папкаларға тупланым. Әлеге көндә лә ул йылдарҙа алынған баҫмалар миндә һаҡлана. Һағынғанда аҡтарғылайым. Минең мәғлүмәт "ауырыуым" әле лә һүрелмәне. "Йәмғиәт сире", "Башҡорт мөхите", "Башҡорт балы", "Ҙур һәм бәләкәй һуғыштар", "Замандаш" кеүек папкаларым бөгөн дә тулылана бара.

Халыҡ матбуғатҡа күпләп яҙылды элек. Күҙ алдынан китмәй: почтальон Шәһиҙә ике саҡрымдағы 60-70 өйлө Ҡыуат ауылына гәзит-журналдарҙы ике ҙур сумкаһына һалып тарата, көн һайын ике тапҡыр урап сығыр ине ауылды. Ә бөгөн гәзиттәрҙе хозпакетҡа ғына һалалар. Уныһы ла көн аша таратыла. Шулай ҙа, шөкөр, Башҡортостан иң әүҙем матбуғат дуҫы, тигән маҡтауҙар ишетелә.

Бөгөн дә матбуғатһыҙ булмайҙыр инде. Әле 7 район, төбәк, республика, 2 үҙәк баҫма алдырам. Һуңғы осор халҡымдың формалашыуы, тарихи үҫеше тураһындағы мәғлүмәттәр йыш баҫыла, улар һине ҡыуандыра ла, борсой ҙа, үкендерә лә. Бик шәптәре лә бар яҙмаларҙың. Беҙҙең быуын бик тә naҙан үҫте, үҙ тарихын, халҡын белмәне. Октябрь беҙгә ил бирҙе, тел бирҙе, тинек. Ышандыҡ. Инандыҡ. Шуға хеҙмәт иттек. Мин, мәҫәлән, партия сафында тормаһам да (1937 йылда атылған "халыҡ дошманы"ның улымын), партия, хөкүмәт ҡарарҙарын пропагандалаусы булараҡ алдын булдым, тип уйлайым. Заманында партияның өлкә, район органдары хеҙмәтемде йыл да билдәләне. Халыҡ алдында лекциялар менән сығыш яһау, әңгәмә-бәхәстәр йыш булды. Халыҡты әйҙәү, ойоштороу үҙе бер хеҙмәт ине. Гәзит-журнал яңы төҙәлөш, яңы хеҙмәт еңеүе тураһында яҙып, дәртләндермәй, сәмләндермәй ҡалманы.

Бөгөн бындай йыйылыштар йыйылмай. Алынған мәғлүмәт тик үҙең өсөн генә һымаҡ, сөнки уртаҡлашыр аудитория юҡ. Етмәһә, матбуғат баҫмаларын уҡыу күберәк хафаға һала. Сөнки ваҡытында ябыҡ булған тарихи, ижтимағи мәғлүмәттәрҙе уҡып, илдең, халыҡтың бөгөнгө хәлен күҙ алдына килтереп, хәлһеҙлегенде, көсһеҙлөгөндө тойоуҙан ары китмәйһең.

Элек матбуғат Ленин билдәләүенсә эшләһә, бөгөн ул яңы үҙенсәлеккә эйә. Ул - информатор. Ул - тауар. Ул тупланған журналистар хеҙмәте. Тауар наcар булырға тейеш түгел. Ул тауар халыҡ аңына йүнәлтелһен, кешегә кеше булып үҫергә, йәшәргә булышлыҡ итһен. Сенсация артынан ҡыуып, "заманса" йүнәлеш алған баҫмалар кеше ихтыяжы өсөн эшләмәйҙер. Бөгөн беҙҙә бөтәһе лә сенсацияға ҡоролған. Аптырарһың, Үҙәк ТВ, дөрөҫөрәге, "Вести" каналы бер көндө аҙашҡан, аяҡһыҙ ҡалған, йонсоған эттең тәүге эйәһенә ҡайтып, шатлыҡ "кисергән" яҙмышын 4-5 минут буйы тәмләп-тәмләп һөйләне. Ә эшһеҙ, ас, йәшәр урыны булмаған, бөтә яҙмышы емерелгән кешеләр тормошо бик күрһәтелеп бармай бит. Йөрәгең ҡайһыһын йәлләп әрнер. Ваҡытында бик абруйлы "Комсомольская правда" бөгөн рәсми рәүештә порно пропагандалыусы гәзиткә әйләнгән, тиҙәр. Һуңғы йылдар, шөкөр, уны уҡымайым.

Элек профессиональ журналистар һирәк ине. Бөгөн БДУ-ла махсус журналистика бүлеге бар. Әммә унда уҡып сыҡҡан журналистарҙың әҙерлек кимәле нисек икән, тигән һорау ҙа борсой әле. Сөнки үҙебеҙҙең матбуғат баҫмаларын уҡып та һәр саҡ шатлыҡ кисермәйһең бит. Гәзит-журналдарҙа хаталар үтә күп. Үҙем грамматиканы өйрәнеп "япҡаныма" 59 йыл инде. Үҙгәрештәр булғыланы, әммә ҡағиҙәләр ҡалды бит. Ҡайһы бер һүҙ, һүҙбәйләнеш дөрөҫ тәржемә ителмәй. Авторҙарҙың яуапһыҙлығы тураһында һөйләй инде быныһы. Мин тел белгесе түгел. Әммә гәзит-журналдарыбыҙ ҡабул ителгән ҡағиҙәләрҙе тормошҡа ашырыусы эталон булырға тейештер, тип уйлайым. Беҙ уларға ҡарап дөрөҫләргә тейешбеҙҙер үҙ хаталарыбыҙҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милли баҫманың бәҫе китмәһен өсөн милләт менән бәйләнештә булыу кәрәктер. Һәр номер "карусель штампы" менән баҫыла ҡалһа, ялҡытыр ул. Ниндәйҙер бер темаға мәҡәлә яҙыла икән, унда кемдеңдер фекере сағыла, төрлө фекер баҫманы байыта ғына. Ҡасандыр мин һеҙгә, һәр номерға үҙ фекеремде белдереп хат яҙырға ниәтләнәм, тип яҙғайным. Ул уйымдан ҡайтҡаным юҡ. Эскелек, дин тураһында яҙҙым. Тик баҫылманы. Элек редакциялар һәр хатҡа яуап хаты яҙа ине. Хәҙер ундай хаттар юҡ, тиерлек. Һеҙгә яҙыуым да шунан: белеүемсә, "Киске Өфө"нө күптәр уҡый. Уның үҙ йөҙө, абруйы бар. Хеҙмәтегеҙ уң килһен. Беҙ гәзиттәрҙе алдырырбыҙ ул. Тик беҙҙе, уҡыусыларҙы, автор булырға теләгәндәрҙе, ситләтмәгеҙ. Тауар сифатлы булһын. Ул сифатты үҫтереү - һеҙҙең һәм беҙҙең дә бурыс.**

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**▸ "Һеҙ ни тиклем беҙҙең һымаҡ булырға ынтылған һайын, шул тиклем беҙгә оҡшаясаҡһығыҙ. Уйлап ҡарағыҙ әле: һеҙгә был кәрәкме? Юҡ, беҙгә оҡшай барған һайын, һеҙҙә көс ҡулланыу үҫәсәк, йүләрләнгән имбецилдар, грамотаһыҙҙар күбәйәсәк, йән башына тура килгән ҡорал иҫәбе артасаҡ. Бына ни өсөн мин һеҙҙән үтенеп һорайым: урыҫтар, зинһар өсөн, беҙгә оҡшарға тырышыуығыҙҙы туҡтатығыҙ!"**

*Майкл МУР, АҠШ кинорежиссеры,*
*Канн кинофестиваленең "Оскар" һәм*
*"Алтын пальма ботағы" призлары лауреаты.*

**▸ "Американлылар ҙа эшен юғалта, уларға ла кредит түләргә кәрәк, ләкин улар бөтә ғаиләһе менән хоккейға бара. Ә беҙ? Бер шешә араҡы һатып алырға була икән, ниңә аҡсаны хоккейға йәиһә театрға сарыф итергә... Ошоғаса ниндәйҙер бер эске тынысланыу етешмәй беҙгә. Шуға күрә беҙ һәр ваҡыт йәшәргә йыйынабыҙ ғына, ә американлылар әле үк йәшәй".**

*Ирина РОДНИНА,*
*фигуралы шыуыу буйынса ун тапҡыр - донъя, өс тапҡыр олимпия чемпионы.*

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Йошкар-Олала Рәсәй республикалары һәм сит илдәрҙең рус театрҙары ҡатнашлығында "Дуҫлыҡ күпере" халыҡ-ара фестивале булып үтте. Унда Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ла ҡатнашып, ике номинацияла еңеү яуланы. Театрҙың режиссеры Мөсәлим Күлбаев - "Иң яҡшы спектакль өсөн", актер Андрей Ганичев "Иң яҡшы ир-егет роле өсөн" дипломына лайыҡ булды.

✓БР Контроль-иҫәп палатаһы республика өсөн стратегик әһәмиәтле предприятие иҫәпләнгән "Башфармация"ла дәүләт милкен, бюджет аҡсаһын маҡсатлы һәм һөҙөмтәле файҙаланыу мәсьәләләрен тикшерҙе. Дарыуҙарҙы күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу менән шөғөлләнгән предприятиела бик күп етешһеҙлектәр асыҡланды. "Башфармация" дәүләт унитар предприятиеһы генераль директоры З. Фәттәхов эшенән бушатылды, был вазифаға М. Тойғонов тәғәйенләнде.

✓Башҡортостан граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан яңыһына күсереү буйынса ла Рәсәй кимәлендә лидерҙарҙан иҫәпләнә. Быйыл беҙҙә 3709 кеше авария хәлендәге торлаҡтан яңыһына күсерелгән. Әле барлығы 10110 кеше туҙған һәм авария хәлендәге йорттарҙа йәшәй. Уларҙы күсереү дауам итәсәк.

✓Баш ҡалала "Бала йөрәгенә ҡағыл" тигән Бөтә Рәсәй акцияһы үтә. Бакулев исемендәге Йөрәк-ҡан тамырҙары Ғилми үҙәге директоры академик Лео Бокерияның инициативаһын Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов, шулай уҡ Хөкүмәтебеҙ һәм Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҙа хуплап ҡаршы алды. Өфө халҡы, хатта "Салауат Юлаев" командаһы көйәрмәндәре лә проектта ҙур энтузиазм менән ҡатнашты. Мәрхәмәтлек йүнәлешендәге был акция сиктәрендә Республика кардиология диспансерында 160 бала тикшерелде лә инде. Академик Лео Бокерия телекүпер аша Өфө врачтарына йөрәк ауырыулы балалар буйынса консультация бирҙе. Акция 12 декабргә тиклем дауам итәсәк.

✓Башҡортостанда һалҡын тейҙереп ауырыусылар һаны 49 процентҡа кәмегән. "Роспотребнадзор"ҙың БР идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, ноябрҙә барлығы 32273 кеше ОРВИ менән ауырыған. Уларҙың 65,6 проценты - балалар. Ауырыусылар һанының кәмеүе предприятиелар һәм учреждениеларҙа эпидемияға ҡаршы саралар күреү һөҙөмтәһе. Ул саралар дауам итә.

✓ *Президент Советы 2010 йылды Башҡортостанда Республика йылы тип иғлан итергә һәм уны Башҡортостандың 20 йыл эсендә үткән юлының йомғаҡтарын барлауға арнарға кәрәк, тип тапты.*



*ТӨРЛӨҺӨНӨН*

# БАШҠОРТОСТАНДА...

## Республика йылы

**Яңыраҡ булып үткән БР Президенты Советы ултырышында 2010 йыл Башҡортостанда Республика йылы тип иғлан ителде.**

2010 йыл ваҡиғаларға бай буласаҡ. Алда торған иң мөһим тантаналарҙың береһе - Бөйөк Ватан һуғышының 65 йыллығы. Байрамға әҙерлек барышында хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашып, тере ҡалған 12 мең кешегә һәм 90 мең тыл ветеранына ҡарата ҡабул ителгән йөкләмәләрҙе бойомға ашырыу күҙаллана. Бынан тыш, федераль кимәлдә Рәсәй Президенты ҡарары менән киләһе йыл Уҡытыусылар йылы тип иғлан ителде, шуға күрә Башҡортостанда ла был йүнәлештә күп эштәр башҡарыласаҡ. Рәсәйҙә Франция йылын үткәреү ҙә республиканың ижтимағи-сәйәси һәм социаль-иҡтисади тормошонда сағылыш табасаҡ, Европалағы партнерҙар менән аралашыу яңы кимәлгә сығасаҡ.

Традиция буйынса, республикабыҙҙа йыл тематикаһы мөһим социаль проблемаларҙың береһен хәл итеү менән бәйләнгән. Быйыл Башҡортостан Рәсәй Федерацияһы составында үҙ автономияһының 90 йыллығын билдәләне, 1990 йылда республика суверенитеты тураһында Декларация ҡабул итеүгә лә киләһе йыл егерме йыл туласаҡ. Башҡортостан был арауыҡ эсендә граждандарҙың тормошон яҡшыртыуҙа, төбәкте тотороҡло үҫтереүҙә ярайһы уңыштарға өлгәште. Президент Советында сығыш яһаусы БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт советнигы Сергей Лаврентьев әйтеүе буйынса, элек-электән һәр халыҡ, һәр кеше үҙ тарихы өсөн ғорурлыҡ, Тыуған иле киләсәге өсөн яуаплылыҡ тойғоһо кисергәндә генә илдең үҫешенә өлгәшергә мөмкин. Шуны иҫәпкә алып, Президент Советы 2010 йылды Башҡортостанда Республика йылы тип иғлан итергә һәм уны Башҡортостандың 20 йыл эсендә үткән юлының йомғаҡтарын барлауға һәм республика халыҡтары тормошонда дәүләттең ролен актуалләштереүгә арнарға кәрәк, тип тапты.

# ПЕНСИЯ АРТА...

**2009 йылдың башынан алып инде дүртенсе тапҡыр пенсия арта. Хәҙер 1 декабрҙән ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының база өлөшө 2562 һум күләмендә билдәләнде һәм өҫтәмә 612 һум тәшкил итте.**

80 йәше тулған пенсионерҙар һәм 3-сө дәрәжә инвалидтарҙың пенсияһы 1224 һумға артты һәм 5124 һум тәшкил итте. Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарына, саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәт осоронда һәләк булған яугирҙарҙың ҡабаттан никахҡа инмәгән тол ҡатындарына, саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәткә алынған осорҙа һәләк булған яугирҙарҙың ата-әсәләренә, "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән наградланған инвалидтарҙың ике пенсияһы ла арттырылды. Рәсәй Федерацияһы алдындағы айырым ҡаҙаныштары өсөн ай һайын өҫтәмә матди тәьминәт күләме лә арттырылды. Был пособие Советтар Союзы Геройҙарына, РФ Геройҙарына, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына, Ленин ордены менән бүләкләнгәндәргә түләнә.

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# ЙӘШТӘР - АҠСАЛЫ ЭШ...

## эш биреүселәр тәжрибә талап итә

**Йәш белгестәр өсөн эшкә урынлашыу бөгөн иң актуаль проблемаларҙың береһенә әйләнде. Яңы ғына уҡыу йортон тамамлап, ҡулына диплом алған йәш белгестәргә хеҙмәт баҙарында үҙ урынын табыу өсөн күп ҡаршылыҡтарға осрарға тура килә. Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә? Йәш белгестәргә кем ярҙам ҡулы һуҙыр? Был һорауҙарға Башҡортостан Республикаһының Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығының иҡтисади программалар һәм йәштәр мәшғүллеге бүлеге етәксеһе Урал КИЛСЕНБАЕВ яуап бирә:**

- Йәш кеше уҡыу йортон тамамлағас, ҙур тормош юлына аяҡ баҫа һәм яңы ҡаршылыҡтар менән дә осраша. Шулай ҙа беҙ йәш белгестәргә тормош юлында аңғыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ. 2008 йылда ҡабул ителгән "Йәш белгес" республика программаһына ярашлы беҙ уларға эшкә урынлашырға, торлаҡ мәсьәләләрен хәл итергә ярҙам итәбеҙ. Республикабыҙҙа йәштәргә ике тапҡыр "Йәштәргә - эш" акцияһы уҙғарыла. Быйыл ул 18-се тапҡыр уҙғарылды. Республикала беҙҙең ете филиалыбыҙ бар, улар Стәрлетамаҡ, Ишембай, Нефтекама, Сибай, Мәләүез ҡалаларында һәм Шаран, Иҫке Балтас ауылдарында урынлашҡан. Акцияла бөтәһе 80-гә яҡын ойошма һәм предприятие ҡатнаша. Улар беҙгә нәҡ йәштәрҙе эшкә алыу маҡсаты менән мөрәжәғәт итә. Йәштәр ошонда уҡ эшкә алыусы ойошмалар менән таныша, әңгәмәләр уҙғара, резюме ҡалдыра. Ошондай сараларҙан һуң уларға эш табыуы еңеләләшә.

Элек хеҙмәт отрядтары киң танылған булған. 2003 йылда беҙ ҙә шундай уҡ хеҙмәт отрядтарын тергеҙҙек. Әлеге көндә унда 7000-гә яҡын студент, 200 отряд эшләй һәм уларҙың һаны йылдан-йыл арта бара. Әйтергә кәрәк, хеҙмәт отрядында шөғөлләнгән студенттар үҙҙәренә тиҙ эш таба һәм уңышлы эшләп йөрөй. Бында улар әҙ булһа ла тәжрибә туплай, коллектив менән эшләргә өйрәнә, шулай уҡ буласаҡ эш биреүселәр менән алдан таныша. Йыл һайын октябрь айында отрядтар араһында слет үткәрелә, унда йәйге эш һөҙөмтәләренә ҡарап, иң-индәр билдәләнә. Һәр отрядтың үҙенсәлектәре, үҙ йолаһы, хатта гимны бар. Алдағы көндәрҙә төп маҡсатарыбыҙҙың береһе - кешеләрҙе хеҙмәт отрядтарына йәлеп итеү. Ул отрядтарҙа студенттар менән ваҡытлыса эш биреүсе ойошмалар эшләй. Мәҫәлән, ниндәйҙер гәзит студенттарҙан реклама тараттыра. Йәштәр шулай ваҡ эштәрҙән башлай, тәжрибә туплай, ә һуңынан инде күңеленә яҡҡан эшкә урынлаша

Эш мәсьәләһе йәш кеше өсөн бер проблема, артабан уны ғаилә, торлаҡ мәсьәләләре көтә. Беҙ йәштәргә торлаҡ төҙөүҙә лә ярҙам итәбеҙ. 2003 йылда беҙҙә "Торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж йәш ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү" тигән программа ҡабул ителде. Был программа яҡшы ғына эшләп килә, унда ҡатнашыусы йәштәр ҙә арта бара.

Шуны әйтеп үтер инем: уҡыуҙы яңы ғына тамамлауға ҡарамаҫтан, эшкә урынлашҡан ваҡытта йәштәр юғары талаптар ҡуйырға ҡыйынһынмай. Уларҙың ниәте уңайлы шарттарҙа, кабинетта ғына ултырып, күп аҡса эшләүгә ҡайтып ҡала. Шулай ҙа уҙғарылған төрлө әңгәмә-сараларҙан һуң йәштәрҙең фекере үҙгәрә. "Эшкә теләк булһа, бeлəк сыҙар", - ти халыҡ мәҡәле. Бейеклектәр шунда уҡ яуланмай, ниндәйҙер уныш ҡаҙаныу өсөн түҙә кеше ниндәйҙер ауырлыҡтар, һиңауҙар аша үтергә тейеш. Шул саҡта ғына ул хеҙмәт ҡәҙерен, аҡса тәмен аңлар.

Эш биреүселәр ҙә талапты ҡаты ҡуя. Улар, ғәҙәттә, яңы ғына диплом алған йәш кешенән тәжрибә "таптыра". Әгәр ҙә йәш кеше ҡайҙалыр эшләп өлгөргән булһа, ул эш биреүсегә мотлаҡ резюме һәм эш урынынан баһалама, характеристика килтерергә тейеш була. Ә эшләтеп ҡарау йә үҙҙәре ең һыҙғанып эшкә өйрәтеү кеүек күренештәр эш биреүсе ойошмаларға бик үк хас түгел. Ә шулай ҙа йылданйыл беҙҙең менән эшләргә теләүсе ойошмалар һаны арта. Тимәк, йәштәр беҙҙең ярҙамыбыҙҙы аҡлай һәм һынатмай эшләй. Бөгөн патриотик рухлы йәштәр күп - шуныһы ҡыуаныслы. Эшкә урынлашҡас, уларҙа илһөйәрлек тойғоһо тағы ла үҫә һәм улар республикабыҙ үҫешенә ниндәй ҙә булһа өлөш индереү маҡсатында тырышып эшләй башлай.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

*ХОККЕЙ*

# ЮЛАЕВСЫЛАР ҺЫНАТМАЙ

**Ун ике уйын рәттән еңеп, үҙенсәлекле рекорд ҡуйғандан һуң, "Салауат Юлаев " уйынсылары ун өсөнсө уйында отолдо. КХЛ чемпионатының ҡойроғонда һөйрәлгән Новосибирскиҙың "Себер"е уйламаҫтан лига лидерын еңеп ҡуйҙы.**

Бер аҙна үтеүгә, юлаевсылар себерлеләрҙе башҡорт ерендә, "Өфө-Арена" боҙ һарайында ҡабул итте. Новосибирскиҙа еңелеүҙән һуң сәмләнгән майҙан хужалары уйын башынан дәғүәсе ҡапҡаһына ябырылды. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне, 11-се минутта команданың капитаны Виталий Прошкин уңышҡа өлгәште.

Икенсе осорҙа өфөләр баҫымды тағы көсәйтте. Виктор Козлов менән Сергей Зиновьев бер-бер артлы "Себер" ҡапҡаһы артында ҡыҙыл ут яндырҙы. Өсөнсө осорҙа командабыҙҙың иң яҡшы һөжүмселәре Радулов менән Зиновьев бомбардирҙар бәхәсендә үҙ иҫәптәренә яңы мәрәйҙәр яҙҙы. Зиновьев "Салауат Юлаев"та икенсе хет-трик авторы булды. Түҙә был уңышҡа Патрик Торесен өлгәшкәйне. Уйын беҙҙекеләр файҙаһына 6:1 иҫәбенә тамамланды.

Дүшәмбелә баш ҡалаға икенсе Себер клубы - Новокузнецкиҙың "Металлург"ы килде. "Металлург" ноябрь айында ете матч рәттән еңелеп, етеһендә бер генә мәрәй алғайны. Шулай ҙа улар өфөләләргә лайыҡлы ҡаршылыҡ күрһәтә алды. Беренсе осорҙо хатта тигеҙ 1:1 иҫәбенә тамамланы. Һуңынан оҫталыҡ алға сыкты. Икенсе осорҙа иһә, Твердовский менән Григоренко йәнә ике гол индерҙе. Уйын "Салауат Юлаев" файҙаһына 4:2 менән тамамланды. Был ике еңеү яңы еңеүҙәр серияһының башланғысы булыр, тип ышанғы килә.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә республика тауар етештереүселәренә ярҙам һәм уларҙың продукцияһын һатыуҙы ойоштороу саралары һәм транспорт хеҙмәте күрһәткәндә ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау өлкәһендәге закондарҙы күҙәтеү тураһындағы мәғлүмәттәр тыңланды. Билдәләнеүенсә, быйыл туғыҙ айҙа аҙыҡ-түлек сәнәғәте предприятиеларында етештереү күләме кәмегән. Мәҫәлән, колбаса һәм ит ярымфабрикаттары 50 процентҡа кәмерәк етештерелә башлаған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡулланыу баҙарындағы хәл тотороҡло, унда республика тауар етештереүселәренең өлөшө 80 процентҡа барып етә. Улар етештергән тауарҙың сифаты ла яҡшы: Мәскәүҙә үткән "Алтын көҙ-2009" күргәҙмәһенән беҙҙең етештереүселәр төрлө номинацияла 502 миҙал алып ҡайтты, шуларҙың 396-һы - алтын.

✓Оператив кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүсе транспорттарҙа, ғәҙәттә, күрһәтелгән хеҙмәт һәм уның хаҡы тураһында мәғлүмәт булмай. Водителдәрҙең һаулыҡ торошо тураһында медицина белешмәһе юҡлығы, уларҙың пассажирҙар менән тупаҫлығы, салонда тәмәке тартыуы ла ғәҙәти күренеш. "Роспотребнадзор"ҙың БР идаралығы ошондай йүнәлештәге яҙыуҙар менән дә шөғөлләнә һәм ғәйеплеләрҙе административ яуаплылыҡҡа тарттыра.

✓Баш ҡала майҙандары Яңы йылға әҙерләнә. Быйыл Ленин исемендәге майҙанға яһалма түгел, ә тере шыршы ултыртылыр. Уның бейеклеге - 30 метр. 25 метр бейеклектәге икенсе шыршы Конгресс-холл алдында урын алды. Хәҙер уларға ҡупшы уйынсыҡтар элә башланылар. Декабрь урталарында майҙансыҡтарҙа боҙ ҡаласыҡтары ла күренә башлаясаҡ. Ҡыҫҡаһы, баш ҡала майҙандарын Яңы йыл байрамында 29 шыршы биҙәйәсәк. Боҙ ҡаласыҡтары 24-26 декабрҙә төрлө байрамса саралар менән асыласаҡ.

✓Мәскәүҙә 26-28 ноябрҙә үткән "Туған тел уҡытыусыларының оҫталыҡ дәресе" Бөтә Рәсәй конкурсында Өфөнөң 141-се дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Гөлназ Мөхәмәтйәнова ҡатнашты һәм Рәсәйҙәге иң яҡшы туған теле уҡытыусыһы тигән баһаға лайыҡ булды. Ул быйыл "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы -2009" төбәк-ара конкурсында Гран-при яулағайны.

АФАРИН!

# ЯҠШЫЛЫҠ...

## яҡшылыҡ тыуҙырыуына ышанам



**Йылайыр районының Байғужа ауылында йәшәүсе Солтановтарҙы был яҡтарҙа ижади ғаилә тип беләләр. Йорт хужаһы Дамир ағай һәүәҫкәр композитор, ауыл клубында һәм китапханаһында эшләй, мәктәптә балаларҙы музыка дәресенә уҡыта, ә Миңһылыу Әүхәҙи ҡыҙы тарих уҡытыусыһы. Өлкән ҡыҙҙары Гөлфинә БДУ-ның тарих факультетында белем ала, 11 синыфта уҡыусы Гөлсиә лә халыҡ ижады әҫәрҙәренә, йыр-моңға битараф түгел.**

Башҡортостан мәҙәниәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаларында беренсе урындар яулап йөрөгән был ҡыҙ "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсында ла бер нисә йыл рәттән ҡатнашып, тәжрибә туплап өлгөргән. Гөлсиә донъяның бөтмәҫ серҙәренә, йәшәү мәғәнәһенә төшөнөү, үҙен борсоған күп һорауҙарға яуап табыу өсөн был бөйөк эпосҡа ҡабат-ҡабат мөрәжәғәт итә. "Урал батыр"ҙағы кеүек, ысынбарлыҡта ла яҡшылыҡтың яманлыҡтан өҫтөн тороуына ышана. Яҡшылыҡ эшләгән һайын кешенең ыңғай яҡҡа үҙгәрәсәген, изге эштәрҙең кире үҙенә мең сауап булып әйләнеп ҡайтасағын башҡаларға ла еткерергә ынтыла.

- Эпостағы төрлө образдар был тормошта кешенең ниндәй булырға тейешлегенә ишара, - ти уңған ҡыҙ. - Мәҫәлән, Урал батыр көслө, ҡыйыу, бар тереклекте һаҡлаусы, шуға ла ысын ир-егет уның кеүек үҙ халҡы өсөн янып йәшәргә, тыуған иле өсөн йәнен бирергә әҙер булырға тейеш, тип уйлайым. Ҡатын-ҡыҙ Һомай һымаҡ: матур, итәғәтле. Үҙем гел Һомайға оҡшарға ынтылам...

Атаһы әйтеүенсә, Гөлсиә китаптар, гәзит-журналдар уҡырға ла ярата икән. Ғөмүмән, Солтановтар китапты күп уҡый һәм баланың ысын кеше булып формалашыуында художестволы әҫәрҙең, нәфис һүҙҙең роле баһалап бөткөһөҙ, ти улар. Тәрбиә нигеҙендә ата-әсәнең шәхси өлгөһө ятыуын күҙ уңында тотоп, үҙҙәре лә һәр яҡлап камил булырға тырыша. Уҡытыусыларынан да уңған Гөлсиә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әлфиә Ҡоҙабай ҡыҙы Батисова ла гел кәңәштәрен биреп, яңы үрҙәргә дәртләндереп тора. Думбырала, мандолинала, ҡумыҙҙа һәм ҡурайҙа уйнай, ҡурайҙың данын, милли ҡорал булараҡ, егеттәр генә түгел, ҡыҙҙар ҙа таратырға тейеш, ти ул. Әлеге мәлдә гитарала уйнарға өйрәнеп йөрөй.

Гөлсиәне бөгөн иң борсоған мәсьәлә - кешеләрҙең бер-береһенә ҡарата ҡаты, рәхимһеҙ булыуы, тәбиғәтте бысратыуы, уларҙың йөрәктәрен баҫып барған битарафлыҡ. Был проблемаларҙың нигеҙендә хәҙерге замандың матди байлыҡ туплауға ғына ҡоролоуы һәм ата-әсәләрҙең өйҙә балаларын тәрбиәләүгә ваҡытты аҙ бүлеүе ята, тип иҫәпләй ул.

- Атай менән әсәй, ни өсөн оло кешегә ярҙам итмәнең, йәки ниңә ергә сүп ташлап киттең, тип, бер тапҡыр балаһының намыҫына тейһә, ул икенсе юлы улай итмәҫ ине. Мәҫәлән, өлкәндәр менән һаулыҡ һорашып йөрөргә кәрәклекте барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Әммә һаулыҡ һорашһаң да һаулыҡ алмаған ололар була. Беренсе тапҡыр шундай хәлгә тарығандан һуң, мин уны өйгә ҡайтып һөйләгәйнем, атайым менән әсәйем: "Ә һин барыбер һораш", - тип кәңәш бирҙе. Ошондай һөйләшеүҙән һуң, мин икенсе юлы ошондайыраҡ ваҡиғаға осраһам, атай-әсәйгә әйтмәй генә лә үҙем дөрөҫ һығымталар яһай алам.

Бына ошондай аҡыллы, ғәмле һәм сәмле ҡыҙ киләсәктә журналист булып, кешеләрҙе яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа өндәргә, яман ғәҙәттәрҙең кире яҡтарын күрһәтергә хыяллана, был һөнәрҙе һайлауының сәбәбен журналистың башҡаларға тәьҫир итеү көсө булыуы менән аңлата.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Рәсәйҙә иғлан ителгән Йәштәр йылында Гөлсиә Солтанова уҡыуҙа һәм йәмәғәт эштәрендәге уңыштары өсөн юғары баһаға - РФ Президентының 30 меңлек грантына ла лайыҡ булды.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

### УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

***Рәхмәт һеҙгә, шундай матур, уҡымлы, фәһемле гәзит сығарыусыларға. Баш ҡалабыҙ ҙа кистәрен яҡты нурҙарға солғана, һеҙҙең гәзиттән дә шундай уҡ илаһи нур бөркөлгәндәй. Башҡа бер гәзитте лә шундай ихласлыҡ менән уҡымайым. Беренсе күреүҙән үк уға ғашиҡ булдым, тиһәң дә була. Киләсәктә лә шулай үҙ бәҫен юғалтмаһын, күңелдәргә йылылыҡ бөркөп торһон. Ауыр саҡтарҙа күңелде тынысландыра, фәһем бирә торған рубрикаларығыҙ йәшәүен дауам итһен. Тәрбиә темаһына арналған материалдар юғалмаһын. Һеҙгә ижади уңыштар!***

**Светлана ҒӘЛИӘХМӘТОВА,**
**Ғафури районының Бурлы ауылы.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ФАТИРҘЫ ТАРТЫП АЛМАҪТАРМЫ?

**Ипотекаға фатир алғайныҡ, ләкин түләүе ауырлашты: иремә эш хаҡы бирмәйҙәр, үҙем декретта ултырам. Бурысыбыҙ йыйылып киткән хәлдә фатирҙы тартып алмаҫтармы?**

- Кредит буйынса даими түләү ваҡытығыҙҙың көнөндә тейешле взнос индерә алмаһағыҙ, шуның иртәгәһенә үк пеня туплана башлаясаҡ. Уның күләмен, кредит килешеүендә күрһәтелгәнсә, банк үҙе билдәләй. Ул уртаса түләнмәгән взнос күләменең кисектерелгән һәр көнгә ҡарата 0,1-0,5 процентын тәшкил итә. Шуныһына ла иғтибар итергә кәрәк: килешеү төҙөгән саҡта банк тарафынан ҡайһы берҙә взнос кисектерелгән осраҡта бик ҙур суммаға тупланасаҡ түләү күрһәтелә - уға юл ҡуйырға ярамай йәки уны кәметеүҙе суд аша хәл итергә кәңәш бирәбеҙ.

Бурысын түләй алмаған кешеләргә тәүге көндәрҙән үк банк кредитты ваҡытынан алда түләтеү тураһында талап ҡуя. Ә был, тимәк, кеше 10-20 йыл ваҡыт буйына ай һайын түләргә тейешле ҙур сумманы кисекмәҫтән кире ҡайтарыу, тигән һүҙ. Бындай ҡаты талаптан кредит алыусыны йөрәк өйәнәге тотоуы ихтимал. Ләкин тынысланып, уйлап ҡарайыҡ әле: шулай уҡ ҡурҡынысмы был?

Ысынында иһә, кредит суммаһын ваҡытынан алда түләтеү хаҡында ҡарарға килеү банктың үҙенә лә еңелдән түгел. Бының өсөн мотлаҡ судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шуға күрә лә банкирҙарҙың бөтә аҡсаны бер юлы кире ҡайтарыуҙы талап иткән уҫал хаттарын бурыслыға психологик баҫым тип ҡарарға кәрәк. Ә суд иһә банк талабынан ғына түгел, ә башҡа хәлдәрҙең торошон да иҫәпкә алып эш итә, мәҫәлән, бурыстың күләме, бурыслы заемсының, ғаилә ағзаларының тормош һәм аҡса хәле һ.б. Әйткәндәй, белгестәр билдәләүенсә, бындай осраҡта заемсы өсөн бик отошло бер ысул бар: айлыҡ взнос күләме тулмаған хәлдә лә ул ай һайын күпме булдыра ала, шунса күләмдә бурысын ҡаплауға өлөш индерә барырға тейеш. Шул саҡта суд, ғәҙәттә, заемсының намыҫлы һәм тәртипкә буйһонған кеше булыуын, уның үҙ бурысын түләүҙән баш тартмауын, киреһенсә, аҙлап булһа ла түләргә тырышыуын күрә һәм быны ыңғай баһалай.

Гәзит уҡыусының һорауындағы фатирға ҡағылышлы төп мәсьәләгә ҡағылышлы шуны әйтергә кәрәк: "Ипотека тураһында" законға ярашлы, торлаҡты тартып алыу кеүек һуңғы сараны судта ҡарау мәсьәләһе бер юлы ике шарттың тап килгән осрағында ғына хәл ителә:

- Түләнмәгән бурыстың суммаһы кредит килешеүе төҙөгән мәлдәге фатир хаҡының 5 процентынан да кәмерәк тәшкил итмәһә;

- Бурысты түләү ваҡытының кисектерелеүе 3 айҙан да кәм тәшкил итмәһә.

Ошо ике шарт судҡа фатир тураһындағы мәсьәләне ҡарай башлауға нигеҙ бирә. Бурыслы заемсының шулай ҙа милеккә һалынған түләтеүҙе кисектереүҙе һорарға хаҡы бар. Был хаҡта ентекләберәк "Ипотека тураһында" закондың 54-се статьяһын уҡып сығығыҙ. Фатирҙы кире тартып алыу ваҡыты суд тарафынан бер йылға тиклем кисектерелеүе мөмкин.

# АЛДАНМАЙЫМ, ТИҺӘҢ...

**Фатир һатып алырға йыйынам, ләкин уны һатыусы мине төп башына ултыртмаҫмы - шуныһы ҡурҡыта. Бәлки, аҙаҡ был фатирға дәғүә итергә хоҡуҡлы кешеләр йә бәлиғ булмаған балалар барлығы асыҡланыр - ул саҡта мин һатып алған фатирҙан ҡолаҡ ҡағам, тигән һүҙ...**

- Үҙегеҙҙе ана шундай хәүеф-хәтәрҙән һаҡлар өсөн һатыу-һатып алыу килешеүен төҙөр алдынан Федераль теркәү хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығының теркәүҙе туҡтатыу һәм теркәлгән хоҡуҡтар тураһында мәғлүмәт биреү бүлегенә мөрәжәғәт итегеҙ. Унда һеҙ һатып аласаҡ фатир залогҡа һалынмағанмы, уны һатыу тыйылмағанмы йәки уға дәғүә итеүсе кешеләр юҡмы икәнлеген тикшерә алаһығыҙ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Артрит



Олоғая барған һайын быуындар һыҙлаһа, әйелеүе лә ауырлашһа, матдәләр алышыныуын яйға һалыусы төнәтмә эсергә була, ул организмды шлактарҙан да таҙарта. Бының өсөн бәйғәмбәр тырнағы сәскәләре, артыш емештәре, эт муйылы (крушина) ҡайырыһы, шыршы үләне, тал ҡайырыһы, ҡайын япрағын бер күләмдә алып, ваҡларға. 2 ҡалаҡ үләнде 1 литр ҡайнар һыу менән бешереп, төнгөләккә төнәтергә ҡуйырға. Көнөнә 4-5 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 ай.

Быуындарҙы йылытып, 3-5 минут буйына бишофит менән ыуырға (дарыуханала һатыла). Һуңынан марляны бишофит менән сылатып, һыҙлаған быуынға һалып, полиэтилен менән ҡапларға ла төнгөләккә ҡалдырырға. Процедураны 12-14 көн дауам итергә. Иртәнсәк тәндә ҡалған бишофитты йылы һыу менән йыуып төшөрөргә. Тире сабырта башлаһа, дауалауҙы туҡтатып тороғоҙ. Ауыртыу баҫыла башлағас, күберәк хәрәкәтләнергә кәрәк. 2-3 айҙан һуң, дауалау курсын ҡабатларға мөмкин.

## Алоэ һәм юл үләне

Ҡыҙғанысҡа күрә, һуңғы ваҡытта ауырға ҡала алмаған ҡатын-ҡыҙ күбәйә бара. Уларға иң тәүҙә рациондан икмәк, манный бутҡаһын алып ташларға, шәкәрҙе бал менән алыштырырға кәрәк. Көнөнә мотлаҡ ике алма ашарға йәки яңы һығылған алма һуты эсергә кәрәк. Артабан алоэ, бал һәм майҙан торған ҡатнашма ҡабул итегеҙ. 3-5 йыллыҡ алоэның (унан алда алоэға 7 көн һыу һипмәгеҙ) япраҡтарын киҫеп алып, өс көнгә һыуытҡысҡа һалығыҙ. Бынан һуң япраҡтарҙы ваҡлап, бал һәм иретелгән май менән бутарға (1 өлөш алоэға 6-шар өлөш бал һәм май). Һыуытҡыста һаҡларға. 2 ай дауамында 1 ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һөткә болғатып, 2 тапҡыр эсергә. Алоэ менән бергә юл япрағы орлоғонан әҙерләнгән төнәтмә эсергә тура киләсәк. Төнәтмә әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ орлоҡто 400 грамм һыуға һалып, 5-10 минут ҡайнатырға. Ике ай дауамында көнөнә өс тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Халыҡ дауаһын ҡулланыр алдынан табип менән кәңәшләшергә кәрәклеген онотмағыҙ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ *Ситтән килеп, ерҙе хосуси милеккә алырға теләүселәр ҙә күп ул. Әгәр ҙә ерҙе һатыу юлынан китһәк, иң матур ерҙәр урындағы халыҡҡа эләкмәйәсәк. Беҙ унда барып аяҡ баҫа ла алмаясаҡбыҙ.*



ЗАМАНСА ЙӘШӘ, ТУҒАН!

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы ҡатнашлығында республикала Туриндустрия берләшмәһе төҙөлөү тураһында хәбәр иткәйнек инде. Берләшмәнең эше һәм туризмды үҫтереү перспективалары тураһында БР йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрының беренсе урынбаҫары Кинйә КУСКИЛДИН һөйләй.**



# ТУРИСТ БЕҘГӘ КИЛЕМ КИЛТЕРӘ -

## был эште лә ситтәр килеп, ҡулдан тартып алмаһын инде

### Берләшмә ни менән шөғөлләнер?

Туризмды күңел асыу, спорт төрө итеп кенә түгел, иҡтисади тармаҡ булараҡ ойоштороу тураһындағы һүҙ Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы коллегияһының август айында үткәрелгән кәңәшмәһендә тағы бер тапҡыр күтәрелгәйне. Туризм тармағында эшләгән бөтә предприятиеларҙың, хужалыҡтарҙың етәкселәрен, был тармаҡ менән бәйле булған эшҡыуарҙарҙы йыйып, Башҡортостандың Туристик индустрия берләшмәһен төҙөргә ҡарар ителде. Ноябрҙә һикһәнгә яҡын вәкил ҡатнашлығында был берләшмә төҙөлдө. БР иҡтисади үҫеш министры Е. Евтушенко Берләшмәнең рәйесе итеп тәғәйенләнде. Урынбаҫарҙары итеп Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһы ректоры Дегтяров Александр Николаевич менән мине һайланылар. Структураһын раҫланыҡ. Берләшмәлә ете комиссия һәм даими рәүештә эшләй торған дирекция булдырылды. Уның директоры итеп Кинзин Ришат Рәшит улы тәғәйенләнде.

Урал тураһында ишетһәләр ҙә, күптәр Уралдың йөҙөк ҡашы Башҡортостан хаҡында яҡшылап белмәй. Беҙҙең эш ике йүнәлештә башҡарыласаҡ. Беренсеһе, Башҡортостандың брендын күтәреү. Икенсеһе, Ырымбур, Силәбе, Свердловск өлкәләре менән бергәләшеп, "Ҙур Урал" тигән брендты халыҡ-ара кимәлгә еткереү. Бының өсөн туристик хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу, Башҡортостандың туризм өсөн уңайлы төбәк икәнен рекламалау, республика имиджын күтәреү кәрәк. Бер нисә телдә интернет-портал яһау мөһим. Республика туризмы тураһында мәғлүмәт тупланасаҡ реклама-мәғлүмәт үҙәген төҙөү буйынса эштәр бара ла инде. Эске туризм баҙарын тышҡы туризмға конкурентлы булырлыҡ кимәлгә еткерергә кәрәк. Маҡсатыбыҙ шул.

### Эске һәм тышҡы туризмдың нисбәте ниндәй?

Статистик мәғлүмәттәргә күҙ һалғанда, 2008 йылда республикала 206 туристик фирма эшләгән. Туристик фирмаларҙың 94,3 проценты сит илдәргә, сит региондарға турҙар ойоштороу менән генә шөғөлләнә. Былтыр улар миллиард һумдан ашыу түләүле хеҙмәт күрһәтте. Ә эске туризм тураһында беҙҙә аныҡ һандар һәм мәғлүмәттәр юҡ. Һәр кем сикте үтеп, беҙҙең республика буйлап йөрөй икән - ул турист. Ғөмүмән, йәй көндәрендә беҙҙең йылға-күл буйҙарында меңәрләгән кеше ял итә. Шуларҙың яртыһынан күберәге ситтән килеүсе туристар. Нөгөш һыу һаҡлағасы буйҙарында, Хәйбулла яҡтарында - Ырымбур, Бөрйән, Белоретта Магнитогорск, Силәбе, Мәскәү, Новгород һәм башҡа төбәк кешеләре. Уларҙың абсолют күпселеге "ҡырағай" рәүештә ял итә. "Ҡырағай" туризм сәскә атмаһын өсөн ял итеүселәргә шарттар тыуҙырырға кәрәк. Был иҡтисадҡа ла отошло. Шулай уҡ ял итеүҙе тәртипкә һалып ҡына тәбиғәтте лә матур көйө һаҡлап була. Бөрйән районында ғына Агиҙел буйлап йыл һайын 30 меңләп кеше кәмәләрҙә ағып төшә. Утыҙ мең кеше берәр пакет сүп-сар ташлағанда ла, күпме тонна бысраҡ тирә-яҡ тәбиғәткә эләгә. Күпме сүп-сар йылға буйҙарында ятып ҡала. Яртыһы һыуға ҡушыла, яртыһы ярҙарҙа тирә-яҡты сүпләп ята. Рәсәй Конституцияһы буйынса кеше теләгән ерҙә ял итә ала, әлбиттә. Ләкин уның ялы тирә-яҡ мөхиткә зарар килтермәҫкә, уңайһыҙлыҡтар тыуҙырмаҫҡа тейеш. Туристар бер кемгә лә уңайһыҙлыҡ тыуҙырмаһын өсөн, уларҙың ялын ойошторорға кәрәк.



### Уңайлыҡтар, тигәндә, нимә күҙ уңында тотола?

Бөрйәндә үткән кәңәшмәлә БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев "ҡырағай" туристар күпләп ял иткән ерҙәрҙә туҡталыу урындары ойошторорға кәрәк икәнлеген әйтте. Бындай урындарҙа ер кемгәләр ҡуртымға бирелә. Ҡуртымға алған кеше ерен кәртәләп алып, шунда туристик тораҡ төҙөй. Ул торакта утын һаҡлағыс, эргәһендә волейбол уйнау өсөн майҙансыҡ, ҡоҙоҡ, кухнялар, мунса, ултырып ял итеү урыны, ашхана, палатка, автотранспорт ҡуя торған урындар булырға тейеш. Бөрйән районында шундай ун ике урын билдәләнде. Оло Ҡужан тигән ерҙә район етәкселеге тарафынан дүрт кешегә берәр гектар ер бүленде лә инде. Улар тораҡ төҙөү буйынса пландарын тәҡдим итте. Яхин Рәхимйән тораҡты әҙерләп тә ҡуйҙы. Тағы ла Мәндәгол ауылы янында ике туҡталыш урыны әҙерләйҙәр. Ер урындағы кешегә генә бирелә. Ситтән килеп, ерҙе хосуси милеккә алырға теләүселәр ҙә күп ул. Әгәр ҙә ерҙе һатыу юлынан китһәк, иң матур ерҙәр урындағы халыҡҡа эләкмәйәсәк. Беҙ унда барып аяҡ баҫа ла алмаясаҡбыҙ. Ләкин тағы бер мәсьәлә бар: ерҙәрҙең күп өлөшө ауыл хужалығы, ҡайһы бер ерҙәр ауыл советы ҡарамағында, икенселәре - урман фондыныҡы. Закон буйынса был ерҙәрҙә нимәләр төҙөп тә, уларҙы кемгәләр биреп тә булмай.

Быйыл, мәҫәлән, Мәләүез районы Һарғая ауылынан 16 ғаиләгә Нөгөш һыуһаҡлағысы эргәһендәге ерҙәрҙе бүлеп бирҙек. Үҙҙәренә бүленгән ерҙәрҙә улар ял итеүселәр өсөн уңайлы шарттар тыуҙырҙы. Ауыл советы ошо ойошманың акциялар пакетының 51 процентына эйә булды. Ай-ай ярым ваҡыт эсендә ауыл советы ғына 600 меңдән ашыу килем алды. Ләкин ай ярым ваҡыт эшләгәндән һуң уны ябырға тура килде. Проблема тағы ла ергә килеп төкәлде. Ерҙәр рекреацион маҡсаттар өсөн түгел, ә ауыл хужалығы өсөн икәне асыҡланды. Хәҙер беҙ туризм үҫтереү өсөн ҡулай, ләкин ауыл хужалығы һәм башҡа тәғәйенлештәге ерҙәрҙе рекреацион маҡсаттарға күсереү буйынса эш алып барабыҙ.

### Урындағы халыҡ туризм эшенә йәлеп ителәсәкме?

Туризм үҫеше урындағы халыҡҡа файҙа булырға тейеш. Хөкүмәтебеҙ ҡуйған төүге талаптарҙың береһе - халыҡҡа эш урындары булдырыу, уларға туризм ярҙамында аҡса эшләргә мөмкинлек тыуҙырыу. Тик улар был мөмкинлек менән нисек файҙаланасаҡ - быныһы инде халыҡтың үҙенән тора. Ауылдарҙа кеше, эш юҡ, тип зарлана. Ә эргәһенән аҡсаһын күрһәтеп, тигәндәй, туристар үтеп китә. Туристарҙың үҙе менән юлға төйәп алып сыҡҡан консервалары бер нисә көндә ялҡыта. Консервалар урынына яңы ғына һуйылған ит, яңы һауылған һөт, бәлеш ашап китеү ҙур кинәнес булыр ине уларға. Туристар ауылдың натураль ашамлыҡтары өсөн күпме түләргә лә риза. Ошо мәлдә файҙалана белергә генә кәрәк. Башҡорттар аңында үҙенең йортонда булған нәмәне кемгәләр сығарып, йәки алып барып һатыу - кәмселек, тигән аңлау йәшәй. Сауҙәгәрлек һыҙаттары бөтөнләй юҡ. Ә бит тәбиғәт менән аралашырға сыҡҡан ҡала кешеһе өсөн ауыл ҡаймағы ла, ауыл мунсаһы ла - үҙе бер экзотика. Аҙналап тәбиғәт ҡосағында ял иткән туристар рәхәтләнеп мунса төшөүгә ҡуш ҡуллап риза. Яҡ мунсаңды, ҡайнат самауырыңды - бындай рәхәтлек өсөн бер турист та аҡса түләүҙән баш тартмаҫ. Таҙалыҡ-санитария нормаларын боҙмағанда, шәхси хужалығында етештергән, йортонда бешергән продукцияны туристар туҡтала торған урындарҙа һатып буласаҡ. Ошо шарттарҙы тыуҙырһаҡ, урындағы халыҡ та эшле, тирә-яҡ мөхит тә таҙа булыр ине. Әлбиттә, был сезонлы эш. Ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан, "Эш юҡ!" тип тик ятыуға ҡарағанда, был күпкә яҡшыраҡ бит. Бөгөн ҡыш көндәрендә лә Агиҙел буйҙарын туристик маҡсатта ҡулланыу буйынса һүҙҙәр алып барыла. Ҡар йөрөгөстәрҙә, саңғыла маршруттар уйлана.

Беҙҙең халыҡта "Мин үҙ еремдә хужа, мин ни эшләп үҙемдә кәмһетеп, кемгәләр инәлеп, һатынып йөрөргә тейешмен?" тигән ҡараш йәшәй. Менталитетты үҙгәртергә кәрәк. Берәү ҙә һиңә килеп, "Мә! Ал!" тип, ҡулыңа аҡса тоттормаясаҡ. Шәхси хужалығында етештергән тауарыңды аҡсаға әйләндерергә, уны матур итеп төрөп, ҡаптарға һалып, рекламаларға өйрәнер кәрәк. Һатып алыусыны ылыҡтырырға, уны йылмайып ҡаршы алырға, һатыулашып, кәрәк булһа, хаҡты төшөрөргә кәрәк. Әлбиттә, эшҡыуарлыҡ, сауҙәгәрлек сифаттары бөтә кешеләрҙә лә булмай. Ошондай сифаттары булған кешеләрҙе эшкә нығыраҡ егергә, күберәк мөмкинлек бирергә кәрәк. Улар ауылды күтәрәсәк, ауылды эш менән тәьмин итәсәк.

### Тағы ла ниндәй проекттар бар?

Дәүләт кимәлендә этнотуризм, агротуризм буйынса ла проекттар бар. Бөрйән районынан Ҡолғана һәм Әбйәлил районынан Амангилде ауыл советтары этнотуризмды үҫтереү буйынса үҙ-ара килешеү төҙөгән. Был маҡсатта ун ике йорт әҙерләгәндәр. Ләкин был әле теория ғына. Беҙ проекты тормошҡа ашырабыҙ, тиҙәр, тик аҡса кәрәк. Беҙ аҡса бирә алмайбыҙ. Мөмкинлегебеҙ юҡ. Эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса "Стартап" тигән программа бар. Уның буйынса эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәргә 300 мең күләмендә субсидия алыу мөмкинлеге бар. Ә субсидия ҡабаттан ҡайтарылмай. Әгәр баяғы проекты ғәмәлгә ашырырға теләүселәр йыйылышып, комитетҡа мөрәжәғәт итһә, килеп тыуған мәсьәләнең хәл ителеү юлы табылыр ине. Күп аҡсаны көтөп ятыу бер нәмә эшләмәүгә тиң. 300 меңгә тирмәләр ҡуйып, ҡымыҙ бешеп, велосипедтар һатып алып була.

Шулай итеп, ауылдарҙа эш юҡлыҡҡа һылтанып ятыусылар күп. Әммә көн итеү әмәлен табыу мөмкинлеге лә юҡ түгел. Ҡайһы бер илдәрҙә халыҡтың 40 проценты туризм менән мәшғүл. Беҙҙә лә туризм үҫешеп киткәндә, эш урындары хасил булыр, халыҡҡа ғаиләләрен, үҙҙәрен тәьмин итергә мөмкинлектәр асылыр, тигән өмөт бар. Ләкин был мөмкинлек менән файҙалана алаҫаҡтармы, әллә ҡулдан ысҡындырасаҡтармы, быныһы һәр кемдең үҙенән тора. Ә бит был эште беҙҙең ҡулдан тартып алырға әҙер торғандар тирә-яҡ тулы...

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ яҙып алды.**

✓ **_Көкөрт сыҡҡан ерҙәр ҙә сер булған. Әммә урыҫ түрәләре, аҡса биреп, бүләктәр вәғәҙә итеп, һәр төрлө хыянатсы, шымсылар аша серҙәрҙе аса барған. Хәритәгә төшөрөп, ул ерҙәргә хужа булып алғандар._**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БУЛАТ ҠЫЛЫС ОҪТАҺЫ...

## башҡорт улы Булат булыр

Һаткы, Златоуст һәм тирә-йүндәге башҡа заводтар өсөн беҙҙең төбәк, хәҙерге Учалы районының төньяғында урынлашҡан ауылдарҙа күмер һүндереүсе оҫталар эшләгән. Күмер һүндереү бигерәк тә Мулдаш, Көсөк, Мулдаҡай, Иҫке Байрамғол, Ялсығол, Ҡужай, Шәрип, Аҙнаш, Кинйәҡәй (Вознесенка), Кирәбе ауылдарында төп кәсеп булған. Берәүҙәре ябай күмер һүндереүселәр булһа, икенселәре ҡорос иретеү күмерселәре һаналған. Ҡорос иретеү күмерселәре иң оҫталарҙан һаналып, айырым статейный исемлектә торған. Уларҙың күмере лә ҡиммәтерәккә һатылған. Ябай күмерселәр тик ҡайын ағасы ҡулланһа, ҡорос күмерселәре ҡарағас ағасын һәм уның тик 80-100 йыллығын һәм унан да олорағын ҡулланған. Оҫталыҡтары камиллашҡас, ябай күмерселәр ҙә ҡорос күмерселәр исемлегенә индерелгән. Завод хужаларының һорауы буйынса, ҡорос күмерселәрен, уларҙың ярҙамсыларын линейный хеҙмәткә һәм рекрутлыҡҡа (һалдатҡа) алмай ҡалдырғандар.

Күмер яндырыусы оҫталар Һаткы, Алтынтамаҡ, Ҡыуашы, Ҡатау тирәһендәге крепостной крәҫтиәндәр һәм хәҙерге Салауат, Ҡыйғы, Мәсетле, Дыуан райондары халҡы араһында ла бик күп булған. Сөнки тирә-йүндә таш күмер булмау сәбәпле, заводтарға бик күп күмер талап ителгән.

Мәғдәндән иретелгән тимерҙән ҡорос ҡойоу айырым бер оҫталыҡ талап иткән. Тимер бер нисә тапҡыр бик ныҡ эҫелеккә еткәнсе, ап-аҡ булғансы ҡыҙҙырылған. Шул ваҡытта ул окалинанан һуғып таҙартылған. Ул ваҡытта ҡыҙҙырылған тимерҙе бик һизгер оҫталар төҫөнән белгән. Етерлек кимәлдә ҡыҙғанлығын белер өсөн тимерлектең ярым ҡараңғы, тик төньяҡтан, йә көнбайыштан ғына бәләкәй бер тәҙрә булыуы шарт булған. Ярым ҡараңғылыҡ ҡыҙған тимерҙең төҫөн дөрөҫ билдәләр өсөн кәрәк. Тимерсенең оҙон һаҡаллы булыуы һәм һаҡалының оҙонлоғо күкрәгенә етеүе лә бер шарт иҫәпләнгән. Урта буйлы тимерсенең ҡул һуҙымында тотҡан ап-аҡ ҡыҙған тимер киҫәге һаҡалының осон ҡыҙҙырып, ул сыбырҙан бөгөләргә тейеш. Һаҡал тимер температураһын билдәләү приборы һаналған. Сөнки тимер айырым бер ҡыҙыулыҡ кимәлендә генә ҡорос сифатын алған. Әгәр ҡыҙыулыҡ етмәһә, йә артып китһә, ҡорос йә яралмаған, йә үҙ сифатына бөтөнләйгә эйә булмаған. Шуға ла бик сифатлы ҡорос ҙур оҫталар ҡулында ғына барлыҡҡа килгән һәм айырым ҡыҙыулыҡ араһында утыҡҡан.

Был шарттар тик ҡатылыҡ ҡына алып килгән. Шурынан, ҡалдығынан таҙарған ҡоросто артабан тағы ла шул уҡ ҡыҙыулыҡта ап-аҡ ҡояштай булғансы ҡыҙҙырғас, уны тимерлек шарттарында ҡалынлығы 10-12 миллиметр самаһы ҡалғансы һуғып, киң генә оҙон йәймә эшләйҙәр ҙә, ҡылыс, бысаҡ фиғелен килтереп киҫкеләйҙәр. Был киҫәктәрҙе тағы ла ҡыҙҙырып, ҙур ҡыуалды балға (кувалда) менән ҡылыс, хәнйәр рәүешен килтерәләр һәм сыныҡтырыу өсөн ҡара ҡурғаш иретмәһендә ҙур ҡыҙылыҡта ҡайнаталар ҙа кинәт кенә һыуға тығып һыуыталар, тип һөйләнә Иван Кочубей. Унан һуң ҡылыстарҙы тағы ла йә ҡара ҡурғаш (свинец), йә аҡ ҡурғаш (олово), йә ҡара һәм аҡ ҡурғаш иретмәһендә тағы ла ҡайнаталар. Бынан һуң ҡорос, ҡатылыҡтан тыш, бөгөлмәлелек һәм һығылмалылыҡ сифаттарын ала. Ҡайнар иретмәнән алыу менән бик оҫта тимерселәр һәм эшкәртеүселәр, һуғып-туҡмап, ҡылысты дөрөҫ рәүешкә килтерә. Ҡоростоң һуҡҡандар. Йәймәләрҙән киңлеге - 5 см, оҙонлоғо 75-80 сантиметрҙай һалма ҡырҡып, уны тағы ла сыныҡтырып, ҡылыс рәүешенә килтереп һуҡҡандар. Ҡоростан булат ҡоросо эшләгәндә эҫелек һәм һуғыу көсө төп шарттарҙың береһе булған. Бик ныҡ һуғыу ҙа ҡоросто боҙған, ул иҙелгән. Ҡоросто һуҡҡанда, барлыҡ ере лә бер үк баҫым алһын өсөн, балғаның (кувалданың) һуҡма өлөшө тип-тигеҙ булыуы оло шарт һаналған. Ҙур балға һуҡмаһы (алдаһы) тышҡа йоморо булһа, һуғыу көсө аҙ майҙанға төшкән һәм тигеҙ сүкелмәгән. Һөҙөмтәлә булат тигеҙ ныҡлыҡта була алмаған. Киреһенсә, күп һуғыуҙан балғаның һуҡма яғы ҡара төҫтә, сылбыр-сылбыр кеүек биҙәкле булыуы шарт. Ул биҙәктәр йә нәҙек кенә киртләс-киртләс оҙон, ҡыя, ҡат-ҡат семәрҙәр, йә еңел генә йоҡа болотсалар рәүештә була, тип һөйләйҙәр. Ҡорос битендәге биҙәктәр ҡалыныраҡ булған һайын уның сифаты ла яҡшыраҡ һаналған. Артабан ҡылысты шымартҡандар, игәгәндәр. Ваҡытлыса һап ҡуйғандар ҙа һынау үткәргәндәр. Ҡылыстың ялпаҡ яғы менән бар көскә йоморо ағасҡа һуҡҡандар - ул кәкрәймәҫкә тейеш булған. Үткере менән үҙе кеүек, ләкин сыныҡтырылмаған ҡылыс беҙенә сапҡандар. Сабыу көсөнә ҡарап, сыныҡмаған ҡылысты йә өҙәргә, йә уртаһына еткәнсе ярырға тейеш. Унан һуң ҡылыс менән 2 миллиметр самаһы ҡалынлығындағы тимер ҡалайына сәнсеп ҡарағандар. Ҡылыс тимерҙе тишеп, 20-25 сантиметрҙай үтергә тейеш булған.

Ҡылысҡа тағы ла бер һынау үткәргәндәр. Осон ярыҡҡа ҡыҫтырып, ялпаҡ яғына дуға булғансы бөккәндәр ҙә 45-50 ҡаҙаҡ ауырлыҡ элгәндәр. Әгәр ҡылыс ауырлыҡты еңеп текә торһа, ул ҡылыс иң яҡшыһы иҫәпләнгән. Шунан һуң ғына ҡылысҡа яңы һап, тотҡа, һәр төрлө биҙәктәр эшләгәндәр. Бүләккә тәғәйенләнгәндәренә алтындан ептәр һалғандар, йә ялатҡандар, һабына сүк таҡҡандар. Ҡылысҡа яраҡлаштырып ҡынын да эшләгәндәр, кәрәк икән, семәр биҙәктәр һалғандар.

Һәр бер алымдың үҙ оҫталары булған. Мәғдән табыу, унан тимер иретеү, тимерҙән ҡорос-тимер эшләү. Ҡорос тимерҙән булат ҡоросон һуҡҡандар. Айырым ҡалыптарға ҡойолған ҡоросто йәймә итеп йәйгәнсе, аҡлыҡ төҫө юғала башлағансы ның сит-сите селтәрләнеп бөтһә лә ҡорос тигеҙ һуғылмаған. Шуға ла "сәскәле балғаның ҡоросо булмай" тигән әйтем ҙур мәғәнәгә эйә.

Ҙур балғаның ятмаһын һәр саҡ тигеҙ сарға тотоп, тигеҙләп торғандар. Һандалдың да ятмаһы бик тигеҙ булыу оло шарт иҫәпләнгән. Үрҙә әйтелгән әйтемдең төп мәғәнәһен әле лә бик күптәр төшөнмәй. Шуға күрә лә ул халыҡ телендә ҡулланылыуҙан төшөп ҡалған дәрәжәлә.

Булат ҡылысына эйә булған хужалар, кемдең ҡылысы яҡшыраҡ икәнлеген тәңкә менән һуғып, сыңлау тауышынан белгәндәр. Һумлыҡ көмөш тәңкәне бер нисә ҡылысҡа бер үк йыраҡлыҡтан бер үк көс менән һуҡҡандар. Ҡайһы ҡылыс таҙа тауыш менән оҙаҡ сыңлай, шул ҡылыс иң үткер, иң бөгөлмәле, иң һығылмалы булған. Һәм ул ысынбарлыҡҡа тап килгән.

Алтынтамаҡ һәм Һаткы заводтарына ҡурғашлы мәғдәнде Учалы районының Ҡалҡан, Аҡбулат, Кирәбе төбәгенән ташығандар. Яйыҡҡа һул яҡтан ҡушылған Ҡурғаш тигән ер һәм йылға ла бар. Беҙҙең Табын-Барын ырыуы кешеһенә, әгәр уның ниндәйҙер ғәмәлде ҙур теләк, дәрт менән башҡарыуына ҡарамаҫтан, был эштең кәрәкһеҙлеген, файҙаһыҙлығын әйтһәң, ул ҡапыл ҡаушап ҡалыр ҙа: "Хәбәрең менән бөтә ҡоросто ҡайтарҙың да ҡуйҙың", - тиер. Йәки бирешмәйенсә: "Юҡ, ағай, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк", - тип яуаплар. Шул һүҙ әйләнеше лә башҡорттоң бик күптәнән тимер һуғыуы, ҡорос эшләүе тураһында һөйләй ҙа баһа.

Булат һәр ҡоросто тиерлек айырым эшләгән. Улар бөтәһе лә бер сифатта булмаған. Ҡайһы бер ҡылыс бик унышлы килеп сыҡҡан. Һынау үтә алмаған ҡылыстарҙы яңынан "бешергәндәр". Ә унда ла үтә алмағандарын һәм, ғөмүмән, уңышһыҙ сыҡҡан ҡоросто салғы, бысаҡ эшләү өсөн Әртә заводына ебәргәндәр. Әйтергә кәрәк, булат ҡоросон бешереү өсөн ҡурғашты хәҙерге Ҡыйғы, Салауат, Мәсетле яҡтарынан да ташығандар булһа кәрәк. Ҡурғаш соҡорҙарынололар әле лә белеүе ихтимал. Ул ерҙәр сер итеп һаҡланған һәм урындарын урыҫ түрәләренә ул тиклем әйтеп бармағандар. Көкөрт сыҡҡан ерҙәр ҙә сер булған. Әммә урыҫ түрәләре, аҡса биреп, бүләктәр вәғәҙә итеп, һәр төрлө хыянатсы, шымсылар аша серҙәрҙе аса барған. Хәритәгә (ер картаһына) төшөрөп, ул ерҙәргә хужа булып алғандар.

Хәҙерге фәндән билдәле булыуынса, барлыҡ металдар һәм иретмәләр бер-береһенә йәбешеп үҫешкән ваҡ ҡына бөртөктәрҙән тора. Бөртөксәләр араһында бик йоҡа ҡатланһыҡ булып, металл булмаған ҡушылмалар, һәр төрлө янмалар (карбиттар), әсетмәләр - тоноҡтар (оксидтар) һәм башҡа ҡушылмалар бар. Металл бөрсөктәре ваҡ саҡмалар, кристаллик төҙөлмәле булып, уларҙың ҙурлығы 0,05-0,5 миллиметрға тиклем була. Иретмәне юғары температурала һуҡҡан сакта саҡма бөрсөктәр бер-береһенең өҫтөнә, ҡабырғаһына шыуышып, металдың рәүешен үҙгәртә. Был осраҡта металл рәүеше (формаһы) үҙгәреү саҡма бөрсөктәрҙең иҙелеү һөҙөмтәһе түгел, ә тик бөрсөктәрҙең бер-береһенә йәбешеү көсөн үҙгәртеп, уларҙың массала бер ерҙән икенсе ергә күсеүе һөҙөмтәһе генә. Ләкин айырым бер эҫелек дәрәжәһендә һәм баҫым-һуғыу һөҙөмтәһендә кристаллик бөрсөктәр ваҡланыу һәләтенә эйә. Оҫтаның барлыҡ оҫталығы - тейешле эҫелекте тотоу һәм тейешле баҫым яһау, һуғыу. Әйтергә кәрәк, барлыҡ майҙанға ла тигеҙ һуғыу оҫталығы - төп талап. Ҡорос бөрсөктәре ни тиклем ваҡ, ҡорос шул тиклем ныҡ, ҡаты була. Ләкин бөгөлмәлелекте, һығылмалылыҡты тәьмин итер өсөн бөрсөктәр һәр береһе айырым булыуы һәм бер-береһенең өҫтөндә тайып тороуы, ләкин үҙ урынын йәһәт кенә кире алыу һәләтлеге тора. Бында кристалл бөрсөктәрҙе берләштереп тороусы әсетке-тоноҡтарҙың физик торошо, ҡуйылығы, йәбешкәклеге, тип әйтәйекме, төп роль уйнайҙыр, ахыры. Нисек кенә булмаһын, Булат тимерҙе бик нескә тойған. Булат ҡылыстың сифаты Булаттың кәйефенә туранан-тура бәйле булған, сөнки кәйефһеҙ саҡта эшләгән ҡылыстары һыныусан булған, тип һөйләгәндәрен ишеткәнем бар. Кәйеф ҡылыс һындырған, тигән әйтем дә тап шул саҡта сыҡҡан булһа кәрәк.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Аҙағы. Башы 44-48-се һандарҙа).**

*БЫЛ - ГОНАҺ!*



# НАМАҘҘЫ ҠАЛДЫРМА

**Ҡөрьән-Кәримдә шулай тиелә: "Уларҙан һуң тағы бер нәҫел килде лә, намаҙҙы ташланылар, аҙғынлыҡ нәфсеһенә эйәрҙеләр. Шуға күрә улар ошо аҙғынлыҡтарына күрә яҙаһын да аласаҡтар. Тәүбә иткәндәр һәм изгелек ҡылғандарҙан башҡалары. Улар йәннәткә керер һәм уларға рәнйетеүҙәр булмаҫ. Ярлыҡаусы Аллаһтың кешеләргә вәғәҙә иткәне һис шикһеҙ ысынбарлыҡ булыр. Уның вәғәҙәһе һәр ваҡыт үтәлә" (Мәрйәм, 59-60).**

"Улар йәннәттәрҙә булыр һәм йәһәннәмгә кергән таныштарынан гонаһлыларҙың хәлен һорашыр. "Һеҙ нисек Йәһәннәмгә килеп эләктегеҙ?" Гонаһлылар әйтер: "Беҙ намаҙ уҡыманыҡ"(Мудаҫҫир, 42,43).

Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Беҙҙең менән улар араһындағы айырма - намаҙ үтәү. Кем намаҙҙан баш тарта, шул иманһыҙлыҡҡа төшә", - тигән. Шулай уҡ Ул (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Төштән һуңғы намаҙын ҡалдырыусы кешенең эштәре юҡҡа сығасаҡ", "Намаҙ - кешене иманһыҙлыҡтан ҡурсалаусы пәрҙә", "Әгәр кеше ниәтләнеп намаҙ ҡылыуҙы ташлаһа, Аллаһ уны һаҡлауҙан туҡтаясаҡ", - тигән.

Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) әйткән: "Кешеләр Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт Уның бәйғәмбәре тип шаһитлыҡ килтермәһә, намаҙ ҡыла башламаһа һәм зәкәт түләмәһә, миңә улар менән көрәшергә ҡушылды. Быны эшләһәләр, улар Ислам хоҡуҡтары буйынса үҙҙәренең ғүмерен һәм малын һаҡлап ҡалалар. Ҡалғаны - Аллаһтан".

Абдуллах бин Ғүмәр Аллаһ илсеһенең (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) һүҙҙәрен еткерә. Ул әйткән: "Үҙенең намаҙын һаҡламаған кешенең нуры ла, дәлилдәре лә, ҡотолоуы ла ҡалмай. Ҡиәмәт көнөндә ул кеше Карун, Фирғәүен, Хаман һәм Убай бин Хәләф янында буласаҡ".

Был кешеләр янында булыу намаҙҙан баш тартҡан кешенең ни тиклем иманһыҙлыҡҡа яҡын булыуын күрһәтә. Шулай ҙа Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) Муаҙға: "Аллаһ ихлас күңелдән Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт уның илсеһе тип таныҡлыҡ иткән кешене тамуҡта ҡалдырмаҫ", - тигән.

Намаҙҙы ваҡытында ҡылмау йәки унан баш тартыу, урлашыу йәки зина ҡылыу - ауыр гонаһтар. Әгәр кеше ниәт әйтеп намаҙҙан бер нисә тапҡыр баш тарта икән, ул бөйөк гонаһсы буласаҡ. Әгәр был дауам итеп, кешенең ғәҙәтенә әйләнһә, ул зарар күреүсе, аҙашыусы, гонаһсылар рәтендә булыр

***✓ Көрәш башланды. Унда Ырымбур яғынан килгән урыҫтар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа бар ине. Донъяла майҙанда көрәшкән атайың өсөн борсолоуҙан да ауырыраҡ тойғо-кисереш юҡ икәнен шул мәлдән башлап беләм.***



**Гәзитебеҙҙең быйылғы 9-10-сы һандарында Фәриғә Күсәкованың "Ғаззали бәһлеүән" тигән мәҡәләһе баҫылғайны. Унда һүҙ Хәйбулла районының Кәрим (Таштуғай) ауылында тыуып үҫкән батыр көрәшсе Ғаззали Ғимазетдин улы Үтәшев хаҡында барғайны. 67 йәшендә донъя ҡуйған атаҡлы көрәшсенең иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса Хәйбулла районында һәм республикала байтаҡ эштәр башҡарыла. Быға тиклем районда һәм Урал арьяғы төбәгендә Ғаззали бәһлеүән исемендәге милли көрәш байрамдары үткәрелә килһә, быйыл Ғаззали Үтәшевтың тыуыуына 100 йыл тулыу ваҡиғаһы айҡанлы республика кимәлендә ҙур байрам сараһы булып уҙҙы.**

**Ғаззали бәһлеүәндең рухи традицияһын уның вариҫтары ла дауам итә. Улдары Зиннур, Хәсән, Хөсәйен, ейәндәре Ишморат менән Инсаф әлеге көндә - майҙан батырҙары. Улдарының береһе - билдәле сәхнә оҫтаһы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Ғаззали улы ҮТӘШЕВ. Атаһының тыуыуына 100 йыл тулған йылда улы Хөрмәтуллаға 50 йәш тулды. Актерҙың башҡорт сәхнәһендә тыуҙырған сағыу образдарында беҙ уның атаһы Ғаззали бәһлеүәнде лә таныйбыҙ. Шуға күрә аталы-уллы Үтәшевтарҙың юбилей йылында Хөрмәтулла Ғаззали улы беҙгә атаһын иҫкә алыуҙы, уның хаҡындағы иҫтәлектәре менән уртаҡлашыуҙы хуп күрҙе. Һүҙ - Хөрмәтулла Ғаззали бәһлеүән улына.**

## Ул көрәшкәндә, ер һелкенеп торор ине...

Күптән әхирәткә күскән атайымдың тәрбиәһе әле булһа дауам итә, мин уның йоғонтоһон әле булһа үҙемдә тоям. Мөһабәт кәүҙәһенә, уның - кешеләргә, кешеләрҙең уға мөнәсәбәтен төҫмөрләгәндә бер ваҡытта ла үлмәҫ, мәңге йәшәр һымаҡ булып тойолғайны атайым. Ул уы ере һаналып, Ғимат яланы тип атала ине. "Әгәр ҙә үҙ яланымда үҙем көрәшеп, еңмәһәм, олатайҙарым ғәфү итмәҫ", - тигән икән Зиннур ағайыма атайым ни өсөн көрәшеүен аңлатып.

Көрәш башланды. Унда Ырымбур яғынан килгән урыҫтар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа бар ине. Саң борлап ҡына тора. Донъяла майҙанда көрәшкән атайың тора ине. Үҙе тураһында мәҡәлә яҙыуға ул ҡырҡа ҡаршы төштө. Әсәйемдең һәм башҡаларҙың өгөтләүенә ыжлап та бирмәне ул, "юҡ", тип ҡырҡа итеп белдерҙе лә, ҡырға китеп тә барҙы. Мин был хәлгә ныҡ аптырағайным. Хәҙер генә атайымдың ул сағындағы ҡылығын аңлай алдым. Минең олатай бит староста булып, тройкаға ултырып йөрөгән, бер тырма өҫтөнә ултырһам, туғыҙынсыла йылҡы көтөргә сыҡтым.

Атайыбыҙ тәртип боҙғаныбыҙ өсөн "яза" бирмәне, йәғни беҙгә шыйыҡ сыбыҡ эләкмәне. Көслө кешеләр шулай булалыр инде: ваҡланып торманы, уҫал ғына итеп ҡарап ҡуйһа, беҙ мөлдөрәмә тулып "аҡылға ултыра" ла ҡуя торғайныҡ. Беҙгә дәрес тә эшләтмәне ул, атамәҫәлән, атайымдың илағанын күргәнем булманы.

Минән ҡала килә Хәсән ҡустым бар. Малды күп тотҡас, беҙгә ныҡ ҡына егелеп эшләргә тура килде. Бер саҡ Хәсән менән һүҙгә килешеп киттек тә, тегегә арыу ғына эләктерҙем. Ул илап, үсегеп, атайға ошаҡларға, тип, өйгә инеп китте. Атай менән аңлашыу бик ауыр буласағын төҫмөрләп, мин һыу буйына еппәрҙем. Ҡараһам, малайҙар ҡуянға һунарға китеп баралар. Быларға ҡушылдым да киттем. Төшкә тиклем һунарҙа йөрөнөм. Кеҫәләге икмәк ҡатыһы оҙаҡҡа етмәне. Төштән һуң клубта балалар киноһы булырға тейеш. Ҡайтырға бөжләтә. Киноға килгән апайҙарымдан аҡса алып, сәғәт 5-тә киноға инеп киттем. Кино бөттө, апайҙарым, әйҙә, ҡайтайыҡ, тиҙәр. Мин ҡайтҡым килһә лә, ҡыймайым. Ни өсөн тигәндә, атайым менән аңлашыу мөҙҙәте һуҙылған һайын,

# СӘХНӘЛӘ АТАЙЫМДЫ

## шул ынтылыш мине

бер ваҡытта ла ауырыманы, дауаханала ятманы. Ул хатта мин тыуып, бер нисә ай үткәс, һуҡыр эсәгенә яңы ғына операция яһатҡан көйгә Черемуховоға һөргөнгә ебәрелгән туғандарыбыҙ янына барып ҡайтҡан.

Сабый сағымдан шундай күренеш хәтеремә уйылған. Ишек алдыбыҙ иркен генә. Ниңәлер миңә донъяла беҙҙең ауылдан башҡа ауыл юҡ һәм ауылыбыҙҙың дүрт тарафында донъя бөтә, тамамлана кеүек. Мин бәпкә үләндәре араһында мәж килеп йөрөйөм. Шул мәл йылҡы көтөүсеһе булып эшләүсе атайым ат ҡушарлап, береһен менеп, икенсеһен етәкләп, өйөбөҙгә ҡайтып төшә. Нисектер атайыбыҙ икенсе донъянан, әкиәт донъяһынан килеп ингән кеүек. Донъялағы барлыҡ атайҙар араһында беҙҙең атай иң көслөһө, кәүҙәгә иң бейеге һәм иң ғәйрәтлеһе. Быныһы ла аңлашыла, сөнки һәр кем үҙенең атаһын иң көслөһө, бөйөк итеп күрә. Өфөгә уҡырға килгәс тә, һуңынан эшләй башлағас та, минең Ғаззали бәһлеүәндең улы икәнлегемде белеп ҡалыусылар һәр ваҡыт ғәжәпләнеү белдерә килде. "Шундай батырҙың улы булыуыңды ниңә ошоғаса йәшерҙең, ниңә беҙ был хаҡта белмәйбеҙ ул?" - тип әле булһа әйтәләр. Әллә, беҙ ни атайыбыҙ менән бергә йәшәгәс, был хәлгә тәбиғи итеп ҡарай инек.

Беҙҙең ауылдан алты саҡрым ситтә совхозыбыҙ һабантуйы үтә торғайны. Ул саҡта миңә һигеҙ йәш самаһы булғандыр. Шунда яңы һуйылған иттән һалма һалып бешерелгән аш ашаныҡ. Ниңәлер миндә, йәшел һуған менән бирелгән был аш тик һабантуйҙа ғына ашала торған махсус ризыҡ, тигән аңлау күңелемә һеңеп ҡалған. Шунда атайымдың көрәшкәнен тәүге тапҡыр күрҙем. Ер һелкенеп тора ине ул көрәшкәндә, яҡын барырлыҡ түгел. Ул урын беҙҙең Түңгәүер ыры-

өсөн борсолоуҙан да ауырыраҡ тойғо-кисереш юҡ икәнен шул мәлдән башлап беләм. Беренсенән, һинең атайың донъялағы иң көслө кеше булғас, мотлаҡ еңергә тейеш, икенсенән, берәр талымһыҙ көрәшсе аяҡ салып хәрәмләшә башлаһа, сығып тегенең кәрәген бирерҙәй булып, тештәрҙе ҡыҫып, йоҙроҡтарҙы төйнәп ултыраһың. Бер саҡ бер көрәшсе атайҙы аяҡ салып йыҡты, көрәшселәр ҡаҡ ергә саңҡ итеп килеп

> ***Атайыбыҙ өйҙә бәләкәй генә эште башҡарыр булһа ла, бөтә балаларын йыйып, шул ғәмәлде ҙур эш итеп ойоштора торғайны. Ул ниндәй генә ғәмәл булмаһын, унда барыбыҙ ҙа ҡатнаштыҡ. Кемебеҙҙер тотоп торһа ла, икенсебеҙ ҡарап торһа ла, эшкә өйрәнә инек. Мин атайымдың бындай "өмәләрен" ул саҡта бик үк өнәп бөтмәһәм дә, хәҙерге йәшем күҙлегенән атайыма бик рәхмәтлемен. Беҙҙе ул был юл менән эшкә өйрәткән бит.***

төштө. Шул сағында белһәгеҙ - йән сығып китә яҙҙы. Әлбиттә, атайыбыҙ көрәштә еңде. Атайым көрәшкә махсус рәүештә әҙерләнмәне. Гер күтәрмәне, күнекмәләр яһаманы. Ҡырҙа мал көтөп йөрөгән еренән һабантуйҙарға сығып көрәшә ине. Уның көрәшкә булған оһоллоғо, таҫыллығы булмышынан, тәбиғәтенән килде.

### Журналисты кире ҡағыуы

Атайымдың: "Муллыҡҡа ынтылмайынса йәшәү дөрөҫ түгел, байҙарһыҙ донъя булмай", - тип әйткән һүҙҙәрен хәтерләйем. Коммунизм идеяһының утопия булыуын шулай аңлатырға теләгәндер инде үҙенсә. Үҙе йәшәгән осорҙа атайымдың исеме республика кимәлендә яңғырамауында шәхес культы ла сәбәпсе булғандыр, тием. 70-се йылдарҙа Өфөнән атайымдың данлыҡлы көрәшсе булыуын белеп ҡалып, ниндәйҙер журналист килеп төштө. Ул ауылыбыҙға килгәндә, атайым атын егеп, ҡырға эшкә китергә

нисә ауыл менән идара иткән. Беҙҙең нәҫелде "кулак ҡалдығы" тип атап, ситкә һөргәндәр. Атай-олатайҙарын Черемуховоға һөргәндә атайым бала булыуы арҡаһында ғына тороп ҡала. Ошолар хаҡында һөйләһә, атайым сәүитте яманлай булып сыға бит инде. Сәүитте яманлаһа, сиҡаны беҙгә, балаларына тейәсәк. Бына шуның өсөн дә атайым ул журналист менән һөйләшергә теләмәгән, йәғни беҙҙе ҡурсалаған.

### Өнһөҙ аңлашыу

Атайыбыҙ өйҙә бәләкәй генә эште башҡарыр булһа ла, бөтә балаларын йыйып, шул ғәмәлде ҙур эш итеп ойоштора торғайны. Ул ниндәй генә ғәмәл булмаһын, унда барыбыҙ ҙа ҡатнаштыҡ. Кемебеҙҙер тотоп торһа ла, икенсебеҙ ҡарап торһа ла, эшкә өйрәнә инек. Мин атайымдың бындай "өмәләрен" ул саҡта бик үк өнәп бөтмәһәм дә, хәҙерге йәшем күҙлегенән атайыма бик рәхмәтлемен. Беҙҙе ул был юл менән эшкә өйрәткән бит. Шулай булмаһа, алтынсыны тамамлағас, беҙ малайҙар менән бергәләп бригадирҙан барып эш һорамаҫ инек. Әлбиттә, беҙгә һарыҡ ҡырҡҡанда уларҙы йыйып, аяҡтарын бәйләү, ҡырҡҡан йөндө ташыу, һарыҡтарҙы йыуындырғанда соҡорға этеп төшөрөү кеүек ярҙамсы эштәре генә тейҙе. Шулай ҙа беҙ тап ошо ярҙамсы эштәр башҡарыу арҡаһында "эт һуғарыуҙың" ни икәнен дә белмәй үҫтек. Һигеҙенселә уҡығанда

әсәләр йыйылышына ла йөрөмәне. Быларҙың барыһын да әсәйебеҙ башҡарҙы.

Үҙемдең өс улымды тәрбиәләгәндә атайымдың алымдары менән генә уларға йоғонто яһау мөмкин түгел икәнен аңланым. Заман башҡа - заң башҡа, шул. Бәләкәйерәк саҡтарында мөйөшкә баҫтырҙыҡ. Үҫә килгәс,

һөйләшеп аңлашырға тырышабыҙ. Аңлашыу килеп сыҡмаһа, үҙҙәрен ни өсөн теге йәки был мәсьәлә буйынса шулай тотоуҙарын яҙып аңлатыуҙарын талап итә башланым. Уларҙың яҙма аңлатмалары әле лә ҡағыҙҙар араһынан килеп сыҡҡылай. Өлкән улымдың: "Һеҙ мине аңламайһығыҙ. Мин үҙемдең проблемаларым тураһында һеҙгә әйтә башлаһам, һеҙ бит тыңларға ла теләмәйһегеҙ. Ә ул мәсьәлә мине ныҡ борсой", - тигән яҙма аңлатмаһын яңыраҡ уҡып, көлөшөп ултырҙыҡ. Атайыбыҙ беҙгә, балаларына, йомоғораҡ булды, мин иһә үҙ балаларымды үҙемә тиң күрәм, үҙемде лә шулай ҡуям. Был, бәлки, дөрөҫ тә түгелдер.

Мин йыш ҡына бер күренеш хаҡында уйланам. Башҡорт атайҙары, ниңәлер, улдары алдында нескәлеккә бирелергә, тойғоларын белдерергә ояла. Шуға күрә атай менән улдың мөнәсәбәте ситтән ҡарағанда ҡороораҡ һымаҡ күренә. Әлбиттә, атай кеше үҙ улына күңеле менән улай түгел, тик эсендәгеһен уға күрһәтеп бармай. Мин,

ҡурҡыу тойғоһо ла арта бара. Апайҙарыма, хәҙер ҡайтам, тинем дә, шунда йөрөп ҡалдым. Эңер төшә башлағас, өйгә яҡынланым. Өй янында атайым йөрөп ята, борсолғаны йөҙөнә яҙылған. Ул өйгә инеп китте. Тәҙрә аша ҡарайым. Өйҙәгеләр күмәкләп ашап ултыра. Эсемдә ас бүреләр олой олоуға, тик инергә баҙнатым етмәй. Уғанса, атайым килеп сыҡты ла, мине баҫтыра башланы. Еппәрттем урам буйлап. Етеп килә был. Ферманы урап үттем дә, тауға менә башлағанда, атайым арттараҡ ҡалды. Ул ферма артына ышыҡланған арала ҡапыл кирегә боролоп төшөп, кире ауыл араһына килеп индем. Боҫоп ҡарап торһам, атайымдың ҡайтып килгәнен күреп ҡалдым. Ул өйгә инеп китте лә, бер аҙҙан кейенеп килеп сыҡты, клуб яғына ыңғайланы. Мин артынан эйәрҙем. Уның киноға инеп барғанын күреп ҡалдым. Ул киноға бөтөнләй йөрөмәй торғайны. Был юлы инде миңә иркенләп ҡайтырға мөмкинлек биреп, шарт тыуҙырып, шулай итте. Әсәйем мине бер ни булмағандай ҡаршы алды. Ҡайҙа йөрөүемде һорашҡан булды ла, ашарға ултыртты. Иртәнсәк тороуыма атайым һин дә мин, кисәге ваҡиғалар уға булды ни, булманы ни, ҡыҫҡаһы, был хаҡта иҫкә лә алманы.

### Һуғышта күргәндәре...

Атайым һарыҡ көткән мәлдә ярҙамсы итеп мине алыр ине. Шул сағында, нисектер, күңеле асылып китеп, һуғышта күргәндәрен хикәйәт итеп һөйләгәне хәтеремдә. Ә былай, башҡа бер ваҡытта ла һуғыш тураһында һөйләгәнен хәтерләмәйем. Һуғыштың утлы ҡойононда булғандар был хаҡта иҫләргә, һөй-

✓ *Атайым кеүек, мин дә майҙанда көрәшеп ҡарағаным булды. Унда ла үҙ-үҙеңде еңә алмаһаң, майҙанға сығыуыңдың мәғәнәһе юҡ. Барлыҡ еңеүҙәр үҙ-үҙеңде еңеүҙән башлана, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит.*



ләргә яратмай, тигәндәре шул булғандыр. Утлы яу эсендә атайым күп тапҡырҙар үлемдән ҡотолоп ҡала. Уны күп осраҡта көслө, таҫыллы булыуы һәм йылдам аты ҡотҡара. Ҡамауҙа ҡалған саҡта үлгән аттарҙың ялын ҡырҡып һурыуҙары ла уларҙы аслыҡ үлеменән ҡотҡарып алып ҡала. Бер мәл уларҙы, дүрт башҡортто һәм дүрт урыҫ һалдатын, разведкаға ебәрәләр. Засадаға эләгәләр. Атыш башлана һәм дүрт урыҫ һалдаты ла үлә. Башҡорт һалдаттарының кемеһелер яраланып, үҙебеҙҙең яҡҡа ҡайтып төшәләр. Махсус бүлек иҫән ҡалған башҡорт һалдаттарын урыҫ һалдаттарын атып китеүҙә ғәйепләй һәм уларҙың үҙҙәрен атырға ҡарар сығара. Бойороҡ ҡысҡырып уҡылып, атайымдарҙы атырға ғына торғанда, үлгән, тип иҫәпләнгән ике урыҫ һалдаты ҡаты яраланған көйө ҡайтып төшә. Улар бер нисә секундҡа ғына һуңлаған булһа...

...ла булды. Мин Шайморатов генерал роле өҫтөндә эшләгәндә атайымдың һуғыш сәхифәләрен файҙаланһам, шуҡлыҡтарын комик ролдәрҙе башҡарғанда иҫкә төшөрәм. Үҙе сәнғәткә әүәҫ булһа ла, атайым әртис һөнәрен иғтибарға лайыҡ булмаған шөғөл, тип баһаланы, булһа кәрәк. Ишмулла Дилмөхәмәтов, Мөхәммәт Иҙрисовтар беҙгә йыш килә торғайны. Мөхәммәт Иҙрисов атайыма "еҙнәй" тип өндәште. Ә инде Ишмулла ағайҙың атаһы Ишкәлә менән минең олатайҙар аралашып йәшәгән.

Беҙ, бигерәк тә ир-аттар, үҙ атайҙарыбыҙға оҡшарға, уларҙың юлын ҡабатларға тырышабыҙ. Ниндәй генә ғәмәл башҡарһаҡ та, асылда, үҙебеҙҙе атайҙарыбыҙ кеүек тотабыҙ, хатта уларға оҡшатып атларға ынтылабыҙ. Шуға күрә лә сәнғәт юлына килеүемдә лә ошо атайыма оҡшарға тырышыуым ята-лыр, улай ғына ла түгел, сәхнәлә атайымдың ролен башҡарырға, булып эшләй башланым. Унда эшләп йөрөгән мәлдә, 1982 йылда, сәнғәт институтының актер бүлегенә документтарымды тапшырҙым. Уҡырға алдылар. Уҡый башлағас та уҡытыусылар: "Беҙҙә уҡыуы ауыр, һин беҙҙә уҡый алмайһың", - тинеләр. Аптырап киттем. Баҡтиһәң, улар минең сәмгә тейгән икән. Киноларға йөрөмәнем, китапханаларҙан сыҡманым.

Шулай итеп, яҙмыш мине төрлө яҡҡа тартҡылап ҡараны, ә мин барыбер сәхнәгә килеп сыҡтым. Бер уйлаһаң, көрәш майҙаны ла шул уҡ сәхнә бит. Унда атайым атаҡлы Ғаззали бәһлеүән көрәште. Заман башҡа, заң башҡа булғас, мин дә атайым һымаҡ көрәшсе булып, ҡандырыр һыуһынымды шундай уҡ майҙанда ҡандырам һәм, башта әйткәнемсә, сәхнәлә һәм тормошта атайымдың ролен башҡарам. Тимәк, минең сәнғәт юлына аяҡ баҫыуымда атайымдың туранан-тура ҡатнашлығы

# УЙНАЙЫМ,

## сәнғәткә алып килде...

Атайымды бер нисә тапҡыр командир итеп ҡуйырға теләйҙәр, тик ғәрәпсә генә уҡый-яҙа белгәс, урыҫсаға грамотаһы самалы булғас, ул үрләтелмәй ҡала. Шуғамылыр, ул үҙенең хәрби командир булыу хыялын миндә тормошҡа ашырырға теләп: "Улым, буйың-һының бар, мин һине кадровый эфисәр итәм", - тип әйтә торғайны. Атайым ҡаҙаҡсаны ла һыу кеүек эсте. Бер мәл һуғышта привал мәлендә һыу алырға төшөп барғанда бер ҡаҙаҡ егете осраған да: "Казаҡсыңмы ғуй, бауырдысым, ҡайдансың, Алма Атананмы?" - тип төбәшкән. Ҡаҙаҡса яҡшы белгәс ни, атайым, тегене әллә шаяртып, әллә күңелен уйлап, баш һелккән дә: "Мин һыу алып сыҡҡансы көтөп тор, һөйләшербеҙ", - тип, һыу алып торғанында снаряд төшөп шартлаған. Ҡоҙоҡтан сығыуына, теге ҡаҙаҡтың әсәктәре ағас ботаҡтарында эленеп тора ине, ти. "Уны ниңә ҡаҙаҡмын, тип алданым, ышандырҙым икән. Әгәр ҙә мин уны алдамаған булһам, ул мине көтөп тормаҫ ине, артабан китер ине лә, снаряд уның өҫтөнә төшмәҫ ине", - тип был ваҡиға тураһында атайым ғүмере буйы әсенеп һөйләр ине.

Һуғыш тураһында кинофильм булһа, ул клубҡа бармай торғайны. Осраҡлы ғына ҡараған фильмдарҙан һуң да: "Дөрөҫ күрһәтмәйҙәр, быны һуғышты күрмәгән кеше төшөргән", - тип әйтә торғайны.

## Сәнғәткә - урау юлдар аша...

Атайымдың: "Мин үҫһәм, ҙурайһам, шәп егет булам", - тигән яратҡан һүҙҙәре бар ине. Ул йырлай ҙа, бейей ҙә ине. "Перовский"ҙы бейегәндә ҙур кәүҙәһен орсоҡтай әйләндереп ебәргәне хәтерҙә. Шуҡлыҡтары уны һынландырырға тырышамдыр ул, тип тә уйланғаным бар. Мәҫәлән, "Башҡорт туйы" спектаклендә был туранан-тура ярылып ята. Унда герой үҙе ҡолағын тешләгән ҡыҙҙы килеп табып, йыйында көрәшә.

Атайым минең һөнәр һайлауымда ҙур роль уйнаны, тип әйтергә минең тулы нигеҙем бар. Юлым бик урау һәм һикәлтәле-һикәлтәле булды. Әсәйем минең уҡытыусы булыуымды теләне. Шуға күрә һигеҙенсе бөткәс, ул мине Сибайға педучилищеға имтиханға алып барҙы. Өс егет барғайныҡ, өсөбөҙ ҙә инә алмай, ҡыуана-ҡыуана кире ауылға ҡайттыҡ. Унынсыны бөтөп, ауылда малсылыҡта бер йыл эшләгәс, армияға киттем. Унан ҡайтҡас, Магнитогорск педагогия институтының сит телдәр факультетының француз бүлегендә рабфакта уҡыным. Унда ҡурай, бейеү түңәрәктәре бар ине. Шунда ылығып киттем. Әммә пединститутҡа күңел ятманы. Армияла бергә хеҙмәт иткән егеттең саҡырыуы буйынса Стәрлетамаҡ мәҙәниәт ағартыу техникумына күстем. Унда тынлы музыка ҡоралдары бүлегендә уҡый башланым. Бер юлы балта оҫтаһы булып, эшкә урынлаштым. Уҡырлыҡ хәл юҡ, техникумдың ватыҡ донъяһын төҙәтеп бөтөрлөк түгел. Бер мәл театр факультетына декорация эшләп биреүемде һоранылар. Декорация эшләп бирҙем дә, репетицияға инеп ултырҙым. Театр сәхнәһе ылыҡтыра башланы бер мәл. Мәктәптә драма түңәрәгендә уйнаған саҡтар иҫкә килеп төштө. Шул саҡ театр бүлегенә күсергә ҡарар иттем. Шунан театр бүлегенә ситтән тороп уҡыуға күстем дә, Салауат ҡалаһына эшкә киттем. Шулай итеп, Салауат драма театрында сәхнә монтеры, бутафор

...бар. Тимәк, атайым шундай данлыҡлы көрәшсе булмаһа, мин танылған сәхнә әһеле лә була алмаҫ инем. Мин бит унда атайыма оҡшарға тырышам. Атайым мине хәрби кеше итеп күрергә теләһә лә, әле иҫән булһа, минең һайлаған һөнәрем менән риза булыр ине, тип уйлайым.



## Үҙ-үҙең менән көрәш

Беҙҙә бит ауылда "әҙәпле бул", "тәртипле бул", тип өйрәткәйнеләр. Уҡый башлағас, ошондай тәрбиәнең кире яҡтарын күрә башланым. Ни өсөн тигәндә, сәхнәлә тик матур булып ҡына күренергә тырышыу актерға үҫергә ҡамасаулай. Ике йыл буйына ҙур ауырлыҡ менән этюдтарҙа үҙ-үҙемде көрәшеп еңә алдым. Атайым кеүек, мин дә майҙанда көрәшеп ҡарағаным булды. Унда ла үҙ-үҙеңде еңә алмаһаң, майҙанға сығыуыңдың мәғәнәһе юҡ. Барлыҡ еңеүҙәр үҙ-үҙеңде еңеүҙән башлана, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит. Мин икенсе курсты бөтөп, өсөнсөгә барғанда ғына сәхнәне аңлай башланым, дүртенсе курста тотороҡло инем инде. Уңлы-һуңлы ярҙарға ташланып, эҙләнеүемдең мәғәнәһен дә шул саҡта ғына аңланым. Үҙ-үҙемә ышандырыуымда уҡытыусым Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы ҙур роль уйнаны. Ҙур ауырлыҡ аша бирелде миңә үҙ-үҙемде еңеүем. Мине уңайһыҙланыу бығауынан, кәрәкмәгән, ялған тыйнаҡлыҡтан уҡытыусым ҡотҡарҙы. Кем белә, бәлки, актер һөнәрен һайламаған булһам, ошондай үҙ-үҙең менән көрәштең дә барлығын белмәйсә йәшәп ятҡан булыр инем. Әлбиттә, тормошомда нимәгәлер өлгәшер инем, әммә барыбер бындай көрәште бар тулылығында аңлай алмаҫ инем. Шуға күрә лә мин ошо юлды һайлап, дөрөҫ эшләгәнмендер тип уйлайым. Югиһә, беҙҙең халыҡ тәрбиәһендә яңы шытып килгән үләнде ҡырау һуғыуға алып килеп, тамырынан юҡ итеүгә килтергән баҫалҡылыҡ һәм баҙнатһыҙлыҡ һаман да осрай әле. Беҙгә был йәһәттән ҡайһы бер милләттәрҙең ошо йүнәлештәге ыңғай тәрбиә ысулдарын үҙләштерергә кәрәктер. Мәҫәлән, японҙарҙа сабый нимә һораһа ла, "Юҡ", тип әйтмәйҙәр, киреһенсә, уны хупларға тырышалар.

## Театр киләсәге - милләт киләсәге

19 декабрҙә театрҙа юбилейым айҡанлы үтәсәк ижад кисәмдең тәүге өлөшөндә Зәйнәб Бейешеваның "Салауаттың һуңғы монологы" әҫәренән өҙөк күрһәтмәксебеҙ. Салауатҡа һәм атайыма бәйле бер хәтирә лә бар. Бер мәл ауылға "Салауат Юлаев" фильмын алып килделәр. Киноға йөрөргә яратмаған атайым да уны барып ҡарарға булды. Кинонан ҡайтҡас, атайымдың бик рухланып һөйләгәне хәтерҙә. Атайымды фильмда Салауаттың ялҡынлы телмәре менән халыҡҡа тәьҫир итә алыуы һоҡландырған икән. Мине ул саҡта бәһлеүән кәүҙәле атайымдың башҡа батырға һоҡлана белеүе ғәжәпләндергәйне. "Һе, атайымдан да көслөрәк кеше бар икән", тигән уй мейене ярып үтте шул саҡта.

Әле сәхнәнән яңғыраған һүҙҙең ҡиммәте юғала барған кеүек. Ни өсөн тигәндә, 90-сы йылдарҙа республикабыҙға үҙаллылыҡ яулау, дөйөм милли рух уяныу шарттарында ҙур күтәрелеш булып алды ла, хәҙер ундай тойғолар һүрәнләнә төштө, минеңсә. Элегерәк сәхнәнән яңғыраған шағир һүҙен аңлы ҡабул итеү, уны баһалау бар ине. Ә инде Зәйнәб Бейешеваның Салауат хаҡындағы әҫәрендә тап шул хаҡта әсенеп әйтә батырыбыҙ. Бына шуға күрә лә ижад кисәмдең тәүге өлөшөндә тап шул һүҙҙәрҙе яңғыратҡым килә. Уйнап түгел, тамашасыма Зәйнәб апайҙың теле менән үҙемдең һөйләүем аша ошо хаҡта еткергем килә.

Милләтебеҙҙең киләсәге хаҡындағы борсолоуҙар бер ваҡытта ла ташлап киткәне юҡ. Театрыбыҙға оло йәштәге тамашасыларыбыҙ менән бергә, "Урал батыр", "Оҙон-оҙаҡ баласаҡ", "Серле көршәк" кеүек спектаклдәргә мәктәп балалары ла килә. Шунда башҡорт мәктәбенән килгән балаларҙың да күбеһенең спектаклде наушник менән тыңлап ултырыуы бер аҙ һиҫкәндерә. Бер нисә йыл үткәс, залдағыларҙың барыһы ла шул хәлгә ҡалмаҫмы, тигән борсолоу бар. Хәҙерге балалар киләсәктә беҙҙең өлкән тамашасылар бит инде. Беҙ театрыбыҙҙы башҡорт театры тип атарбыҙ ҙа ул, тамашасыбыҙ башҡортса аңламаһа, ни эшләргә? Бында уйланырға урын бар.

**Шулай итеп...**

**Хөрмәтулла Ғаззали улының "атайыма оҡшарға тырышам", тигән һүҙҙәрендә тәрән мәғәнә ята. Әгәр ҙә кешеләр үҙ тормошонда ата-әсәләренә оҡшарға тырышһа, уларҙың традицияларын дауам итһә, кешелек һәм милләт алдында күп кенә проблемалар үҙенән-үҙе хәл ителер ине. Күп кенә бәләләребеҙ тамырҙарыбыҙҙан айырылыуҙан килгәнен бар тулылығында аңлайбыҙ хәҙер.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

***✓ Атай-әсәйҙән фатихалы булыу хаж ғәмәле менән бәрәбәр. Атайым аңлар, яҡлар тигән өмөтө күңелен йылытты. Әсәһе менән һөйләшмәйенсә, аңлашмайынса Гүзәлде үҙе менән саҡырырға ла ҡыйманы был юлы.***




Реабилитация үҙәгендә 24 көн даими күнекмәләр үтәү һөҙөмтәһендә өлгәшкән кимәле унан сыҡҡандан һуң ҡолаҡҡа ягылырлыҡ булып үҙгәрмәне. Лингофон аппаратының ыңғай тәьҫире билдәле, ләкин унда өҙләкһеҙ күнекмәләр эшләгәндә генә һөйләшендәге ҡытыршылыҡтарҙы йомшартып булыр ине. Үҙенә уңайлы ваҡытта йөрөргә форсаты булмағас, күнекмәләре аҙна-ун көнгә тиклем өҙөлөп торғаны ла йыш була. Шул аппаратты үҙенә табып биргәндә. Был шәп идея бит! Уйланып йөрөй торғас, сараһы ла табылды. Тормошта һәр ваҡыт шулай бит ул, алдыңа маҡсат ҡуйып, уға мотлаҡ ирешәм тип ихлас ынтылһаң, барыбер сараһы табыла. Бергә уҡыған иптәше авиация институтындағы дуҫынан шундайыраҡ аппарат әтмәләп булмаймы икән, тип белешкән һүҙ ыңғайы тура килгәндә. Әҙер аппарат ул егеттең үҙендә булып сыҡты, бына көтмәгән бәхет! Бирәм тиһә ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына. Ышанма инде, халыҡ һүҙенә. Ҡайһы бер боҙоҡ деталдәрен алмаштырып, көйләп бирә ала, тик әҙерәк аҡса кәрәк, тигән.

- Күпме һорай, белеш, түләйем! - Ҡыуанысынан Батыр ул егеткә әллә нимәләрен һораһа ла бирергә әҙер, йүнәтеп кенә бирһен. Батыр ятағы эргәһендәге балалар баҡсаһында икенсе курстан бирле бер ставкаға ҡараулысы һәм ярты ставкаға слесарь-электрик булып эшләй. Йәй практика мәлендә эшләп йыйған аҡсаһын тотоноп бөтһә лә, был эшендә эш хаҡын ай һайын алып бара, әҙерәк аҡсаһы бар. Теге егет тә шәп кеше булып сыҡты, һүҙендә торҙо: аппаратын һатыулышмай-нитмәй бирҙе лә ҡуйҙы.

Батыр һуңғы ваҡыттағы ныҡышмалылығы менән Гүзәлде ҡыуандырҙы ла, һағайтты ла, ҡурҡытты ла хатта. Һүҙҙәренең дөрөҫ әйтелешенә, һөйләмен тулыһынса тоғро әйтеп бөтөүбөтмәүенә, һөйләшенә ул тиклем ныҡ иғтибар итмәй, үҙ-ара аңлашыуҙарына ҡәнәғәт ине, хәҙер, күнекмәләрен даими эшләп барамы-юҡмы икәнен белешеп, тикшереп, бәйләнсеккә әйләнде. Быға хәтлем, тәүҙәрәк, дуҫтарса мөнәсәбәттән бер аҙым ситкә тайпылмаһалар, һуңғараҡ, туғандарса яҡын ағалы-һеңлеле мөғәмәләре сиктәрендә аралашһалар ҙа, икеһенең дә күңелендә тәрән хистәр күптән уянған ине инде. Ул хистәре йөрәк түрендәге күңел һандығы хазиналары үҙҙәре күрмәгән, белмәгән кеше булып маташһалар ҙа, күптән бөрөләнеп һандығына һыймай шытып сыға башлағайны. Мөхәббәт тойғоһо хис-тойғоларҙың иң сағыу, иң изгеһе. Ул тел осонда, ҡолаҡ сүкешендә, күҙ нурында, танау биҙҙәрендә, тән тиреһе күҙәнәктәрендә, мейе матдәләрендә йәшәгән тойғоларҙың батшаһы! Батыр менән Гүзәл дә, телдәре менән һөйөү хистәрен белгертмәһәләр ҙә, йәндәре-тәндәре менән ул тылсымлы хис эргәләрендә генә, үҙҙәренең йөрәктәрендә икәнен һиҙҙеләр. Ғүмерҙәрендә тәүге тапҡыр, икеһенең араһында ғына тыуған, быға тиклем таныш булмаған хистең нимә икәнен ҡапыл-ара ҡайҙан белһендәр? Яҡын кешеләр, туғандар бер-береһенә шундай йылы мөнәсәбәттә булырға тейештәрҙер, тип уйланылар. Бер-береңә яҡын, ҡәҙерле икәненде бөтә йәнеңтәнең менән һиҙгәс, ул һиҙеүҙән икеһе лә рәхәт, ләззәт кисергәс, нимә уны һүҙҙәр менән һөйләп тороу кәрәк? Үҙеңдең хистәреңде, уйҙарыңды икенсе кешегә көсләп тағам, күңдерәм тигәндә генә әйтеү, өгөтләү кәрәктер. Ә бер-береңдең хәлен, теләген, уйҙарын бер ҡараштан аңлайһың икән, һүҙҙәрҙең кәрәге лә юҡ. Әгәр ул иң изге хис һәр ваҡыт тел осонда ғына булһа, һаҡһыҙ әйткән һайын телдән өҙөлөп төшөп, елгә осоп бөтөр ине. Былай ҙа кешелек йән менән яратыуҙан, әүәлерәк, матур һүҙ менән яратыуға күсһә, хәҙер инде, тән менән генә яратыуға күсеп бөтөп бара...

Әйтмәнеләр. Батыр менән Гүзәл быға тиклем бер-береһенә һөйөү, яратыу, мөхәббәт һүҙҙәрен әйтмәнеләр, ул һүҙҙәрҙе әйтергә өйрәнмәнеләр ҙә. Уларса, туғандарса яҡын булыуға ни етә? Туғандар айырым, алыҫта, оҙаҡ йылдар аралашмай-ҡатнашмай-күрешмәй йәшәһәләр ҙә бер-береһенә йылы мөнәсәбәттәрен түкмәй-сәсмәй һаҡлай ала, сөнки уларҙы ҡан бәйләнеше даими тоташтырып тора. Ә башҡалар нисек кенә яҡын булмаһындар, айырылышһалар, ара йәһәт өҙөлә, йәндәргә йылыһын бөркөп торған яҡынлыҡ ялҡыны һүрелеп һыуына. Элекке яҡынлыҡты көҫәгән йән бойоғоуҙан һыҙланыу, һыҡтаныуға дусар ителә. Үҙенең иң яҡын яртыһын юғалтыуҙан мәңгелек һағыштарға һарыла. Улар бергә булғанда ғына үҙҙәрен бөтөн йән итеп тоя. Әсәһе менән һөйләшеүенән һуң тыуып, шул бөтөнлөктөң тарҡалыуына янаған тәүге ҡурҡыныс Батырҙың күңелен шик-шомға һалды. Ҡайҙа, нимә эшләп йөрөһә лә, йәнен өйкәп интектергән төйөр тынғы бирмәне. Кем менән көрәшергә, әсәйең менәнме?

Батырҙы юғалтып ҡуйыуынан ҡурҡыу тырышлығынанмы, әллә дауаланыу, күнекмәләр һөҙөмтәһендәме, ни булһа ла, күпмелер ваҡыт үтеүгә, Гүзәлдең һөйләшендә ҡолаҡҡа ягылырлыҡ үҙгәрештәр һиҙелде. Батыр Әлфиәне лә әхирәтен йәлләүҙән, ҡағыҙға яҙышыуҙарынан ҡаты тыйҙы. Айышһыҙ һүҙҙәренә яуап бирмәүен, һүҙҙәрен дөрөҫ, аңлайышлы әйтеүенә ҡарата талапсан булыуын теләне. Бергә эшләгән ҡыҙҙарына, таныштарына, аралашҡан кешеләренә лә Гүзәл һөйләшә ала икәнен ипле генә аңғартырға ҡушты, уның менән элекке кеүек аралашыуҙан тыйылһындар, күберәк һүҙ менән мөрәжәғәт итһендәр, тине.

Май айының аҙаҡтары ла етте. Муйыл гөрләп сәскә атҡан йәмле мәл. Улар күптән өйрәнеп бөткән ғәҙәттәге сәфәрҙәренә сыҡтылар. Паркка килеп тә быға хәтлем ҡыҙырып сығылмаған серле мөйөштәре менән таныштылар. Һуҡмаҡтары һәйбәтләп кипмәйенсә инеп булмаған ерҙәре үҙҙәренә тартып торһалар ҙа, һуңғараҡҡа ҡалдырҙылар. Шулай, килгән һайын таныш мөхиттең сиктәрен киңәйтеп, тау аҫтындағы йылға ярына тиклем барып күрергә ниәтләнделәр. Килгән һайын өмөтләнһәләр ҙә, унда барып еткәндәре юҡ әле.

Бөгөн дә ашыҡмай ғына быға тиклем танышҡан һуҡмаҡтарын үттеләр. Батыр Гүзәлен ҡултыҡлап, ҡулын усына алған. Бергә йөрөгәндә гел шулайта ул, хәҙер ғәҙәтләнеп тә киткәндәр инде. Ҡулын усына алһа, кәйефен, хәлен генә түгел, күңел кисерештәрен, йөрәк тибешен дә тоя кеүек. Батыр осрашҡас та Гүзәлдең ҡулын устарына ала һала, шунда саҡ йәне, донъяһы теүәлләнә. Ошо сираттағы сәфәрҙәрендә лә үҙенең уй-теләктәрен ипле генә һөйләп, Гүзәлдең аңына һеңдерергә тырышты. Һаман да, беҙ бергә булһаҡ, бергә тырышһаҡ, уңышҡа, һис шикһеҙ, өлгәшербеҙ, тип ышандырҙы.

Әрһеҙ ауыл балаһы Батыр бөтәһенә лә өлгөрҙө. Өҙгәләнмәй, зарланмай ғына имтихандарын тапшырҙы, диплом эшен уңышлы тамамлап, етәксеһенән хуплау һүҙҙәре ишетеп, комиссия ағзалары тарафынан һәйбәт баһа алды. Эшкә юллау комиссияһында ла һүҙҙе оҙаҡ сурытманылар: лесхоздан уның исеменә һорау ҡағыҙы килгән ине. Хәҙер унда барып, бөгөнгө хәлдәре менән танышып, йәшәр урынын асыҡлаһа, бер ай тирәһенә ауылға ҡайтып, ата-әсәһенә бесән эшләшер ҙә, килеп, яңы сифатта ең һыҙғанып эшкә керешер. Таныш ер, таныш эш, таныш кешеләр янына йәшәргә килер булғас, күңелендә бер ниндәй ҡыйынлыҡ, билдәһеҙлек, икеләнеүҙәре юҡ. Баш ҡалаға, Гүзәленә лә яҡын. Ни тиһәң дә, бөтәһе лә уңай әлегә. Иншаллаһ!

Тик баяғы әсәһе менән аңлашылмауҙары уңыштарға, уңайлыҡтарға ҡыуанырға ирек бирмәй, күңелен өйкәп тик тора һаман. Ары ла Гүзәле менән бергә була алыуҙарының төп шарты өйләнешеү, башҡа сара юҡ икәнен үҙе яҡшы аңлай ҙа ул, ҡайһылайтып әсәһен күндерергә? Әсәйҙең ризалығын, фатихаһын алмайынса ғаилә ҡороу кеүек ғүмерендәге иң яуаплы бурысты тормошҡа ашырып буламы икән һуң? Була икәнен уйлау түгел, күҙ алдына ла килтерә алмай. Атай-әсәйҙән фатихалы булыу хаж ғәмәле менән бәрәбәр, тиҙәр бит. Һаман да, атайым аңлар, яҡлар тигән өмөтө күңелен йылытты. Әсәһе менән һөйләшмәйенсә, аңлашмайынса Гүзәлде үҙе менән саҡырырға ла ҡыйманы был юлы.

- Мин эшкә урынлашырмын да ауылға ҡайтып, атайҙарға бесән эшләшеп килермен. Оҙағыраҡ булыр, ләкин һин күнегеүҙәренде ташлама, йыбанма, - тип ҡаты бойорҙо ул Гүзәлгә. -Ҡайтҡас та хат яҙырмын. Яуап яҙ. Һин барыбер егерме дүрт көнгә реабилитация үҙәгенә ятаһың бит. Августың ундарында килеп етергә һүҙ биреп, үҙҙәре өйрәнгәнсә, Гүзәлдең ике ҡулын устарына алып, ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ тотоп торҙо егет.

* * *

Гүзәле эргәһендә оҙағыраҡ булыр ҙа ине, фәҡәт ошо көндәрҙә ҡайтып етеүенең мөһим сәбәбе бар: атай-әсәйҙәренең алтмыш йәше һәм бергә йәшәүҙәренә ҡырҡ йыл тулыу айҡанлы, балалары иң ҡәҙерләләре хөрмәтенә оло мәжлес йыялар. Күрше Иван ағайҙың улы, Батырҙың бала саҡтан йән дуҫы Иман да ғаиләһе менән ҡайтҡан. Һылыу, мөләйем ҡатынын, ҡурсаҡ кеүек ҡыҙын эйәртеп, күстәнәстәрен тотоп инеп хәл белешеп сыҡтылар. Ата-әсәһе ҡушҡан исеме - Иван. Бер йылда бер мәлдәрәк тыуған балалар тәүге һүҙҙәрен әйтә башлағандарында бер-береһенең исемдәрен әйтергә лә өйрәткәндәрҙер инде әсәләре. Батыр Иван исемен "Иман" тип, Иван "Батыр"ҙы "Батя" тип әйтергә күнекте лә ҡуйҙылар. Батырға Ивандың ата-әсәһе ҡушҡан исеме менән өндәшһәләр, Батырҙың ата-әсәһе, күршеләренә "иман" һүҙенең матур мәғәнәһен аңлатҡайнылар, мосолман исеме Иман булһын тип, ҡыуанып риза булдылар. Иман да Батырҙың ата-әсәһенә, Батыр Иван ағайы менән Аня апайына кеүек, үҙ улдары булып үҫте. Бергәләшеп йүгерешеп килеп инһәләр, бер телем икмәкте бүлешеп бер туҫтаҡтан ойотҡан эстеләр, бер карауатта тәгәрәшеп йоҡланылар. Әсәләре бер-береһенән ҡойма аша ғына: "Малайҙар ҡайттымы?" тип белешәләр ҙә, тыныслана торғайнылар. Ике өйҙә лә улар бер тигеҙ наҙлы, ҡәҙерле балалар булып үҫте. Ашаған аштарын, кейгән кейемдәрен, уҡыған китаптарын, һөйләшкән телдәрен дә һинеке-минеке тип айырманылар. Шартлатып русса шиғыр һөйләнеләр, малайҙарса мут шаярып еңгәйҙәренә башҡортса таҡмаҡ әйттеләр. Шуныһы бигерәк ҡыҙыҡ. Иван армияға барғас, тәүге хатында: "Атай, әсәй, имен-һау килеп еттек. Беҙҙең яҡтағы кеүек һауа, тәбиғәт. Тирә-яҡта урман, йылға, тауҙар өйҙән мең километр алыҫта түгел, кәртә артында хеҙмәт иткән кеүек кенә. Күбеһе урыҫтар, ҡаҙаҡ, татар, ҡырғыҙҙар бар, башҡорттарҙан бер мин генә. Ярай, яйлап өйрәнермен әле" - тип яҙған.

Башҡорт мөхитендә үҫкән егет үҙен башҡорт балаһы итеп хис иткәндер инде. Һәйбәт, аҡыллы егет ул Иван. Бәләкәй сағында ҡустыһы менән ике һеңлеһен ҡурсалап ҡына алып йөрөгәненә көнләшкән Батырҙың: "Эх минең дә ҡустыларым йә һеңлеләрем булһа, мин дә ҡарап ҡына алып йөрөр инем," - тип эсе көтөрләй торғайны. Ундай бәхет тәтемәне.

Иман дуҫы ҡыҙын етәкләп килеп ингәндә, Батыр атаһы менән урам уртаһында үҫкән ҡайындар араһына әүеҫлек һымаҡ ҡорама ҡороп бөтөп йөрөйҙәр ине.

- Һаумы, апа! Батыр дуҫ, шәпме! Ҡалай йәтеш япма килеп сыҡҡан! -Ҡул биреп күреште, дуҫын ипле генә ҡосаҡлап, арҡаһынан ҡағып алды.

- Ҡунаҡтарҙы өйҙә тонсоҡтороп ултыртҡансы, йәйге матур көндә урам иркенлеге кем менән уртаҡ тип, өҫтәлде ошонда әҙерләргә ниәтләнек әле.

Шул яңы ҡорам аҫтында һөйләшеп, гәпләшеп ултырҙылар дуҫы менән.

Уйнап йөрөгән ҡыҙына ҡарап ултырған дуҫы, бойоғоп, уйға батты.

- Нимә, эх, үҙемдең ҡыҙым булһа ине, тип уйланып ултыраһыңмы әллә?

- Бала тынысландыра икән. Донъяға ниндәйҙер күркәмлек, йылы бөркөп торған йәм өҫтәй.

- Фәйләсүфләнгәнсә, өйлән дә, әйҙә, бәпәйҙәрең булыр. Бер ҡыйынлығы ла юҡ! Йәне теләгән, йылан ите ашаған.

- Анһат һиңә әйтеүе!

- Нимәһе ҡыйын булһын? Уҡыуыңды тамамланың, кәләшеңде, балаңды аҫырарлыҡ белемең, көсөң, һаулығың бар, шөкөр, тиген дә, әйҙә алға! - Аңғармаҫтан дуҫы Батырҙың йөрәгенең иң ныҡ өйкәлгән еренә ҡағылды. Яҙмышы бөгөнгә ҡатмарлы хәлдә икәнен ишетеп булһа ла белһә, бәлки, өндәшмәҫ тә ине. - Өйләнергә уйлайһыңдыр бит, ҡасан туйыңа саҡыраһың? Ҡыҙың ҡайһы яҡтарҙан, кем? Эшләйме, уҡыймы?

Батыр, күңелен болоҡһоторға теләмәһә лә, Гүзәле менән ҡасан, ҡайҙа танышҡандары, кем булып ҡайҙа эшләүе тураһында ҡыҫҡа ғына аңлайышлы итеп һөйләп бирҙе.

- Әй әттә генәһе-е-е! Хәлдәрең хөртөрәк икән шул, дуҫҡайым.

- Ҡышҡыһын ҡайтып, әсәй менән һөйләшеп ҡарағайным, ҡырҡа ҡаршы килде. Хәҙер бөтә ышанысым Нәсимә апайымда. Әсәйҙе ул ғына ыңғайлата алыр. Атай менән дә һөйләшмәгәнмен әле, ул да аңлар, тип ышанам.

- Батыр, әйҙә минең әсәй ҙә инәй менән һөйләшһен, уның абруйын үҙең беләһең бит. Инәй уға ҡаршы килә алмаҫ ул...

- Ул турала уйламағайным. Үҙебеҙ хәл итергә көс етмәһә, әйтеп ҡарайыҡмы икән әллә? Әллә әлегә өндәшмәй торайыҡмы? Әсәй, күмәкләп миңә ҡаршы сыҡтылар, тип асыуланып ҡуймаһа ярар ине.

- Әсәйем һәйбәт дипломат та инде! Берәй уңайын табып, һиҙҙермәй генә, эште кәрәк юлға ыңғайлата алыр, тип уйлайымсы.

- Ярай, һөйләш, һөйләш. Тик ошо юбилей сараларын имен үткәреп, ҡунаҡтар таралмайынса, өндәшмәй торһон инде, былай ҙа мәшәҡәттәре күп, ҡаңғырып йөрөһә, күңеле кителер.

**(Дауамы. Башы 44-48-се һандарҙа).**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## Егеттәр, икмәк менән шаярмағыҙ

Колхоздарҙың гөрләп торған сағы. Мул уңыштар алына, бөтә тәр пландар үтәлә, йыйылыштарҙа алдынғыларҙы маҡтайҙар, буләктәр бирәләр. Мәҙәниәт йортонда уҙғарылған дөйөм йыйылыштарға бөтә ауыл халҡы бара, энә төртәр урын булмай. Теләгән кеше сығып һөйләй, тәҡдим яһай. Бына сәхнәгә иң оло колхозсы Хәйретдин бабай сыҡты. Ул тәүҙә етди ҡараш менән халыҡҡа бармаҡ янаны, шунан: "Егеттәр, икмәк менән шаярмағыҙ, улмы, ул инәйҙәрегеҙҙе... эһем-эһем", - тине лә, йоҙроғон төйә-төйә, урынына барып ултырҙы. Күп һүҙ көткән кешеләр шымды, аҙаҡ "эһем-эһем"дең мәғәнәһен һәр кем үҙенсә аңлап, көлә башланылар. Ә бабай, таш һынмы ни, тик ултыра, әммә йылмая, эстән генә "төшөндөрҙөм бит", тиҙер инде.

Иртәгәһенә лә ауылда Хәйретдиндең һүҙе телдән төшмәне, уны һәр кем үҙенсә әйләндерҙе-тулғандырҙы. Әле лә иген, икмәк мәсьәләһе килеп сыҡһа, "Егеттәр, икмәк менән шаярмағыҙ, эһем-эһем", тип көләшәләр.

Елегенә үткәрҙем, тигән әйтем был хәлгә майҙай ярала.

## Ҡатын тулап, ҡаҙан ҡайната

Беҙҙең күрше Әхмәтйән ағай күп йылдар колхоз рәйесе булды. Ҡатыны - уҡытыусы. Өфөнәнме, район үҙәгенәнме, һис булмаһа, ауыл кешеһенме, ағай гел өйөнә сәй эсергә алып ҡайта икән. Элек ни, газ юҡ, утынды ла йәйҙән әҙерләмәйҙәр. Ҡыш еттеме - утын килә, үҙе йыуан, үҙе сей, ҡатындар уны яндыра алмай интегә. Бер көндө Әхмәтйән ағай ауыл советы рәйесе менән фельдшерын төшкө ашҡа алып ҡайта. Хужабикә күп итеп билмән бөргән дә, тик уны тиҙ генә бешереп алыу өсөн утын сей, ә ир ҡабаландыра икән. Ҡатын да бирешмәгән, сыға һалып, берсиҙәтел кашауайының ике тәртәһенән һәм дуғаны ваҡлап, индереп яҡҡан. Билмән әҙер булған, ирҙәр уны ярапып ашаған, хужа ла шат, ти. Силсәүит менән фельдшер туйып, рәхмәт әйтеп, сығып киткәс, ир ҡатынынан: "Утынды мейестә киптергәйһеңме әллә, билмәнең бик тиҙ беште", - тип һораған. Ә ҡатыны: "Картыҡайым, миңә түгел, тәртә менән дуғаға рәхмәт әйт, улар бешерҙе", - ти икән.

Ҡатын тулап ҡаҙан да ҡайната, тәртә лә емерә, тигәнең ошо инде.

## Башҡорт менән ҡаҙаҡ

Һуғыш йылдарында, унан һуң да беҙҙең ауылда төрлө милләт кешеләре йәшәне. Тирмәндә ҡайҙандыр килгән бер ҡаҙаҡ эшләй ине. Уның Вакиға исемле бик сая, телгә оҫта, оҙон сәсле еткән ҡыҙы булды. Ҡыҙҙың Рәфҡәт исемле башҡорт егетенә күҙе төшкән бит. Егет йыуаш, әммә һылыу, үҙе ҡурайсы. Ҡаҙаҡ хәлде һиҙеп ҡалған да, ҡыҙына егетте хурлап һөйләй икән: "Баскорт, истәк бит, анра ҡуй суң". Был хәбәрҙе Рәфҡәт ишетеп ҡалған һәм "Һай, ҡаҙаҡ, һин бит үрксәһеҙ дөйә, ҡыҙыңды ҡатыныңды ҡушып бирһәң дә алмайым", - ти икән. Ҡаҙаҡ нығ гәрләнгән, егеткә ташланған, ярай кешеләр булған, һуғышмағандар. Ә Рәфҡәт ҡаҙаҡты һаман ярһытҡан: "Ҡыҙың үҙе миңә, ҡасып китәйек, бергә булайыҡ, тине!" Ҡаҙаҡ ирешә башлаған, ҡыҙына ла эләккән. Гәрләктәнме, нимәнәндер ҡурҡыпмы, ҡаҙаҡ ғаиләһе менән күсеп китте.

Ике йондоҙ бәрелешһә, ут сыға; ике үсле тәкәшһә, һуғыш аса, тигәндәре дөрөҫ инде. Хәҙер ҙә беренсе әйткәнде аңламай торһа: "Эй, баскорт, истәк, анра ҡуй суң", - тип көләләр.

## Йыһаншин, тим, юҡ...

1960 йылдар тирәһеме икән, дүрт совет матросы бәләкәй судно менән океанда аҙаша. Поплавский, Йыһаншин, тағы ике урыҫ егете. Уларҙың юғалыу хәбәре бөтә донъяға тарала, ай буйы эҙләйҙәр. Матростар ҙа бирешмәй: хәл һаҡлау өсөн аҙ хәрәкәтләнәләр, аҙыҡ бөткәс, гармун һәм бил ҡайышын өтөп ашайҙар. Бөтә гәзиттәр быларҙы яҙа. Бер көндө почтальон килтергән гәзиттәрҙе Ғәбит ағай менән ҡатыны Файза апай ҙа уҡып ултыра. Уҡып бөткәс, Ғәбит ағай ҙур ҡәнәғәтләнеү менән: "Һай-һай, Йыһаншинды әйтәм, урыҫтар араһында ла бирешмәгән, афарин!" - тигән. Шул саҡ ут сәсрәтеп торған ҡыҙыу холоҡло Файза апай һикереп тора ла: "Ниндәй Йыһаншин булһын, Зиганшин бит ул!" - ти. Баҡтиһәң, былар береһе башҡортса, икенсеһе урыҫса гәзит уҡыған икән. Ҡыҙып китә былар, сәкәләшеү сәпәкләшеүгә күсә, гәзиттәр оса тирә-яҡҡа, ултырғыстар түкмәсә... Бәхеткә күрә, өлкән ҡыҙҙары килеп инә лә, һүҙҙәренән эштең ниҙә икәнен аңлай һәм араларына инә.

Тынысланыуын тынысланалар ҙа, әммә беҙ ҡапсыкта ятамы, бөтә ауылға тарала. Йышанһин - тарихҡа, ә Ғәбит менән Файза халыҡ теленә инде. Халыҡ теле лә тарих теле кеүек мәңгелек, оҙаҡ йәшәй.

## Эс, һары ҡоҙа, эс

Элек туй мәжлестәре аҙнаға һуҙыла ине, ат менән баралар, көн дә бер өйҙә һыйланалар. Әхмәҙулла ағай кинйә ҡыҙын күрше ауылға бирә. Ҡыҙ яғында туй бара: өҫтәлдә табаҡ-табаҡ ит, ҡорот, май-эремсек, бишбармаҡ. Ул саҡта араҡы юҡ, гел бал әсетәләр, буҙа ҡоялар. Ағайҙың күршеһендә лә мәжлес шәп бара. Хужабикә ҡунаҡтарҙы һыйлайым, тип, үҙе лә бик "тырыша", иртәгәһенә уҡытырға барғанда ла айныған бөтмәгән була. Дәрескә ингән был, күсереп яҙырға ҡушҡан һәм башын өҫтәлгә терәп, йоҡлап та киткән. Уҡыусылар шаяра, баҫтырыша, китап менән бәрешә башлай. Апайыбыҙ шау-шыуҙы туй мәжлесе, тип уйлаптыр инде: "Бейегеҙ, йырлағыҙ", - тип һөйләнә. Бер аҙҙан үҙе лә йырлап ебәрә һәм: "Эс әле, һары ҡоҙа, эс, күңелдәр күтәрелһен", - тип ебәрә. Уҡыусылар, әлбиттә, был хәлде ҡайтып һөйләй, тотош ауылға тарала. Бынан һуң апай үҙ теләге менән эштән китте.

Әсе балды әйтәм, бәһлеүән, дәресте лә эшкә һанамаған, апайҙы ла йырлатҡан, йоҡлатҡан. Тамаҡты тыймаһаң, оятҡа ла ҡалаһың, эштән дә ҡолаҡ ҡағаһың.

## Сәлихнең эсен жыртасыңмы?

Әхмәт хәлфә заманына күрә яҡшы уҡ дини белем алған кеше. Йәш сағынан уҡ ил гиҙергә, төрлө кешеләр менән аралашырға ярата. Бер мәл ул Ҡаҙан яҡтарына барып сыға, бер сауҙагәр менән таныша. Йыш бара торғас, уның Бибигөл исемле ҡыҙын күҙләй һәм өйләнә. Кәләшен үҙенә алып ҡайта, татар ҡыҙы һис башҡортсаға өйрәнә алмай, әллә теләмәй. Бер генә улдары була, үҫеп еткәс, уны башҡа сығаралар. Олоғая килә, хәлфә хужалыҡ эшенә Сәлих ағайҙы йомшай. Шулай бер ҡышта унан бесәнен ташыта ла, һуңғы йөктө бушатҡас, өйөнә ашарға индерә. Аш бешкән, ҡоймаҡ та ҡойолған. Хәлфә, шатлығынандыр инде, Сәлихте ашарға ҡыҫтай ҙа ҡыҫтай икән. Бибигөл быға аҡайып ҡарай, әммә хәлфә Сәлихте һаман ҡыҫтай икән. Еңгәй кеше түҙмәй: "Нәрсә, шул хәтлем кыстыйсың, ашап туйган бит, әллә Сәлихның эчен жыртасыңмы?" - тип һалдырған.

Ике ир ҙә уңайһыҙланған, Сәлих сығып китеү яғын ҡараған. Был хәлде ул башҡаларға ла һөйләгәндер инде, Бибигөлдең һүҙе хәҙер ҙә һәр мәжлес һайын ҡабатлана. Уйламай әйткән һүҙ быуындан-быуынға ҡош кеүек оса ғына. Халыҡ ауыҙын тыйып булмай шул.

## Тыуыр әле, ҡайҙа китһен

Ғәйнулла ағай бөтә булмышы менән сәйер ҙә, мәрәкә лә кеше ине. Ҡатыны Миңъямал менән татыу ғына йәшәнеләр, ун балалары булды. Ағай төшөрөргә ярата, әммә болармай, ирешмәй үҙе. Апай унынсы балаға ауырлы саҡта, ул силсәүеткә бер ай алдан барып, улым тыуҙы, тип яҙҙырған. Ҡатыны белеп ҡалып: "Тыумаған баланы нинә яҙҙырҙың, оят бит", - тип әрләгән. Ағайҙың иҫе лә китмәй: "Тыуыр әле, ҡайҙа китер тиһең, аҡса кәрәк бит, алданыраҡ алырбыҙ", - тигән. Яҙҙырған малай урынына игеҙ ҡыҙҙар тыуған. Бөтә тирә-яҡ мәрәкә итеп көлә, өҫтәп сурытып та ебәрәләр: "Ғәйнулланың ҡатыны ай һайын бала таба, то малай, то ике ҡыҙ". Ошо хәлдән һуң ауырлы ҡатын күрһәләр: "Бар, бара һалып яҙҙыр, тыуыр әле, ҡайҙа китер", - тип шаярталар.

Ғәйнулла ағай оялғандыр инде, байтаҡ ваҡыт өйҙән сыҡмай ятты. Нәфсене тыймаһаң, оятҡа ҡалыуың бик аңһат шул.

## Ҡоҙағый макароны

Беҙҙең ауылдан 20 саҡрымда ятҡан Төпкөл ауылға ҡыҙ бирҙеләр. Элек бит уҙаҡлашып һыйлайҙар ине. Нәзирәләрҙе бала-сағаһыҙ оло ғына кешеләр уҙаҡ итеп алған. Хужабикә ҡоҙаларҙы һыйлап, өтәләнеп йөрөй икән: әле бер ашын, әле икенсеһен ултырта. Иртән торғас: "Ҡоҙағый, ҡоҙама макарун ҡурам әле, Мәгниттән әпкилдем, бер кемдә лә күренмәй әле ул", - тип һөйләнәһөйләнә, макаронды майлы табаға һалып, утҡа ултырта. Майға ут ҡаба, өйгә төтөн тула. Нәзирә һатыусы булғас, макарон менән таныш, ҡоҙағыйына уны нисек бешерергә өйрәтеп ҡайтып китә.

Шунан аҙаҡ берәйһе туйға китер булһа: "Макарун ашап ҡайтырға онотмағыҙ", - тип мәрәкәләйҙәр. Тормоштағы бөтә яңылыҡ, хатта ризыҡтар ҙа төрлө юлдар менән килеп инә. Хаталар ҙа яһата, һабаҡ та бирә.

## Ялангач туамы?

Элек колхозға бесән мәлеме, уңыш йыйыу, мал ҡышлатыу ваҡытымы - тикшерергә, "ярҙам итергә" вәкилдәр ебәрә инеләр. Бер ҡышта Калинин колхозына вәкил булып Өфөнән Ефимова тигән ҡатын килде. Фермаға агитаторҙарҙы, бригадир, етәкселәрҙе йыйҙылар, ферма буйлап йөрөргә икән. Өфө вәкиле ҡарап тора ла: "Бу бәрәчләр ялангач туамы?" - тип һорап ҡуя. Ҡалғандар мыйыҡ аҫтынан ғына йылмая. Ни эшләһен, ветврач аңлата. Артабан һыйыр һарайына китәләр, ә унда малдарға силос һалалар икән. Әлеге вәкил: "Печәнне шулай чылатып бирәсезме, зыяны тимиме?" - тип төпсөнә.

Йәйгеһен шул уҡ колхозға Өфөнән ир вәкил килде. Ҡыҙыу бесән өҫтө. Көндәр аяҙ торған саҡта тиҙерәк бесән әҙерләп ҡалырға кәрәк. Әлеге вәкил эсенән ҡасып, ҡыуышта ята икән, үҙе ара-тирә сыға ла: "Һай-һай эҫе, былай булғас, колхозсылар бесәнһеҙ ҡала инде", - ти икән. Шулай, заманында хужалыҡ эшен бөтөнләй белмәгән томаналар килеп "өйрәтеп" йөрөгән булды. Хәҙер ҙә һарыҡ бәрәсләһә, кешеләр Ефимованы иҫкә ала, һағынып түгел, ғибрәт итеп. Шулай инде, донъяның фирүзәһе лә, һәтемтәйе лә бар, үҙҙәренсә аҡыл бирәләр.

## Рәхимә, балаң нисәү ул?

Һуғыш йылдарында олатайымдың әсәһе Ғәлиә ҡартләсәйемдә үҙебеҙҙә йәшәттек. Уға был мәлдә 90 йәш ине, шәп ишетә, яҡшы күрә, биш намаҙын ҡалдырмай уҡый, аш яғындағы урындыҡтан айырылмай. Әсәйҙәр әллә нисә көнгә юлға сығып киткәс, беҙ өйҙә уның менән генә ҡалдыҡ. Мәүә апайым менән алмашлап, тауышты үҙгәртеп, һаулыҡ һорашабыҙ, иҫәнләшә был, башҡа һүҙ өндәшмәй. Әсәй ҡайтты, сәй эстек. Бер мәл өләсәй әсәйҙән һорау ала: "Рәхимә, һин балаларыңды дүртәү, ти инең, алдайһың бит. Тауыштарын тыңлап ултырам, бишәү бит. Бер баланы ҡайҙан алдың, ирең ҡайтһа, нимә эшләйһең?"

Әсәй йылп итеп миңә ҡараны ла, көләп ебәрҙе. Эштең ниҙә икәнен аңлатты. Балалыҡ менән уймаҡтан уйын сығара яҙғанбыҙ. Бахыр өләсәй әсәйем өсөн борсолған, яҙыҡ юлға баҫыуынан ҡурҡҡан. Үҙе 104 йәшендә үлде.

## Оҙон ир

Ғәлийән менән Миңһылыу икеһе лә бәләкәй буйлы, үҙҙәре йыуан. Икеһе лә мәрәкәсел, уйын-көлкө ҡатыштырып һөйләргә ярата. Ҡунаҡ килә бер көн. Ҡатыны ирен магазинға ебәрә, "Оҙон ир ал, һәйбәт тиҙәр", - тип ҡала. Ир һатыусыға: "Апайың минән ялҡҡан, оҙон ир һорай, бынау аҡса етерме?" - тип аҡса һуҙа. Баҡтиһәң, ағай оҙон шешәле араҡы һораған икән.

Көләм, тиһәң, һәр нәмәнең ярығынбуйын күрәһең бит ул, үҙенән-үҙе көлкө ҡапсығы асыла.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓Ҡәйнәм тураһында сәғәттәр буйы һөйләргә була, бик аҡыллы ине, гел төптән уйлап эш итте. Ҡәйнә булыу үҙе бер һөнәр, оҫталыҡ икәнен мин хәҙер яҡшы аңлайым.



ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

# КОЛА МЕНӘН ТӘҘРӘ ТАҘАРТ,

## әммә ашҡаҙаныңды ағыулама

**Кока-кола... Уны барыһы ла, бигерәк тә йәштәр, балалар яратып эсә. Әммә уның организм өсөн ни тиклем зыянлы икәнен барыһы ла аңлап етмәй. Ниндәй генә аҙыҡ-түлек магазинына барып инмә, быяла кәштәләргә аллы-гөллө һауыттарға тултырылған газлы эсемлектәр теҙелгәнен күрәһең. Кока-кола ниндәй генә атама аҫтында тәҡдим ителмәй! Классик исеме -"Кока-кола". Диетик, түбән калориялы, составында шәкәр булмағаны - "Кока-кола Лайт". Ваниль тәме сыҡҡаны - "Кока-кола ванилин". Сейә тәме менән - "Кока-кола черри".**

Кола 1886 йылда АҠШ-тың Джорджия штатында Атланта ҡалаһында фармацевт Джон Пембертон тарафынан уйлап сығарыла. Кока-колаsuccessfulның төп ингредиенттары - өс өлөш кока ағасының япраҡтары, ошо уҡ япраҡтарҙан алынған кокаин, бер өлөш тропик кола ағасы сәтләүеге. Килеп сыҡҡан эсемлекте бөтә төр нервылар сирҙәренән дарыу урынына файҙаланғандар. Кокаин ул ваҡытта тыйылмаған була, ирекле һатыуға сығарыла һәм кеше ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерһен өсөн колаға ла ҡушыла. 1890 йылда эсемлек яһау өсөн коканың йәш япраҡтары урынына төрлө химик матдәләр ҡушыла башлай. Хәҙерге кока-коланың составында 11 процент шәкәр, Е 150 буяуы, ортофосфор кислотаһы, кофеин һәм төрлө тәм биреүселәр бар. Төрлө мәғлүмәттәр буйынса, етештереүселәр был эсемлеккә бөжәк тә ҡушалар, ә динебеҙҙә бөжәктәрҙе ашау тыйылған.

Күҙҙе ҡыҙыҡтырған сағыу төҫтәге шешәләрҙәге коланың зыяны хаҡында гәзит уҡыусыларыбыҙ хәбәрҙармы икән? Әйҙәгеҙ, бер нисә кешенең фекеренә ҡолаҡ һалайыҡ.

**Азат:** Кола арзан эсемлек. Үҙебеҙҙең башҡорт милли эсемлектәре - ҡымыҙ һәм айранға хаҡтар юғары һәм улар бөтә магазиндарҙа ла һатылмай. Шуға кола менән һыйланырға яратам. Әгәр ҙә үҙебеҙҙең милли эсемлектәр бар магазиндарҙа ла һатылһа, шулар менән генә туҡланыр инем, сөнки улар файҙалы һәм шифалы...

**Гүзәлиә:** Бала саҡта кока-коланы яратып эсә торғайным. Таныш табип уның зарары тураһында һөйләгәс, ҡулланмай башланым. Әхирәтем кока-кола менән унитазды таҙартып булыуы хаҡында һөйләгәс, тикшереп ҡарарға булдым. Ысынлап та, бик яҡшы таҙартҡыс матдә бит был! Хатта сәйнүкте уның ярҙамында ялтыратып ҡуйҙым.

**Айгөл:** Медицина тикшереүҙәренән күренеүенсә, кока-кола һәм башҡа газлы эсемлектәр кеше организмы өсөн бик зарарлы. Коланы ҡулланмайым, сөнки миңә һәм тыуасаҡ балама уның насар йоғонтоһо буласағын яҡшы аңлайым. Кешеләр үҙҙәренең наҙанлығы арҡаһында был эсемлектең ни тиклем организмға зыянлы икәнен аңлап етмәй. Бер нисә тапҡыр Америкала булырға тура килде. Унда 70-80 йәшлек әбейҙәр ҙә коланы һыу урынына эсә, кока-кола уларҙың милли эсемлеге кеүек. Үҙ ваҡытында был тәбиғи аҙыҡ һаналһа ла, кока ағасының япраҡтары төнәтмәһе тыйылғандан алып, ул химик аҙыҡҡа әүерелә. Америкала бер уҡытыусы менән танышҡайным. Ул уҡыусыларын кола эсеүҙән арындыра алмауы тураһында зарланып һөйләне, сөнки кола бөтә ерҙә һатыла, арзан, ә балаларҙың тәмле эсемлеккә иҫе китеп бара. Был уҡытыусы уларҙы түбән калориялы кола эсеүгә генә күндерә ала һәм был илдә халыҡтың артыҡ ауырлыҡтан яфаланыуын газлы һуттар эсергә ғәҙәтләнеүҙән күрә.

**Наил:** Кола менән машинаның алғы тәҙрәһен таҙартырға булдым. Тәүҙә бер ниндәй саң күренмәне, яп-ялтыр. Әммә һуңынан ул йәбешкәккә әйләнде һәм саңды үҙенә йыя башланы. Цинкарь исемле коррозия менән көрәшә торған матдә бар, кола шул матдә кеүек үк һөҙөмтә бирҙе.

**Зөһрә ҠУНАФИНА әҙерләне.**

АҺ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!

# ГҮЗӘЛ ЗАТТЫҢ КӨСӨ...

## көсһөҙлөгөндә һәм аҡылында

**Сибай ҡалаһында таныштыҡ был матур ике апай менән. Көслө ҡатын-ҡыҙ, тиҙәр ундайҙарҙы. Башҡарған эштәре лә, уйлаған уйҙары ла, киләсәккә хыялдары ла уртаҡ уларҙың, икеһе лә уҡытыусы, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашыусылар. Әлеге мәлдә Ғилминур апай Сибай ҡалаһының 12-се мәктәбендә директор вазифаһын башҡарһа, Таңһылыу апайҙы республика халҡы журналист һәм урындағы ҡоролтай ағзаһы итеп тә белә. Быларҙан тыш, туғанлыҡ хистәре лә бәйләй уларҙы, 26 йыл апалы-һеңлеле кеүек ғүмер кисерәләр. Ҡәйенбикә - Таңһылыу Фәтих ҡыҙы һәм килен - Ғилминур Йыһанша ҡыҙы ҒӘЙНУЛЛИНАлар менән һөйләшеүебеҙ туғанлыҡ тойғолары һәм һәр гүзәл затты борсоған мәсьәләләр тураһында барҙы.**

**◆ Башҡорттарҙа килен кейәү һымаҡ уҡ ҡәҙер һәм һый-хөрмәткә лайыҡ булмаһа ла, һәр ваҡыт ҡәйенбикәһе һәм ҡәйенһеңлеләренә апай йәки һеңлегә әйләнгән, улар менән серҙәр бүлешкән, кәңәш һораған. Ошо бәйләнеш совет ваҡытында боҙолоп та киткән кеүек булды, шулай ҙа был яҡтарҙа йылы туғанлыҡ хистәре әле лә һаҡлана. Һеҙ, ҡайынбикә һәм килен булараҡ, бер-берегеҙгә туғандарса мөнәсәбәт булдыра алдығыҙмы?**

**Таңһылыу Фәтих ҡыҙы:** Киленемде көслө ҡатын-ҡыҙ булараҡ беләм, быны ул килен булып төшөп, ҡәйнә башҡорт ҡатындарына хас сабырлыҡ һәм ирендең туғандарын да бер туғаның кеүек ҡабул итә белеү яңы ғаиләлә үҙ кеше булып китергә ярҙам итте. Һәр ғаилә бер дәүләт һәм уның үҙенә генә хас йолалары була, унда килен үҙ урынын тапһа ғына бәхетле була ала. Хәҙер инде 26 йыл бергә йәшәйбеҙ, туғандар менән аралар бик татыу, быныһы - иремдеке, быныһы минеке, тип уларҙы айырғаным да юҡ. Үҙемдең бер туған апайҙарым булмағас, бәләкәй саҡта кешеләрҙең апайҙарына ҡарап, күҙем ҡыҙа торғайны. Ике ҡәйенбикәм дә апай кеүек, шуның өсөн Хоҙайға мең рәхмәтлемен. Улар минең яурындашенән сығып һорамайбыҙ, әллә үҙебеҙҙең ҡулда ҡот бар, әллә юрғаныбыҙға ҡарап, аяҡ һуҙа беләбеҙ. Әсәйемдең ҡото ҡыҙҙарына ғына түгел, ә Ғилминур киленебеҙгә лә күскән, сөнки һуңғы һулышына тиклем уның янында килен булды. Бөгөн дә мин, ҡәйенбикә булараҡ, киленебеҙҙе ҡарап, һынап йөрөйөм: ул эшендә лә, ғаиләһендә лә ҡотло. Әсәйемә яҡын мөнәсәбәттә булған, уның менән бер табаҡтан ашағандарҙың барыһы ла ҡотло. Ата байлығы улға йоҡмаҫ, әсә байлығы ҡыҙға йоҡмаҫ, тиҙәр, ә бына ҡот тигәнең, күрәһең, быуындан-быуынға күсә алырға һәләтлелер.

**Ғилминур Йыһанша ҡыҙы:** Мин Йылайыр районы Бикйән ауылында тыуып үҫтем, ғаиләлә бер ул, өс ҡыҙ тәрбиәләндек. Атайым менән әсәйем барыбыҙҙы ла уҡытырға тырышты, шуға ла барыбыҙ ҙа урта махсус йәки юғары уҡыу йортон тамамлағанбыҙ. Өйҙә гел уҡыу культы булды, гәзит-журналдарҙы ла күп уҡыныҡ. Әсәйем бик көслө холоҡло ҡатын, кәрәк ерҙә уҫал итеп һүҙен дә әйтә белде, ғөмүмән, бер ҡасан да йомшаҡлыҡ күрһәтмәне. Атайым юҡ инде, шулай ҙа әсәйем тыуған нигеҙҙе



*Әсәйем менән ете йыл бергә ғүмер иттеләр. Әсәйем бик яратты уны, килен, тип кенә торҙо. Беҙ ҡәйнәм менән бергә торманыҡ, шуға ла ҡәйнәгә ярап йәшәүҙең ауырлығын, бәлки, төшөнөп тә етмәйемдер. Һеңлем менән миңә ҡарағанда, әсәйем килененә нығыраҡ тартыла ине. Айһылыу һеңлем менән мин дә килен баланы йомшап өйрәндек. Шуны әйтергә кәрәк: киленебеҙ 50-не тултырып килә, ә үҙенең килен булараҡ бурыстарын һаман еренә еткереп, теүәл үтәй, ололарҙы ололай, кеселәрҙе кеселәй белә. Тырышлығы эшендә лә ярҙам итә уға, бөгөн мәктәп директоры вазифаһы йөгөн үҙенең нескә иңдәренә һалып, ҙур яуаплылыҡ менән тарта.*

йортонда бер-ике көн торғандан һуң, вузға ситтән тороп уҡырға инеү өсөн имтихан бирергә Өфөгә китеүе менән тәү тапҡыр дәлилләгәйне. Ғаиләле булһа ла, яҡшы уҡыны, өйҙә лә, эшендә лә өлгөрҙө. Әсәйем менән ете йыл бергә ғүмер иттеләр. Әсәйем бик яратты уны, килен, тип кенә торҙо. Беҙ ҡәйнәм менән бергә торманыҡ, шуға ла ҡәйнәгә ярап йәшәүҙең ауырлығын, бәлки, төшөнөп тә етмәйемдер. Һеңлем менән миңә ҡарағанда, әсәйем килененә нығыраҡ тартыла ине. Айһылыу һеңлем менән мин дә килен баланы йомшап өйрәндек. Шуны әйтергә кәрәк: киленебеҙ 50-не тултырып килә, ә үҙенең килен булараҡ бурыстарын һаман еренә еткереп, теүәл үтәй, ололарҙы ололай, кеселәрҙе кеселәй белә. Тырышлығы эшендә лә ярҙам итә уға, бөгөн мәктәп директоры вазифаһы йөгөн үҙенең нескә иңдәренә һалып, ҙур яуаплылыҡ менән тарта. Тимерйән ҡустым менән ике ҡыҙ тәрбиәләнеләр, оло ҡыҙҙары Әлиә БДУ-ның Сибай институтын ҡыҙыл дипломға тамамлап, эшләп йөрөй.

**Ғилминур Йыһанша ҡыҙы:** Килен булып төшкән сағымда миңә 22 генә йәш ине, шулай ҙа тәбиғәт тарафынан һалынған һиҙемләү тойғоһо, ғы ике фәрештә кеүек булды. Ә ҡәйнәм тураһында сәғәттәр буйы һөйләргә була, бик аҡыллы ине, гел төптән уйлап эш итте. Ҡәйнә булыу үҙе бер һөнәр, оҫталыҡ икәнен мин хәҙер яҡшы аңлайым.

**◆ Тәрбиә башы ғаиләлә икәнен барыбыҙ ҙа яҡшы беләбеҙ. Ҡатын-ҡыҙ булараҡ, әсәйҙәрегеҙҙән ниндәй тәрбиә алдығыҙ, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ оҫталығына өйрәнеп буламы?**

**Таңһылыу Фәтих ҡыҙы:** Минең әсәйемдең өҫтәленән бер ҡасан да ризығы өҙөлмәне, өҫтөндәге кейеме туҙманы, ҡулындағы аҡсаһы бөтмәне. Ана шундай ҡотло ҡуллы ине ул, үҙе лә, йорт-ҡураһы ла, тормошо ла ҡотло булды. Донъябыҙға ҡотто кәртәбеҙҙәге мал-тыуар ҙа өҫтәй ине. Атайым сығышы менән Баймаҡ районы Таһир ауылынан, ҡул эшенә оҫта ине. Ул 45 йәшендә йорт һалып йөрөгән ерендә генә үлеп киткәс, әсәйемә бер үҙенә биш баланы аяҡҡа баҫтырырға тура килде. Шуға ла күпләп мал тоторға тыйылған замандарҙа ла уның икешәр һыйыры була торғайны. Ана шул мал көсө менән асыҡмай, кейемгә моҡрамай йәшәнек. Әсәйҙән ҡалған һабаҡ: күпме аҡса алһаҡ та, бер ваҡытта ла кеташламай, гөрләтеп донъя көтөп ята. Мал да тота, йәй көнө еләккә лә йөрөй. Таңһылыу апай әйткән ҡот, донъя ҡото, ысынлап та, ҡатын кешенең ҡулындалыр ул, сөнки әсәй бер-ике сәғәт кенә өйҙә булмаһа ла, өй ҡотһоҙланып, йәме юғалып ҡала ине. Әсәйле булыуҙан мәхрүм итмәһен ине Хоҙай, тип доға ҡылып, уның булыуына һөйөнөп көн итәм. Бөгөн үҙем әсәй, ир ҡатыны булараҡ, йортомдағы нурҙың, иремдең һәм ҡыҙҙарымдың күңелендәге тыныслыҡтың сығанағы үҙем икәнен яҡшы аңлайым һәм ошо гармония юғалмаһын өсөн барыһын да эшләргә тырышам.

**◆ Һеҙ икегеҙ ҙә матур, сибәр ҡатын, ижади зауыҡ менән ҡоролған донъяғыҙ ҙа һоҡланыу ғына тыуҙыра, тимәк, һеҙгә әсәйҙәрегеҙҙән донъя ҡото ғына түгел, матурлыҡ ҡото ла күскән. Әсәйҙән алған ниндәй матурлыҡ һабаҡтары һеҙгә бөгөн дә донъя көткәндә ярҙам итә?**

**Ғилминур Йыһанша ҡыҙы:** Ошо йәшемә етеп, әсәйемде бер ҡасан да бысраҡ кейемдә күргәнем юҡ. Элек тә, гел эштә булыуға ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт өҫтө лә, өйө лә таҙа булды, быға беҙҙе лә өйрәтте. Иҙәнде көн һай-

ын йыуҙыра ине, эштән ҡайтыуына йорттағы бар эште бөтөрөп, ашарға бешереп ҡуя инек. Ғүмере буйы ауыл ерендә йәшәгән, күмәк балалар үҫтергән, хөкүмәт эше тип биле бөгөлгән әсәйемдең матурлыҡты тоя белеүенә, зауыҡына хайран ҡалырлыҡ. Бер ваҡыт сервант модаға инеп китте бит. Әсәйем шундағы ҡәҙерләрәк һауыт-һабаны йыш ҡына йыуҙырып, ялтыратҡансы һөрттөрөп, матур итеп теҙергә лә өйрәтә ине.

**Таңһылыу Фәтих ҡыҙы:** Минең әсәйем матур итеп кейенергә яратты. Урамда унан да ҡупшы, модалы итеп кейенгән кеше булманы, тип әйтһәм дә яңылышмайымдыр. Өйөбөҙ ҙә ҡурсаҡ кеүек ине, гел генә өйҙә ултырғас, донъяһын да гөл итеп тота алды. Унын, сәс ҡырҡма, тигән һүҙен йыҡмай, ологайғансы оҙон сәс менән йөрөнөм. Оҙон сәскә фәрештәләр ҡуна, яҙмышың, йөрөгән юлдарың гел уң булыр, тиер ине. Унан һуң, оҙон сәстең умыртҡа һөйәген сит-ят күҙҙән, насар энергиянан һаҡлауын яҡшы беләбеҙ ҙә инде. Әсәйем үҙе гел яулыҡ ябына ине, ихатаға кеше килеп инһә, башын тиҙ генә ҡаплай һалыр ине. Тик беҙҙе яулыҡ ябынырға өйрәтә алманы, сөнки замананы ла икенсе ине, уҡытыусы булып та эшләгәс, табынған идеалдар ҙа башҡасараҡ булғас, унын, яулыҡ ҡатын-ҡыҙҙы сит күҙҙән һаҡлай, тигән һүҙҙәрен ҡолаҡ сите менән генә тыңлар инек тә, онотор инек. Бөгөн әсәйҙең кәңәштәрен ултырып иҫләп алабыҙ ҙа, ҡалай аҡыллы булған, тигән һығымтаға киләбеҙ. Бәләкәйҙән бөхтәлекте, матурлыҡты күреп үҫкәс, был гәҙәттәр ҡанға һеңгән, мин үҙем дә зауыҡлы итеп кейенергә яратам.

Бөгөнгө студенттар яҡшы уҡыйҙар ҙа, эшен дә эшләйҙәр, компьютерҙы ла беләләр. Компьютер тигәндәй, дауаханаларҙа алтмыш йәшлек тәжрибәле табиптар был заман техникаһына төртөп ҡарарға ла ҡурҡып ултырғанда, беҙ әрләгән йәштәр компьютер аша ҡатмарлы операциялар яһай. Бөгөнгө йәштәр беҙҙенсә йәшәй, хеҙмәт итә алмай, беҙ бөтөнләй икенсе шарттарҙа үҫтек, белем алдыҡ. Быны, мәҫәлән, үҙем белем алған Сибай педучилищеһына барып инһәм, унда миңә белем биргән уҡытыусыларҙы ла, беҙ уҡыған саҡтағы студенттарға оҡшаған балаларҙы ла тап итә алмаясаҡмын бөгөн, сөнки улар бөтөнләй икенсе. Минеңсә, хәҙер йәштәр заман менән бергә бара. Әлбиттә, аттың алаһы ла, ҡолаһы ла булған кеүек, уларҙың араһында ла "ағы ла, ҡараһы ла" бар, тик беҙҙең быуын кешеләре араһында ундайҙар юҡмы ни?

Шулай ҙа бөгөн мине ҙур хәүефкә һалған нәмә: телевидение, интернет аша ирекле ғаилә тормошоноң рекламаланыуы. Беҙҙең әсәйҙәр ҙә, үҙебеҙ ҙә бер тапҡыр кейәүгә сыға ла, уның менән тора инек. Хәҙер никахһыҙ, рәсми теркәүһеҙ йәшәүселәр күбәйгәндән-күбәйә бара. Был киләсәктә йәмғиәттә ғаилә статусының юҡҡа сығыуына килтерәсәк, ә ғаилә, белеүебеҙсә, ул бөтә донъяның тотҡаһы.

**Ғилминур Йыһанша ҡыҙы:** Мәктәптә эшләгәс, яҡшы беләм, йәштәрҙең ғаилә ҡороуға еңел ҡарауы һөҙөмтәһендә тулы булмаған ғаиләләр күбәйә. Балалар йышыраҡ әсәһе менән генә тәрбиәләнә, шул арҡала төрлө проблемалар килеп сыға ла инде. Йәштәргә, бөтә нәмәне уйлап та ирҙең һүҙен өҫкә сығарырға тырышыр ине.

**Таңһылыу Фәтих ҡыҙы:** Хәҙерге заманда ҡатын-ҡыҙҙарҙың күпселек өлөшө ирҙәргә ҡарағанда әүҙемерәк. Ҡатын-ҡыҙ бөтә ергә лә өлгөрә: эштә лә, өйҙә лә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың шулай булыуында ирҙәр үҙҙәре гәйепле түгелме икән? Ир-егет белемле, аҡыллы, егәрле, тырыш булһа, ҡатын-ҡыҙ ирҙе тыңлап ҡына йөрөргә риза булыр ине. Ғаиләлә бындай атайҙың абруйы ла юғары булыр ине. Күслө ир-егеттәребеҙ юҡ түгел, тик уларҙың сит милләт ҡыҙҙары ҡулына эләгеүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Мөхәббәт тойғоһо ғүмер буйына дауам итә алмай, уның усағына гел яҡҡын өҫтәп торорға кәрәк. Шуға ла күҙе ҙур, ҡашы ай кеүек һыҙылып тора, бите аҡ ҡына, оҙон буйлы, тип түгел, ә был егет менән тормош көтөп буламы, тип кейәүгә сығырға кәрәк. Һылыулыҡҡа күҙ күнегеп китеүе мөмкин, ә ғаилә тормошонда мөхәббәткә ҡарағанда аҡыл менән эш итеү күпкә еңелерәк.

**Ғилминур Йыһанша ҡыҙы:** Беҙ үҫкәндә атайҙың ҡарашынан уҡ барыһын да аңлап тора инек, атайҙың баһаһын әсәй ҙә күтәрә ине. Бөгөн, ҡыҙғаныҫҡа күрә, күп ғаиләләрҙең дилбегәһе ҡатындарҙың ҡулында, улар күберәк һөйләй, бөтә мәсьәләләрҙе хәл итә, ә ирҙәргә былай йәшәү ҡулай ғына. Абруй кире ҡайтһын өсөн ир-егеттәр үҙҙәре лә көс һалырға, йәш ғаиләләрҙә малайҙарҙы ирҙәрсә тәрбиәләргә тырышырға ла тейеш.

**Таңһылыу Фәтих ҡыҙы:** Тәрбиәсе булыу ҡатын-ҡыҙҙың генына һалынған, ҡыҙҙар малайҙар менән мәктәптә үк идара итә башлай. Ҡатын-ҡыҙ - ул бик аҡыллы зат, шуға ла алтын урталыҡты табыу өсөн шул аҡылды эшкә

*Килен булып төшкән сағымда миңә 22 генә йәш ине, шулай ҙа тәбиғәт тарафынан һалынған һиҙемләү тойғоһо, башҡорт ҡатындарына хас сабырлыҡ һәм ирендең туғандарын да бер туғаның кеүек ҡабул итә белеү яңы ғаиләлә үҙ кеше булып китергә ярҙам итте. Һәр ғаилә бер дәүләт һәм уның үҙенә генә хас йолалары була, унда килен үҙ урынын тапһа ғына бәхетле була ала. Хәҙер инде 26 йыл бергә йәшәйбеҙ, туғандар менән аралар бик татыу, быныһы - ирөмдеке, быныһы минеке, тип уларҙы айырғаным да юҡ. Үҙемдең бер туған апайҙарым булмағас, бәләкәй саҡта кешеләрҙең апайҙарына ҡарап, күҙем ҡыҙа торғайны. Ике ҡәйенбикәм дә апай кеүек, шуның өсөн Хоҙайға мең рәхмәтлемен. Улар минең яурындағы ике фәрештә кеүек булды.*



**Ғилминур Йыһанша ҡыҙы:** Бөтә әсәйҙәрҙең дә тәрбиә алымдары берҙәр инде, ике ҡыҙымды үҫтергәндә мин дә әсәйемдең, ҡәйнәмдең һабаҡтарына таянам. Нимә эшләһәм дә, улар икеһе лә эргәмдә йөрөнө, эште бергә эшләргә тырыша инек. Бәләкәй саҡтан һәр беренең үҙенең эше булды. Бөгөн үҙемдең мәктәптән ҡайтып ингәнем юҡ, йорттағы бар эште ҡыҙҙарым башҡара. Өлкән ҡыҙымды эшкә өйрәткәнмендер, тип әйтә алам. Хужалыҡта ҡатын-ҡыҙ эшләргә тейеш эште лә эшләй, ашарға ла бешерә, бәләкәйе лә ҡул араһына инде.

◆ **Заман үҙгәргән һайын, тәрбиә алымдары ла, баһалары ла үҙгәрә бара. Һеҙ икегеҙ ҙә рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр бөтөнләй икенсе булған заманда тәрбиә алған быуын. Һеҙҙең фекерегеҙсә, хәҙерге йәш ҡатын-ҡыҙҙарға ниндәй сифаттар етеңкерәмәй? Үҙегеҙҙең күҙлектән ҡарағанда, уларҙың ниндәй сифаты йәки ҡылығы бер ниндәй билдәләнгән ҡалыптарға һыймай, тип уйлайһығыҙ?**

**Таңһылыу Фәтих ҡыҙы:** Йәштәрҙе бер ҡасан да насарларға ярамай. Миңә бер-ике йыл БДУ-ның Сибай институты гәзитендә баш мөхәррир булып эшләп алырға тура килде. эшләргә кәрәк, тип әйткем килә, бала ул магазиндан һатып алынған әйбер түгел, уйнап ялҡҡас, уны ташлап та булмай. Йәштәрҙең күнбайыш модаһына эйәреп, ирекле ғаилә тормошо менән йәшәүе насар күренеш, уның һөҙөмтәһе балаларҙың яҙмышында сағыла, шуға йәштәр ошо проблема өҫтөндә уйланһын ине.

Бөгөнгө йәштәр эшкә тиҙ өйрәнә, улар төрлө яңылыҡтарҙы ла тиҙ ҡабул итә, заманса уйлап, заманса фекер йөрөтә. Ике ҡыҙыма ҡарайым да, уларҙың йәшендә ундай аҡыл беҙҙә юҡ ине, тип уйлайым.

◆ **Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, күслөбөҙ, тигән булып, ирҙәрҙең урынын яулап алырға ынтылдыҡ та, хәҙер шуның арҡаһында үҙебеҙ зыян күрәбеҙ. Һеҙҙеңсә, башҡорт ғаиләһендәге атай абруйын нисек кире ҡайтарып була?**

**Ғилминур Йыһанша ҡыҙы:** Бая әйтеп үткәйнек инде, хәҙер ғаиләләрҙең 50 процентында балалар атайһыҙ тәрбиәләнә. Улар атайһыҙ үҫкәс, ир кешене бар тип тә белмәй, сөнки ул сит кеше, шуға ла ирҙең абруйы юҡ. Мәктәптәрҙә ир уҡытыусылар ҙа бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Әгәр ҙә ғаиләлә атай кеше баш булһа, балалар, бигерәк ҡыҙҙар, үҙҙәре ғаилә ҡорғас егергә кәрәк. Мәҫәлән, минең атайым һуғыш ветераны ине. Әле ул иҫән саҡта ла әсәйем телевизорҙан һуғыш мәлен күрһәтһәләр: "Атайың китеп барамы икән, ҡайһыһы атайың икән?" - тигән булыр ине. Һәр ваҡыт "Атайың әйтте, атайың нимә тиер" - тип кенә тәрбиәләне әсәйем балаларын, шуға ла ғүмер буйы атайҙан шөрләп йәшәнек. Ғаиләлә атайҙың абруйын күтәреү тик әсәйҙең генә ҡулынан килә, шуны онотмаҡ ине.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡатын-ҡыҙ, әсә кеше элек-электән милләт тотҡаһы булған, бөгөнгө көндә милләтте һаҡлап ҡалыу бурысы ла йышыраҡ уның иңенә ингәндә төшә. Тик быны башҡарып сығыу өсөн оран һалып, ҡысҡырып, алға ташланырға түгел, ә алтын урталыҡты таба белеп, аҡыл менән эш итергә кәрәклегенә ишара яһаны Гәйнуллиналар ҙа. Беҙ быны уларҙың туғанлыҡ бәйләнештәре миҫалында ла асыҡ күрҙек. Килене - килен, ҡәйенбикәһе - ҡәйенбикә була белеп, хис-тойғо алдынан аҡылды йөрөткәнгә лә улар араһында тулы гармония йәшәйҙер, моғайын. Тимәк, көсөбөҙ көсһөҙлөктә генә түгел, ә аҡыллы була белеүҙә лә түгелме һуң?**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Юлыңда таш ҡалдырма

Эврипид был һүҙҙәр менән, алдыңа ҡуйған маҡсатыңа ныҡышмалы рәүештә барған саҡта ул бығa торошло булырға тейеш, тигән идеяны әйтергә теләй, тырышлыҡ - кеше холҡонда иң төп сифаттарҙың береһе булып торорға тейешлеген раҫлай. Һиндостандан Мать Тереза иһә: "Тырышлыҡ - ул изгелек башланғысы", - тип был фекерҙе тағы ла көслөрәк яңғырата. Йәғни, ябай итеп әйткәндә, изгелек ни тиклем Аллаһҡа яҡыныраҡ, шул тиклем был юғары көс һәр кешегә мөхәббәт йүнәлтә. Кеше үҙ өҫтөндә ныҡышмалы эшләй икән, юлында ниндәй генә ҡаршылыҡтар осрамаһын, ул Аллаһ тарафынан әҙерләнгән урынға өлгәшә ала.

Маҡсатҡа илтеүсе юлда ятҡан таштарҙы йыйған саҡта, был мәшәҡәттәргә сумып, һуңғы һөҙөмтәне - үҙебеҙ күрәшкән төп маҡсатты онотоп ебәрергә ярамай. Юлда осраған ҡаршылыҡтарға артыҡ көс түгеү файҙаһыҙға булыуы ла ихтимал. Бындай саҡта тыныслыҡ һаҡлау һәм дөрөҫ эш итеү юлын һайлау аҡыллы ысулдарҙың береһе булыр ине.

Тикшеренеүселәр, уйлап табыусылар, ғалимдар һәм рәссамдар - барыһы ла теге йәки был ваҡытта үҙҙәренең асыштарына ынтылған саҡта билдәлелек сиген үткән, ныҡышмалыҡ уларға бүтәндәргә тормошҡа ашмаҫтай булып күренгән маҡсаттарына өлгәшер өсөн көс биргән. Әйтәйек, Ноа Вебстер инглиз теленең тәүге аңлатма һүҙлеген төҙөү өсөн юлында осраған таштарҙы алып ташлай-ташлай, егерме йыл ваҡытын сарыф иткән. Йырсы-шағир Ирвинг Берлин тәүге йыры өсөн бары тик тиндәр генә алған, әммә был уны кәмһетмәгән, һәм һуңғы сиктә уның йырҙары халыҡ-ара танылыу яулаған. Көс һалғанда башта күҙ алдына ла килтермәгән иҫ киткес уңыштарға өлгәшергә мөмкин. Христофор Колумб, каравеллаһына елкәндәр ҡуйыр алдынан, был экспедиция өсөн финанс мәсьәләһен хәл итеп, алдындағы ҡаршылыҡтарҙы алып ташлаған. Уның Һиндостанға яңы сауҙа юлын асыуға һалынған ныҡышмалы эҙләнеүҙәре бығаса билдәле булмаған яңы ерҙе - Американы асыу менән тамамланған. Кюри ханым үҙенең ғүмерен ғилми тикшеренеүҙәр үткәреүгә бағышлаған. Уның лабораторҙ тәжрибәләренә һалынған ныҡышмалығы һәм тырышлығы яңы химик элементтар - радий һәм полонийҙы асыуға алып килгән, был үҙ сиратында, радиоәүҙемлек һәм бөтә ядерлы физика теорияһына башланғыс һалған. Был осраҡта беҙ юлдан алып ташланған бер таш бик күп асыштарға юл асыу ихтималлығын күрәбеҙ.

Ҡаршылыҡтарҙы алып ташлау сыҙамлыҡ талап итә. Кешенең көсө саманан тыш һынауҙар кисергәндә, күңел ҡайтыуына алып килеүе лә ихтимал. Әммә һәр кем үҙендә оло көс барлығын тойғанда һәм танығанда, Эврепидтың "үҙеңдең юлыңда таштар ҡалдырма" тигән кәңәшенә ҡолаҡ һалырға көс табасаҡ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ҺАБАҠТАРЫ

**Үткән һандарҙа беҙ кешеләрҙең оҙағыраҡ йәшәй башлауы аҡыл үҫешенә бәйле булыуы һәм, гөмүмән, оҙаҡ йәшәү сере интеллектуаль һәм физик хеҙмәткә ҡайтып ҡалыуын билдәләп үткәйнек. Был юлы Рәсәй медицина фәндәре академияһы академигы, профессор, Рәсәй геронтология ғилми-клиник үҙәге директоры Владимир ШАБАЛИН нисек итеп оҙағыраҡ йәш ҡалыу тураһында кәңәштәр бирә:**

# ЙӨҘ ЙӘШКӘ ЕТЕР ӨСӨН...

## аҙыраҡ аша, күберәк хәрәкәт ит

### Мафусаил авангарды

**➘ Владимир Николаевич, генетиктар фекеренсә, кешенең биологик ғүмере 150 йәшкә тиклем һуҙыла, әммә беҙҙә 90 йәште үтеү бәхетенә өлгәшеүселәр бары тик 500 мең кеше тирәһе генә. Йәғни, 300 кешегә бер оҙаҡ йәшәүсе тура килә. Ә ҡалған 299 кеше нисек итеп был мафусаил авангардына ынтылырға тейеш?**

- Иң мөһиме: мейене туҡтауһыҙ эшләргә мәжбүр итергә кәрәк. Тикшеренеүҙәр баш менән әүҙем эшләп, үлгән нервылар күҙәнәктәре урынын тулыландырып, ҡалғандарының эш сифатын күтәреп тороу мөмкинлеген күрһәтте. Ҡартлыҡта ла үҫмер саҡтағы кеүек емешле эшләп булыуына түбәндәге исемдәр асыҡ миҫал булып тора. Софокл үҙенең "Эдип" тигән гениаль трагедияһын йөҙөнсө йәшендә яҙған. Лев Толстой, Вольтер, Гете, Бернард Шоу әҙәби гәүһәрҙәрен һикһән һәм унан да өлкәнерәк йәштәрҙә ижад иткән. Илья Репин, Иван Айвазовский иң яҡшы картиналарын 80-85 йәштәрендә яҙһа, Артур Рубинштейн 89 йәшендә концерттар биргән. Микеланджело һәм Тициан 90-ды уҙғанда ла ижад иткән. Бөйөк ғалимдар - Павлов, Крылов, Зеленский, Гамалея, Мичурин 80 йәшлек саҡтарында тәжрибәләр үткәргән һәм лекциялар уҡыған.

**➘ Ябай кешеләргә өлкәнәйә барыу менән хатта компьютер үҙләштереүе лә ҡатмарлаша. Нимә эшләргә?**

- Эйе, физик һәм хатта ҡайһы бер интеллектуаль һәләттәр йәш үтеү менән түбәнәйә, хәтер насарая. Күптәр тормошта барған үҙгәрештәр артынан эйәрергә хәлемдән килмәй, тип уйлай. Донъянан ситләшеү теләге тыуа. Был дөрөҫ түгел. Яңылыҡтан ҡурҡырға ярамай, уның ҡайһы бер элементтарына булһа ла төшөнөргә ынтылыу мөһим. Сөнки, интеллектуаль көсөргәнеш баш мейеһен нығытып ҡына ҡалмай, үҙендә ышаныс та үҫтерә. Алтмыш йәштән уҙған кешегә оҙаҡ йәшәүҙең бары тик бер генә ысулы бар: эшләү. Ялҡаулыҡ - яҡты донъя менән хушлашыуҙың иң тиҙ юлы.

### Үлемесле гонаһтар

**➘ Тимәк, ялҡаулыҡ юҡҡа ғына үлемесле гонаһтарҙың береһе, тип иҫәпләнмәйҙер?**

- "Үлемесле гонаһ" төшөнсәһен изге китаптарға индерәләр. Әгәр ҙә уны диндән айырмалы рәүештә ҡарағанда, был гонаһтар - сәләмәт йәшәү рәүешен әхлаҡи яҡтан да, физик яҡтан да ҡаты боҙоу булып тора. Йәғни, "үлемесле гонаһ" - ул кешенең һаулығын да, ғүмерен дә алыусы ғәмәл. Ялҡаулыҡ һәм саманан тыш ашау ғүмерҙе ҡыҫҡартыусы иң хәүефле үлемесле гонаһтар. Асыу, көнләшеү, төшөнкөлөккә бирелеү, һағыш, сабырһыҙлыҡ - былар ҙа кешене ҡаҡшатыусы "үлемесле гонаһтар" булып тора.

**➘ Ә кешегә нимә ярҙам итә?**

- Барыһынан элек, азатлыҡҡа һәм бойондороҡһоҙлоҡҡа көслө ынтылыш. Оҙаҡ йәшәүселәр бер ваҡытта ла ихтыярына ҡаршы килгәнде ҡабул итмәгән. Хатта иректә булмағанда ла улар эске донъяһы менән азат һәм бойондороҡһоҙ ҡалған.

**➘ "Бәхетле кеше генә оҙаҡ йәшәй ала" тигән әйтем бар. Был ысынлап та шулаймы?**

- Бәхетте тойоу - оҙаҡ йәшәүҙең психологик нигеҙе. Бәхет тышҡы шарттарға ҡарағанда беҙҙең эске тәғлимәттәребеҙгә күберәк бәйләнгән. Оҙаҡ йәшәүселәр үҙенең кәйефе менән дә идара итә һәм хатта күңелһеҙ күренештәрҙең ыңғай яғын күрә лә белә. Улар өсөн стакан һәр ваҡыт яртылаш тулы, ә буш түгел.

**➘ Беҙҙең йөҙөбөҙгә артыҡ йыйырсыҡты ниндәй кире тойғолар өҫтәй?**

- Ҡурҡыу, бигерәк тә үлемдән ҡурҡыу, кеше ғүмерен күпкә ҡыҫҡарта. Ул неврозға килтереүе ихтимал, ә күңел торошоноң боҙолоуы психосоматик төшөнкөлөккә алып килә. Был ашҡаҙан яҙваһы, ҡурылдай астмаһы, артериаль гипертония, шәкәр диабеты булыуы мөмкин. Әгәр ҙә инде кешенең психологик проблемаһын хәл иткәндә, ул тиҙ генә төҙәләсәк. Донъяла кешеләрҙең 10 проценттан күберәге был сирҙәргә нервылар ҡаҡшауы арҡаһында тарый, тип иҫәпләнә.

### Оҙаҡ йәшәү формулаһы

**➘ Ярай, оптимист булып, кешеләрҙе яратырға һәм асыуланмаҫҡа тырышырға мөмкин. Ә бына насар экологиянан, сифатһыҙ әсәр һыуҙан, магнит дауылынан, шул уҡ кәрәҙле телефон, телевизорҙарҙың зарарлы электромагнит нурҙарынан нисек ҡасып ҡотолорға? Күптән түгел, табибтар әйтеүенсә, төнөн йоҡонан, көндөҙ күтәренке кәйефтән мәхрүм иткән "электросмог" тигән яңы ҡурҡыныс һүҙ барлыҡҡа килде. Бының менән нисек йәшәргә?**

- Сәләмәт тормош рәүеше алып барырға. Төп ҡағиҙә: "Аҙыраҡ ашарға, күберәк хәрәкәт итергә, һәр ваҡыт яҡшы кәйефтә булырға". Был ҡанун беҙҙең ата-бабаларыбыҙ заманында уҡ формалашҡан һәм бөгөн бөтә заманса тикшеренеүҙәр менән дә раҫланған. Күпселек гериатрҙар (өлкән йәштәгеләргә һәм ҡарттарға медицина ярҙамы биреүсе терапевт табиб) ҡартайып барған кешеләр хеҙмәт режимын, әүҙем ял итеүҙе һәм дөрөҫ туҡланыуҙы күҙәтеп, махсус дарыуҙарға һәм аҙыҡ өҫтәмәләренә мохтажлыҡ кисермәй, тигән һығымтаға килә.

**➘ Хәрәкәт итеү тигәндән, күптәрҙең ултыраҡ эш, ә өлкәнәйә барған һайын, спорт менән шөғөлләнеү ауыр һәм хәүефле.**

- Кеше организмы генетик яҡтан тынысылыҡҡа түгел, ә хәрәкәткә программалаштырылған. Шуға күрә лә, ауырыһың килмәһә һәм оҙаҡ йәшәргә теләһәң, хәрәкәтлән. Өлкән кеше өсөн ҡатмарлы булмаған физик күнекмәләр һәм саф һауала йөрөүҙәр ашауға ҡарағанда ныҡыраҡ кәрәк. Сөнки гиподинамия (физик хәрәкәт, күнегеүҙәрҙең кәмеүе сәбәпле мускулдарҙың хәлһеҙләнеүе) матдәләр алмашыныу процестарын үҙгәртә, организмды метаболиттарҙан -ҡартайтыусы компоненттар йыйылыуын таҙартыу әүҙемлеген кәмәтә. Аҙ хәрәкәт иткән тормош рәүеше алып барған кешеләр 70 йәшкә еткәндә мускул көсөн үҙен тонуста тотҡан тиҫтерҙәренә ҡарағанда ике тапҡырға тиҙерәк юғалта. Беҙ ун йылдан ашыу 60-80 йәшлектәрҙән торған байтаҡ кешеләр төркөмөн күҙәтеп, телевизор алдында ултырыусылар менән сағыштырғанда көнөнә өс километрҙан ашыу юл үткәндәр араһында яман шештән үлеүселәр осрағы аҙыраҡ булыуын асыҡланыҡ. Бынан тыш, физик көсөргәнеш организмдың эндорфиндарҙы - бәхет гормондарын биш тапҡырға күберәк эшләп сығарыуына булышлыҡ итеүе дәлилдәр менән раҫланған.

**➘ Ә туҡланыуҙы нисек күҙәтергә?**

- Беҙгә көс ҡайтырлыҡ ашарға һәм эсергә кәрәк, ә уны кәметерлек итеп түгел. Әгәр ғүмерендә оҙайтҡың килһә, ашағанда сама бел.

**➘ Ә нисек итеп мейене күнектерергә?**

- Баш мейеһе - ул беҙҙең иң яҡлау ағза. Иң ҡыйыны - аҡыл ялҡаулығын еңеү. Баш мейеһе йыш осраҡта эштән түгел, ә байрамдан арый. Әүҙем эшмәкәрлектән ул бөтөнләй зыян күрмәй, киреһенсә, ныҡына һәм үҫешә. Мускулдар кеүек үк, мейе эшһеҙ ҡартая. Был һәр йәшкә лә ҡағыла. Әммә мейенең әүҙем эшләүе, бигерәк тә өлкәнәйгәс, хәтер һаҡлау һәм аҡыл айыҡлығы өсөн мөһим. Әгәр мөмкинлек бар икән, һөнәрең буйынса эшләүҙе дауам ит, йәш коллегаларыңа ярҙам ит, мәҡәләләр, китаптар яҙ. Сит телдәрҙе өйрән, кроссвордтар сис, шиғырҙар ятла. Был мейене ҡартайыуҙан һаҡлай.

**➘ Кислород асығыуы ғүмерҙе оҙайта, тиҙәр. Уның тураһында ла һөйләгеҙ әле.**

- Ҡыҫҡа ваҡытлы гипоксия ваҡытында, йәғни иркеле рәүештә 1,5-2 минутҡа һәм унан да күберәк тынды тотоп торғанда, йөрәк шәберәк һәм ҡеүәтлерәк тибә башлай, ҡан күберәк килә, баш мейеһе, йөрәк һәм башҡа ағзаларҙың ҡан тамырҙары киңәйә. Ирекле гипоксияны һауа һулағанда һәм кире сығарғанда тын тотоп тороп эшләргә мөмкин. Тауҙа йәшәүселәрҙе күҙәтеү һөҙөмтәһе, улар араһында оҙаҡ йәшәүселәр ҙә байтаҡ, кислород асығыуы организмды йәшәртеүен күрһәтте.

Һүҙемде йомғаҡлап, Сенеканың һүҙҙәрен ҡабатлайым: "Ғүмерҙе оҙайтыу сәнғәте - уны ҡыҫҡартмау сәнғәте ул".

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**АҠШ һәм Евросоюз университеттары ғалимдары организмды йәшәртеүгә һәм ғүмерҙе оҙайтыуға булышлыҡ итеүсе аҙыҡтарҙың исемлеген төҙөгән. Оҙаҡ йәшәүсе менюһына ҡеүәтле антиоксиданттар - ҡара шоколад, сәй һәм ҡәһүә, шулай уҡ алма, көртмәле, ҡара ҡарағат, һары сейә, әфлисун, гранат, слива, персик, ҡыҙыл виноград, ҡурай еләге, баҡса еләге, помидор, брокколи, шпинат, ҡыҙыл һуған һәм икмәк ингән. Улар барыһы ла зарарланған күҙәнәктәрҙе шәбәйтеүгә һәм уларҙың ғүмерен оҙайтыуға булышлыҡ итеүсе полифенолға бай. Белгестәр, балыҡ, ит, һөт һәм башҡа лылар организмға кәрәкле булған калориялар, майҙар һәм минералдар биреүен, ә йәшелсә һәм, тәү сиратта, емеш-еләк күҙәнәктәр ғүмерен оҙайтыусы биохимик элементтар менән туҡландырыуын билдәләп үтә.**

---

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

* * *

**9 декабрҙә** Орган залында **"Йәш дирижерҙар һәм йырсылар"** исемле программа менән Башҡортостан Республикаһының Халыҡ ҡоралдары милли оркестры сығыш яһай. Концертта Азамат Хәсәншин, Алина Әхмәтова, Ринат Хафизов, Әлфиә Хәбирова, Линар Дәүләтбаев, Ринат Хаҡиков, Алексей Коряковцев, Азамат Хисмәтуллин, Светлана Гребенкина, Иршат Ғәниев, Елена Рыкова, Диана Зөбәйҙуллина ҡатнаша.

* * *

**16 декабрҙә** филармонияның Ҙур залында тәүге тапҡыр башҡорт эстрадаһы ветерандары ҡатнашлығында **"Һағынам һине, сәхнә"** тигән ҙур концерт көтөлә. Бына улар - Фәриҙә Ҡудашева, Мәғфирә Ғәлиева, Рәшиҙә Туйсина, Рамаҙан Йәнбәков, Редик Фәсхетдинов, Миңлеәхмәт Ғәйнетдинов, Фән Вәлиәхмәтов, Рәйлә Аҙнаҡаева, Мәүлетбай Ғәйнетдинов, Фәнүнә Сиражетдинова, Гөлсөм Хәбибуллина, Флүрә Ноғоманова, Ғүмәр Әбделмәнов, Нәзирә Закирова, Лина Гәрәева, Рәис Вәғизов, Шамил Хәмәҙинуров, Лина Зарипова, Марат Әсәҙуллин, Тәнзилә Үҙәнбаева, Зөлфиә Ҡудашева, Римма Дашкина, Миңнур Килмөхәмәтова, Гөлнур Әйүпова, Мәғариф Әхмәҙиев, Мәүсилә Ғәйнетдинова. Был концертта халыҡ нисәмә йылдар буйы тик улар башҡарыуында ғына яратып тыңлаған музыкаль әҫәрҙәрҙе ишетәсәк, улар менән бергә йәшлек йылдарына әйләнеп ҡайта аласаҡ.

---

## ТАУЫҠТАР ӨСӨН "ЗДРАВУР НЕСУШКА" АҘЫҠ ӨҪТӘМӘҺЕ!

- Уны ашаған тауыҡтар хатта ҡышын да йомортҡа һала.
- Йомортҡалар эрерәк, ә ҡабығы ныҡыраҡ була.
- Тауыҡтар яҡшыраҡ ашай башлай.
- Тауыҡтарҙың һаулығы нығына, авитаминоз, каннибализм, тәпәйҙәр ауыртыу кеүек сирҙәргә бирешмәй.
- Тауыҡтар бер-береһенең йомортҡаһын соҡомай башлай.
- **"ЗДРАВУР"** өҫтәмәләре составында аҙыҡ ферменттары бар. Шуға ла аҙыҡ яҡшыраҡ үҙләштерелә, өҫтәмә ярҙамында аҙыҡты 10-15 процентҡа экономиялау мөмкин була.
- Йәш тауыҡтар иртәрәк йомортҡа һала башлай, ҡарттарының да йомортҡа һалыу һәләте оҙағыраҡ дауам итә.
- Был өҫтәмәнең һөҙөмтәһе 7-10 көндән һуң уҡ күренәсәк: тауыҡтарҙың тышҡы ҡиәфәте үҙгәреп, йомортҡаны күберәк һала башлаясаҡ.
- Өҫтәмәне ҡулланыу бик еңел: премиксты бер тауыҡҡа 1 грамм иҫәбе менән болғатырға кәрәк (1 балғалаҡта яҡынса 4 грамм).

**Өҫтәмәне почта бүлексәләренән һорағыҙ. Сертификацияланған. Реклама хоҡуғында.**
**www.vhoz.ru**

*✓ Ҡатын-ҡыҙҙар менән сағыштырғанда, ир-егеттәргә йәшәүе еңелерәк: беренсенән, улар һуңыраҡ өйләнә, икенсенән, иртәрәк донъя ҡуя.*
*(Генри Луис Меккен).*



## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**(Аҙағы. Башы 11-се биттә).**

### Сәйендә бесәй әсһен...

Мәүзиға апай бер бөртөк ҡыҙы Миләүшәне Әбйәлил районына кейәүгә бирҙе, үҙе Учалыла ҡалды. Кейәү тәҫкә һылыу, оҙон буйлы, бөҙрә сәсле, ҡулынан килмәгән эше юҡ. Бер яҡшының бер яман яғы була, тигәндәй, насар ғәҙәте лә бар: һәр нәмәгә үсегә торған ҡылтым кеше. Яңы йылға ҡунаҡҡа саҡырҙы апайыбыҙ. Әҙерләмәгән һыйы юҡ, ул бишбармаҡ, тултырма, бәлеш, бауырһаҡ... Һәйбәт кенә ҡунаҡлашып йөрөгәндә кейәүебеҙ үсекте лә китте, ҡайтырға йыйынды, ишек төбөндә тора үҙе. Ҡәйнә инәлә: "Һуң кейәү, исмаһам, аш аша, сәй эс баллап". Ә тегe: "Ашыңды эт ашаһын, сәйеңдә бесәй әсһен", - тип тик тора. Аптырағас, Мәүзиға апай: "Улайһа, берәй рюмка ҡояйыммы?" - ти. Кейәү йылмайып ебәрә лә "Кәнишнә ҡой, ас ҡайтып булмай ҙа инде", - тип яуаплай.

Йәнәһе, эсеп, туйып ҡайтып китә. Хәҙер ҙә кешеләр ҡунаҡҡа йөрөшкәндә был хәлде иҫләп көлә: "Ас ҡайтып булмай инде" - тигән һүҙ бер лаҡап булып ҡалды. Яҡшылыҡ ҡына түгел, кешенең кире яғы ла уны ғүмерле итә икән. Әлеге кейәү күптән үлһә лә, һаман иҫкә алына.

### Һаумы, 14-се берсиҙәтел

Колхоздар гөрләп торған саҡ. Хужаларҙың әле береһен, әле икенсеһен ҡуйып ҡына торалар. Бер йылды йәй уртаһында Данис исемле кешене рәйес итеп тәғәйенләнеләр. Был бик дорфа, эре генә һөйләшеүсе кеше булып сыҡты. Йомош-көнәш менән барған кеше янып-көйөп сыға бынан, аҡыра ла екерә икән.

Бер көндө ауылдағы сая, үткер, ғәзел һүҙле пенсионер Рәхилә инәй бара быға. Унъш йыйған осор. Инәйгә йыл да колхоз бушлай иген, бесән, һалам бирә, был шуны белешергә барған. Кабинетҡа ингән. Түрә быны ҡурмәмеш булып ултыра икән. Инәй бының алдына баҫа ла: "Һаумы, 14-се берсиҙәтел улым", - тип ике ҡулын һуҙа. Теге ни эшләһен, тора, күрешә, ултырырға ҡуша. Инәйҙең иҫе лә китмәй, һүҙен теҙә: "Мин почетный һәм атҡаҙанған колхозсымын. Иген, бесән, һалам бушлай бирелә. Ана шуларҙы иртәгә үк ебәрт, урын әҙер. Улым, мин ике килергә яратмайым, килгәнем дә юҡ". Хужа ыҡ-мыҡ итә лә, вәғәҙәһен бирә. Инәйебеҙ ишек төбөнә еткәс: "Улым, һин бындай холоҡ-ҡылығың менән минә 15-се берсиҙәтелде лә күрергә насип итерһең әле", - ти. Данис был һүҙҙәрҙең кинәйәһен ярты йылдан үҙен эштән бушатҡанда ғына аңлай. Инәй 15-се берсиҙәтелде лә күрә.

Кеше холҡо - көҙгө сағылышы, уның аша киләсәкте лә күҙаллап була, тигәндәре дөп-дөрөҫ икән.

### Бибисторг

Беҙҙең элек Әбйәлил районына ҡараған Билал ауылында эшләгән саҡ. Магазин, колхоз идарәһы, клуб бер тирәлә генә ултыра. Магазинға күрше генә Бибиниса апай бабайы менән йәшәй. Бер көндө магазинға таҡта сәй килгән, ҡатын-ҡыҙ геү килеп йүгерә шунда. Күршебеҙ Ғәли ағай ҙа барған, сәй алған да ҡайтып килә икән. Осраған ҡатындар сәйҙе ҡайҙан алыуын һорағас: "Бибисторгтан алдым, кешеһен һайлап ҡына бирәләр, магазинға барып яфаланмағыҙ", - тип, тәләкләп киткән дә барған. Ҡатындар баш вата, ул Бибисторг Темәстәме, әллә Түбә руднигындамы икән? Сәй алған ҡатын-ҡыҙға осрағас ҡына улар Ғәли ағайҙың мәрәкәһен аңлағандар һәм урам яңғыратып көлә башлағандар. Шунан аҙаҡ магазин һүҙе онотолдо, яңы һүҙ - Бибисторг барлыҡҡа килде.

Берәүҙең шаянлығы һәр кемде һелкендерә, йүгертә, тилертә тигәндәре ошо инде. Бибиниса апай ҙа халыҡ телендә ҡалды. Ғүмерлеккә.

### Урыҫ һине, туҡмайым, ти

Беҙҙең тирәлә шаян кешеләр күп. Ғилметдин бөтәһенән дә уҙҙыра. Бер көндө Айрат, Сөнәғәт ағай, Ғилметдин Белорецҡа барған. Эштәре бөткәс, автобус туҡталышына килгәндәр. Кеше күп, урыҫы ла, башҡорто ла бар икән. Шаян Ғилметдин түҙмәй, ҡолаҡҡа ҡатыраҡ Сөнәғәт ағайға: "Анау мөйөштәге урыҫ һинең кәрәгеңде бирәм, тип тора", - тип бышылдай. Сөнәғәт урыҫҡа ҡарап тора ла: "Ә мин хәҙер урыҫтың үҙен туҡмәстерә һуғам", - тип, һуғып та ебәрә. Урыҫтың танауы ҡанай, кешеләр "Милиция" тип ҡысҡыра башлай. Эш олоға киткәс, Ғилметдин Сөнәғәттең ҡолағына "Ағай, ҡас, эш харап", - тиеүе була, теге йән-фарман ҡаса башлай, әммә бер мәрйә быны яғаһынан тотоп ала. Ни эшләһен, Ғилметдин мәрйәгә килеп: "Не держи, он сумашной, заразной больной", - тип алдарға мәжбүр була. Мәрйә ҡурҡа ла, тегене ысҡындыра. Урыҫҡа ла Сөнәғәтте "сумашной" - тип аңлатырға тура килә Ғилметдингә.

Хәҙер ҙә туҡталышта торғанда: "Анау урыҫ һине туҡмайым, ти", - тип көләләр. Уйнаһаң да уйлап уйна, уйындан уймаҡ та, туҡмаҡ та сыға, тигәне ошолор инде.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БАЙЛЫҒЫҢ ИШӘЙҺЕН, ТИҺӘҢ...

### күршеңде лә ҡайғырт

Бизнесты ҡурҡыу түгел, хыял төҙәй.

**(Роберт Киосаки).**

Сысҡанға икмәк валсығы бир, ә ул һинән бер банка һөт һораясаҡ.

**(Генри Форд).**

Мин тыуғанмын - бәхет өсөн шул ғына кәрәк.

**(Альберт Эйнштейн).**

Ҡатын-ҡыҙға аҡыл тигән нәмә дөрөҫ йәшәү өсөн генә түгел, бәләкәй ахмаҡлыҡтарын аҡлау өсөн дә ярҙам итә.

**(Ф. Ларошфуко).**

Әгәр ҙә берәй ҡасан бәхет артынан ҡыуып, уны тапһағыҙ, һеҙ, күҙлеген эҙләгән ҡарсыҡ шикелле, бәхеттең гел танау төбөндә булғанын аңлар инегеҙ.

**(Бернард Шоу).**

Ҡатын-ҡыҙҙар менән сағыштырғанда, ир-егеттәргә йәшәүе еңелерәк: беренсенән, улар һуңыраҡ өйләнә, икенсенән, иртәрәк донъя ҡуя.

**(Генри Луис Меккен).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йыл һайын сифат конкурсында еңеүсе бер фермерҙан ул үстергән кукуруз уңышының серен һорағандар. Фермер, был уңыштың бар сере - үскән кукурузымдың иң яҡшы сортлы сәкәндәрен күршеләремә таратыуҙа, тип яуаплаған. "Нисек инде улай, - тип аптыраған кешеләр, - һуң күршеләрегеҙ ҙә яҡшы уңыш үстергәс, һеҙгә конкурент булалар ҙабаһа". Шунан фермер үҙ серен тулыраҡ аңлатып биргән: "Бәләһегеҙме, ел бит минең баҫыуымдағы кукуруз һеркәләрен - күршеләрҙекенә, күршеләрҙекен минекенә тарата. Әгәр күршеләрҙең баҫыуында кукуруз насар сортлы булһа, тиҙҙән минең баҫыуҙа ла үҫентеләр насарланасаҡ. Мин яҡшы сортлы кукуруз сәсәм икән, күршеләрҙең баҫыуында ла яҡшы сортлы кукуруз үҫеүен хәстәрләргә тейешмен. Ә үҙ сәсеүлеген кем нисек тәрбиәләй - бынығы инде икенсе мәсьәлә..."**

**Беҙҙең тормошта ла шулай бит. Уңышлы булырға теләгән кеше үҙ әйләнә-тирәһендәгеләрҙең дә уңышлы булыуы тураһында хәстәрләргә һәм уларға ярҙам итергә тейеш. Кем яҡшы йәшәргә теләй, башҡаларға ла яҡшы йәшәргә ярҙам итергә тейеш. Әйләнә-тирәндәгеләр ни тиклем яҡшыраҡ йәшәһә, һиңә лә яҡшыраҡ бит. Беҙ барыбыҙ ҙа бер-беребеҙ менән бәйле был донъяла..."**

## БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БИҘӘНЕҮ ӘЙБЕРҘӘРЕ...

### зарарлы ла була ала

**Британ биохимигы Ричард Бенс өс йыл косметика ҡулланған ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаулыҡ торошон өйрәнгәндән һуң, ҡот осҡос һығымталар яһай. Йәғни ул, әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ көн һайын биҙәнеү әйберҙәре менән ҡулланһа, бер йыл эсендә уның организмына ике килограмға яҡын химик матдәләр инә, тип раҫлай.**

Уның билдәләүенсә, ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар көн һайын 20-нән ашыу төрлө биҙәнеү сараһы ҡуллана. Өҫтәүенә, уларҙың күбеһе яратҡан помада йәки кәләменең яраҡлылыҡ ваҡыты күптән үтеүгә иғтибар ҙа итмәй. Һөҙөмтәлә, уларҙың уныһын туғыҙы һәр ваҡыт яраҡлылыҡ ваҡыты үткән продукция ҡуллана.

Кремдар, битлектәр, скрабтар, лосьондар, пудралар... Төп хәүеф, ти ғалимдар, организмға эләгеп, тиҙ ҡартайыуға һәм төрлө онкологик ауырыуҙар барлыҡҡа килтереүгә сәбәпсе булған яһалма биҙәнеү әйберҙәрендә. Төрлө матдәләрҙең тире аша һеңдерелеүе ауыҙ аша ингәненә ҡарағанда ҙурыраҡ күңелһеҙлектәргә килтереүе мөмкин. Әгәр ҙә помаданың зарарлы тәьҫире менән төкөрөктәге һәм ашҡаҙандағы ферменттар көрәшә алһа, кремдағы химик ингредиенттар тире аша шунда уҡ ҡанға барып эләгә.

- Тиреғә һөрткән кремдарҙы тикшереү бик мөһим, уларҙың химик составы ҡурҡыныс түгел, тип кенә ҡарарға ярамай, - ти британ биохимигы. - Йыйырсыҡтарға ҡаршы кремдар ҡалын итеп һөртәлә, өҫтәүенә, ҡатын-ҡыҙҙар бер тәүлек эсендә бер нисә крем ҡуллана. Уларға зарарлы матдәләр ҡушылһа, ниндәй һөҙөмтә биререн күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Яраҡлылыҡ ваҡыты үткән бер помадалар тағы ла хәүефлерәк - улар тиреғә инфекция индереүе мөмкин. Тушты һаҡлау ваҡыты - өс айҙан ярты йылға тиклем. Күҙ ҡабағы өсөн тень, пудра өс йыл һаҡлана ала. Ә ирен буяуын бер йәки йыл ярым ҡулланырға мөмкин.

Йыуынмайынса йоҡларға ятыу ҙа ҙур ғына зарар килтерә: косметика тире күҙәнәктәрен тығынлай һәм тире тын ала алмай. Был биттә төрлө һыткылар барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе була.

Һәр йыл һайын донъя баҙарына йыйырсыҡтарға ҡаршы кремдарҙың 11 меңгә яҡын яңы төрө сығарыла. Әлбиттә, уларҙың күбеһе хәүефһеҙлеккә ҡаршы тикшереү үтмәй. Уйланырға урын бар.




"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәррирлек: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Динара ЯҠШЫБАЕВА, Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)
Тиражы - 5615
Заказ 5184